ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28-3 март - апрель (буранай - алағарай) 2020

№ 13 (899)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклә

**_Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 2020 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә 17 апрелгә тиклем яҙылып, уны майҙан алдыра башлай алаһығыҙ. ПР905 индекслы "Киске Өфө" ике айға 225 һумға түләсәк. Ә 2020 йылдың икенсе яртыһы өсөн гәзитебеҙгә яҙылыу 1 апрелдән башлана. Бергә булайыҡ!_**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Дарман кәрәк булһа...**

кил Шамонинға!



6

**Бөрйәндәр тәбиғәткә ереккән,**



улар өсөн етешлек барлыҡ-юҡлыҡ менән үлсәнмәй

8-9

**Исмәғзәм дуҫым**



11

**Әрүәхтәр ярҙамы булдымы?**



13

**ТВ-программа** 14

*ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!*

# КӨСӨБӨҘ - БЕРҘӘМЛЕКТӘ

**25 мартта Рәсәй Президенты Владимир Путин ил халкына барыбыҙҙы ла борсоған мәсьәлә - донъяла коронавирус эпидемияһына бәйле хәл-торош, уға ҡаршы тороу саралары тураһында мөрәжәғәт итте.**

Владимир Владимирович тәүҙә илде һаҡлауҙың алғы сафтарында торған табиптарға, фельдшерҙарға, шәфҡәт туташтарына, дауахана, поликлиника, фельдшер-акушер пункттары, тиҙ ярҙам хеҙмәте хеҙмәткәрҙәренә, ғалимдарыбыҙға рәхмәтен белдерҙе һәм граждандарҙы табиптарҙың һәм власть органдарының күрһәтмәләренә иғтибарлы булырға саҡырҙы. Бигерәк тә был халыҡтың тиҙ бирешкән нескә төркөмдәренә: оло йәштәгеләргә һәм хроник сирҙәр менән яфаланыусыларға ҡағыла, тип билдәләне Президент. Артабан ул ошо ауыр хәл-торош шарттарында күрелергә тейешле сараларҙы барланы.

• Конституцияға үҙгәрештәр индереү буйынса алдан 22 апрель тип билдәләнгән Дөйөм Рәсәй тауыш биреү датаһын һуңғараҡ ваҡытҡа күсереү кәрәк тип иҫәпләйем. Төбәктәрҙә, дөйөм илдә хәл-тороштоң нисек булырына ҡарап һәм профессиональ фекергә, табиптарҙың, белгестәрҙең күрһәтмәләренә таянып, тауыш биреүҙең яңы датаһын билдәләү тураһында ҡарар ҡабул итербеҙ.

• Алдағы аҙнаны эш хаҡтары һаҡланған ял аҙнаһы тип иғлан итәм. Йәғни ял көндәре шәмбенән - 28 марттан алып йәкшәмбегә - 5 апрелгә тиклем һуҙыласаҡ. Әлбиттә, йәшәүҙе тәьмин иткән структуралар, шул иҫәптән медицина учреждениелары, дарыуханалар, магазиндар, банк, финанс иҫәп-хисабын тәьмин иткән учреждениелар, транспорт, шулай уҡ барлыҡ кимәлдәге власть органдары эшен дауам итәсәк.

• Беҙгә граждандарҙың социаль яҡланыуын, уларҙың килемен һәм эш урынын һаҡлау, шулай уҡ миллионлаған



кеше йәлеп ителгән бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа ярҙам итеү өсөн өҫтәмә аҙымдар кәрәк. Был йәһәттән тәү сиратта түбәндәге саралар тормошҡа ашырыласаҡ.

**(Дауамы 4-се биттә).**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

**Тарихтың 2020 йылы ғилми телдә COVID-19 тигән атама алған өр-яңы хәүеф сығанағы менән башланып китте. Ҡәҙимге телебеҙҙә ул коронавирус тип йөрөтөлгән микроскопик, йәғни күҙгә күренмәҫ бер ярымбиологик заттың кеше организмына үтеп инеп, кинәт үрсей башлауы һәм шуның һөҙөмтәһендә уны ауыр сирҙәрҙең береһе булған пневмония сиренә дусар итеүе менән бәйле. Иҫ китмәле бит: ниндәйҙер бер вирус бар кешелек донъяһын тетрәтә!**

# ХОҘАЙ КИҪӘТЕҮЕЛЕР БЫЛ

Бөгөн уйлы-хисле кеше ошо хәтәр хәүефле сиргә сәбәп биреүсе вирустың ҡайҙан һәм нисек бар булыуы хаҡында уйланмай ҡалмайҙыр ул. Ошо хаҡта микробиология фәнендә ниҙәр билдәле икән?

Ғалимдар билдәләүенсә, вирус тип аталған микроскопик тәбиғәт агенттарын хатта айырым тере заттар иҫәбенә лә индереп булмай икән, сөнки улар төрлө организмдарҙың (бактерияларҙың, үҫемлектәрҙең, барса хайуандарҙың һәм кешеләрҙең) тере күҙәнәктәрендә генә йәшәй һәм үҙҙәренә хас ДНК, йә иһә РНК һәм күҙәнәк аҡһымынан яңы вирустарҙы реконструкциялай ала. Шуның өсөн вирустарҙы микроскопик паразиттарға тиңләп тә була. Әлбиттә, вирустарҙың ошондай эшмәкәрлеге арҡаһында организмдың улар "эйәләшкән" күҙәнәктәре тарҡала, һәләк ителә. Тап шуның өсөн ошо ярым тереклек сифаттарына эйә булған элементар тәбиғи заттарҙы ғалимдар "вирус" тип атаған, латин телендә virus һүҙе ағыу тигәнде белдерә. Вирустар Ер шарында тәүге тере күҙәнәкле организмдар менән бер үк ваҡытта барлыҡҡа килгәндер, тигән ғилми фараз бар. Тимәк, улар ҙа ерҙә барса тереклектең бар булыуы һәм таралыуы, йәғни тормош башланыу процестары менән бәйле хасил булған.

Тәбиғәт, ә дини күҙлектән ҡарағанда, Юғары Аҡыл уларҙы ниндәй маҡсат менән барлыҡҡа килтергәндер - быныһы беҙгә билдәһеҙ.

Биологтар тарафынан XIX быуат аҙағында иң беренсе булып тәмәке мозаикаһы вирусы барлығы асыҡлана, шул замандан бирле барлығы 6 меңдән ашыу вирус төрҙәре өйрәнелгән. Микробиологтар иҫәпләүенсә, ерҙә вирустарҙың бер нисә йөҙ миллион төрө булыуы мөмкин. Тимәк, әгәр вирустарҙы тормоштоң айырым бер формаһы итеп ҡараһаҡ, улар иң күп һанлы булып сыға. Шуның өсөн беҙгә, кешеләргә, мыжғып торған вирустар донъяһында йәшәүебеҙҙе бер ҡасан да онотмаҫҡа кәрәк. Әлбиттә, тере организмдарҙың вирустарҙың емерткес тәьҫиренә ҡаршы торорлоҡ механизмы ла бар - ул иммун системаһы, тип атала. Шулай булмаһа, кешелек күптән юҡҡа сыҡҡан булыр ине. Тик шуныһы: вирустар ҙа тик ятмай, улар ҙа үҙ конструкцияларын үҙгәртә алыу ҡеүәһенә эйә: ҡәҙимге, кешегә зарар килтерә алырлыҡ көсө булмаған вирустарҙың өр-яңы штамдары хасил булып, әҙәми заттарҙы үлемесле сирҙәргә дусар итә ала.

**Ни өсөн шулай килеп сыға һуң? Төптәнерәк фекер йөрөтһәң, күп осраҡтарҙа кешеләр үҙҙәре ғәйепле булып сыға. Күп нәмә кешеләрҙең тәбиғәттән өҫтөн булырға тырышыуында, Ер йөҙөндә тик үҙен генә тәбиғәт батшаһылай итеп тойоп, нәфсеһенә баш була алмай, вәхшиҙәрсә, ҡырағайҙарса тотоуындалыр, тим. Һөҙөмтәлә бына нимә килеп сыға: һин донъябыҙҙа шул уҡ вирустар булыуын иҫәптән сығарып, тәбиғәт ҡанундарын боҙаһың икән, уны һис туҡтауһыҙ ағыулайһың, бысратаһың, шәхси тормошоңда һәр төрлө аҙғынлыҡтан, боҙоҡлоҡтан баш тартмайһың икән - ошо илаһи Тәбиғәт, йәғни Хаҡ Тәғәлә, һине һис шикһеҙ үҙ яҙаһына дусар итәсәк. Һин һанға һуҡмаған донъя һинең башыңа етәсәк!**

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

***✓ Унда бит хәҙер әҙәм балаһының ирек-азатлыҡтары бер ниндәй ҙә әхлаҡи ҡанундарға һыймай башланы: ул ЛГБТ тиһеңме, ул бер енесле әҙәмдәрҙең законлы (!) никахлашыуы булһынмы, бер енестән икенсе енескә күсеүме...***



УЙЛЫҒА - УЙ

# ХОҘАЙ КИҪӘТЕҮЕЛЕР БЫЛ

**(Башы 1-се биттә).**

Бына байтағыбыҙ уҙған быуаттың икенсе яртыһында донъяға килгән. Шул заманда үҫеп еттек, балиғ булдыҡ, мөхәббәт тоттоҡ, өйләнештек. СССР-ҙа секс юҡ ул, тип тә көлдөргәйнеләр бер заман. Ни эшләп булмаһын, унһыҙ кеше тормошо дауам итмәй бит. Әммә ул енси мөнәсәбәттәр, башлыса, тәбиғәт ҡанундарына ярашлы булды, һәм был тотош илдә закон көсөнә эйә ине. Һәм иғтибар итегеҙ: яҡын киләсәктә СПИД тигән үлемесле сир таралаһағы хатта яҙыусы-фантастарҙың да өнөнә түгел, төшөнә лә инерлек булманы. Хәҙер инде бер кемгә лә сер түгелдер: донъябыҙҙа енси аҙғынлыҡтың, бигерәк тә гомосексуализмдың киң таралыуы, наркомандарҙың, әхлаҡ ҡанундарын һанға һуҡмауыларҙың ишәйеүе кешенең иммун дефициты сирен (СПИД) барлыҡҡа килтерҙе лә инде. Ә тап шул сир вирусы кеше организмына үтеп инеп, уның барса башҡа сирҙәргә ҡаршы тора алыу һәләтен юҡ итә бит! Хоҙай язаһы түгелме ни был? Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: 2018 йылда бар донъяла ВИЧ-инфекция йоҡторған кешеләр һаны 37,9 миллионға етеп, шул уҡ йылда уларҙың 770 меңе вафат булған. СПИД асыҡланғандан бирле иһә ошо арҡала барлығы 32 миллион кеше һәләк булған. 2019 йыл аҙағына Рәсәйҙә ВИЧ-инфекциялы ауырыуҙар һаны 1 миллиондан ашып китте, бер йыл дауамында ғына ла 37 мең кеше үлемгә дусар булды. Ошо ғибрәтле сир кеше ғүмерҙәрен өҙөүен дауам итә, ғалимдар һәм врачтар нисек кенә тырышмаһын, уны тулыһынса еңерлек дарыу әлегә табылмаған.

Ошо хаҡта уйланған саҡта Библияла, Ҡөрьән-Кәримдә сағылыш тапҡан иң боронғо легендалар иҫкә төшә. Аллаһы Тәғәлә үҙе яралтҡан тәү быуын әҙәми заттарға үтә лә оҙон ғүмер бирә. Әҙәм һәм Һауа балалары 900 йыл дауамында һау-сәләмәт көйө йәшәй ала. Әммә, Библияла яҙылғанса, әҙәми ҡыҙ заттары үҙҙәрен Илаһ улдары тип атаған ирҙәр менән енси яҡынлыҡ ҡылып, гигант кәүҙәле балалар тыуҙыра башлай. Уларҙан тыуған тоҡомдар Аллаһты танымай, хөрмәт итмәй, уның рухына табынмай башлай. Тап шуның өсөн Хаҡ Тәғәлә кешелектең ошо аҙғынлыҡҡа бирелгән тәү быуынын Туфан һыуына батырып, юҡ итә. Тик Аллаһҡа тоғро ҡалған Нух бәйғәмбәр үҙенең ғаиләһе һәм һәр тере йәндең берәр пары менән гигант бер көймәлә һәләк булыуҙан ҡотолоп ҡала. Бер ыңғайы кешеләргә ерҙә иң күбендә 120 йыл ғына иҫән-һау йәшәй алыу мөмкинлеге бирелә...



Бына ошо боронғо легендалар хәҙерге заман кешеләренә торғаны менән бер әкиәттәй тойолалыр. Тик әкиәт төбөндә лә боронғо бер хәҡиҡәт ятыуын оноторға ярамайҙыр ул. Әле һүҙ барған коронавирустың тап Ҡытайҙа хасил булып, шул территориянан бар донъяға тарала барыуында берәр ғилләә юҡмы икән? Шул уҡ коронавирустар ҙа үтә күп төрлө булып (микробиология фәнендә әлегә уларҙың ни барыһы 38 төрө аныҡланған һәм бер ни тиклем кимәлдә өйрәнелгән), әлегә тиклем шуларҙың 6 төрө генә кеше өсөн зарарлы, тип иҫәпләнә ине. Етенсе төр Ҡытай коронавирусы COVID-19 тип нарыҡланды, ул тиҙ арала донъя буйлап таралып, иҫ китмәле хәүеф тыуҙырып өлгөрҙө. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң?

Миненсә, кешелек донъяһында бер туҡтауһыҙ булып торған хәл-ваҡиғалар эҙһеҙ юғалмай, улар Ер шарында ғына түгел, тотош Йыһанда резонанс барлыҡҡа килтерә. Ҡылынған яуызлыҡтар йәһәннәм Яманлығы өсөн энергетик аҙыҡ ролен үтәһә, барса кешеләр ҡылған яҡшы ғәмәлдәр космик кимәлдәге Изгелеккә хеҙмәт итәлер ул. Космос ҡанундарынан кешелек азат түгел - изге ғәмәлдәрҙең ҡайтармаһы булған кеүек үк, ҡылынған яуызлыҡтарҙың бар кешелеккә зарар килтерерлек катастрофаларға, шул уҡ яман сирҙәргә килтереүе бар.

Бәлә ни өсөн Ҡытайҙан башланды? Белеүебеҙсә, һуңғы ваҡытта ошо коммунистик, атеистик идеология хөкөм һөргән илдең властары мосолманлыҡтарынан бер нисек тә баш тартмаған миллионлаған уйғыр кешеләрен көсләп "тәрбиә лагерҙарына" алып китә башланы, дини инаныстарынан арындырыу маҡсатында уларға төрлөсә баҫым яһаны-лар, мыҫҡыл иттеләр, ирктәренән мәхрүм иттеләр. Ошо заманса геноцидҡа халыҡ-ара хоҡуҡи ойошмалар ҙа тейешле иғтибар бирмәй килде, Ҡытай властарына ҡарата санкциялар иғлан итмәне. Әммә санкциялар бөтөнләй көтөлмәгән яҡтан төшөрөлдө: илдә кинәт кенә яңы коронавирус барлыҡҡа килеп, байтаҡ ҡына кешене ауыр сиргә дусар итте. Ҡытай властары быға са күрелмәгән хафаға төштө, тиҙ арала ошо яман сирҙән һаҡланыу өсөн ашығыс, әйтергә кәрәк, һөҙөмтәле саралар күрҙе. Әммә улар ошо ҡурҡыныс микроскопик дошмандың ни сәбәпле тап Ҡытайҙа пәйҙә булыуының сәбәптәре хаҡында уйландымы икән? Быныһы беҙгә билдәһеҙ.

Әйткәндәй, элегерәк тә ике яңы яман сир шул уҡ Ҡытайҙан таралғайны. 2003 йылда бер яңы вирус SARS, йәғни атипик пневмония сиренә сәбәп булһа, 2013 йылда иһә ҡош киҙеүе бар донъяны шаңҡытты. Ҡайһы бер белгестәр билдәләүенсә, Ҡытай халҡының теләһә ниндәй бөжәктән алып төрлө йылан-фәлән, хатта ярғанаттар менән ризыҡланыуы ла элегерәк тик хайуани заттарҙа ғына була торған коронавирустарҙың кеше организмына күсеп, сир сығанағына әйләнеүенә сәбәп булыуы бар. Бына шул саҡта Библияла ла, Ҡөрьән-Кәримдә лә кешеләрҙең туҡланыуы өсөн яраҡлы һәм рөхсәт ителмәгән хайуандар исемлегенең булыуы иҫкә төшә.

Коронавирус сире донъя буйлап таралып, ҡарт Европаны ла биләп алды. Быға са бар донъяға өҫтәнерәк, башҡа халыҡтарҙың проблемаларына вайымһыҙыраҡ ҡараған европалылар ҙа айныбыраҡ китеп, ошо хәүефле мәлдә үҙҙәренең йәшәү рәүешенә, йәшәйештәң байтаҡ ҡына әхлаҡи ҡанундарына ҡарата булған еңел-елпе ҡараштарынан ваз кисерҙәрме икән? Унда бит хәҙер әҙәм балаһының ирек-азатлыҡтары бер ниндәй ҙә әхлаҡи ҡанундарға һыймай башланы: ул ЛГБТ (лесбиянкалар - гейҙар - бисексуалдар - трансгендерҙар) тиһеңме, ул бер енесле әҙәмдәрҙең законлы (!) никахлашыуы булһынмы, бер енестән икенсе енескә күсеүме - һанай-иҫәпләй башлаһаң, һуғышың китерлек. Күрәһең, аҙғынлыҡҡа юл шулай һалыналыр ул.

Әлбиттә, ошо сир арҡаһында теркәлгән үлем осраҡтары ул тиклем үк ҡот осорғос булманы. Әммә бында тотош донъя иҡтисадына, кеше психикаһына килтерелгән зыянды бер нисек тә иҫәптән сығарып булмай. Ошо хәлде барыбер Күктән төшөрөлгән киҫәтеү итеп ҡабул итергә кәрәктер. Ни өсөн? Хоҙайҙың мәрхәмәте сикһеҙҙер, ул күп осраҡта әҙәм балаларын ғәфү итә, тик быаның өсөн тәүбәгә килеп, яуызлыҡтарҙан ваз кисеү фарыз. Кешеләрҙең барыһына ла - ябай көтөүсенән башлап батшаларға, президенттарға тиклем - үҙ юлынды, ҡылыр ғәмәлдәрендә һайлап алыу ирекге бирелгән. Дәүләт закондарынан башҡа быуаттар дауамында ата-бабаларыбыҙ беҙгә мираҫ итеп ҡалдырған әхлаҡ төшөнсәһе бар. Башҡортҡа - тәүге ер кешеһенә - ул мәшһүр "Урал батыр" эпосы аша мотлаҡ үтәлергә тейешле төп ҡанун итеп бирелгән: "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, Кеше булһын затығыҙ!" Кешелекле кешеләр булып йәшәй алһаҡ, киләсәгебеҙ ҙә өмөтлө буласаҡ.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

ӘЙТӘГҮР!

# ЯҘЫРҘАР ҘА УЛ...

## Тик кем уҡыр?

**? ҺОРАУ: Бөгөнгө әҙәби әҫәрҙәр туған телгә һөйөү уятамы?**

***Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА, шағирә:*** Балаларыбыҙҙа башҡорт теленә һөйөү уятыу тураһында һөйләшеүҙең бер өлөшөлөр был проблема. Билдәле булыуынса, башҡорт теле әле 2009 йылда уҡ ЮНЕСКО тарафынан рәсми рәүештә бөтөп барған телдәр рәтенә индерелде. Был хәүеф барлыҡ милли телдәргә лә ҡағыла. Туған телдәр мәктәптәрҙән ҡыҫырыҡлап сығарылып бөттө, тиһәк тә дөрөҫ булыр. Аҙнаһына ике сәғәт уҡытылған туған тел дәресе менән телебеҙҙе һаҡлап алып ҡалып булырмы ла, әҙәби әҫәрҙәр менән генә уға һөйөү уятыу мөмкинме? Телде һаҡлау мәсьәләһен, асылда, ғаиләләргә тапшырып ҡуйыу йүнәлешен

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары республиканың 2020 йылға һәм 2021-2022 йылдар осорона планлаштырылған бюджет тураһындағы законына үҙгәрештәр индереү тураһындағы закон проектын беренсе уҡыуҙа ҡабул итте. Башҡортостан Башлығы Радий Хабиров коронавирус хәүефенә бәйле республика бюджетының яңынан ҡараласағы тураһында белдерҙе."Беҙгә күп социаль объекттар төҙөүҙе туҡтатып торорға тура килә. Аҡсаның бер өлөшөн иҡтисадҡа ярҙамға һәм ошо ситуацияла барлыҡҡа килгән социаль мәсьәләләрҙе хәл итеүгә тотонасаҡбыҙ", - тине Радий Фәрит улы.

✓Башҡортостан Хөкүмәте президиумы ултырышында беренсе вице-премьер Андрей Назаров билдәләүенсә, 9 майҙағы байрам саралары планына үҙгәрештәр индерелеүе, әгәр карантин оҙайтылһа, запас варианттарҙы ҡулланырға тура килеүе мөмкин. Төп тантаналарҙы Өфөлә уҙғарыу планлаштырылған: 7 май - Совет майҙанында "Еңеү вальсы" флешмобы; 8 май - сәнғәт оҫталарының байрам концерты; 9 май - Еңеү паркында сәскәләр һалыу тантанаһы, хәрби техника ҡатнашлығындағы хәрби парад, "Үлемһеҙ полк" акцияһы, кесе авиация ҡатнашлығында театрлаштырылған тамаша, асыҡ һауала концерт һәм Өфө амфитеатрында салют.

✓Башҡортостан шифаханалары штат режимында эшләй. Был турала республиканың Туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе Салауат Нафиҡов Һаулыҡ һаҡлау министрлығы үткәргән брифингта белдерҙе. Шулай уҡ Нафиҡов шифаханала коронавирус йөрөткән кешеләрҙең булыу ихтималлығы тураһында былай тине: "Беҙҙең шифаханалар - медицина учреждениелары түгел. Ял итергә килгәндәрҙең бөтәһе лә медицина тикшереүе үтә, шуға бындай хәлдәргә юл ҡуйылмай".

✓Ирек Зарипов - Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Мәғариф, мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте һәм спорт комитеты рәйесе урынбаҫары. Бынан алда был вазифала Андрей Иванюта эшләне, хәҙер ул - Белорет районы башлығы. Быға тиклем Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған спорт мастеры, дүрт тапҡыр Паралимпия уйындары чемпионы Ирек Зарипов Һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре комитетында ошондай вазифа биләне.

**✓ *Батып барғанда һаламға йәбешкәндәй, бары тик алағарайҙың ике яҡты көнө нурҙарын һибеп, күңелдә йылытып тора: Бәрәкәт кисе менән изге Рамаҙан айы тыуып, ураҙа башланасаҡ көн.***



*БЫЛ АЙҘА...*

# ЯРЛЫҠАУ МӘЛЕ БУЛҺЫН!

**Ни ҡар, ни ямғыр, ни арба, ни сана; ҡарҙар ирей, һыу таша, талдар бөрөһөн аса - бала саҡтан таныш был юлдар фәҡәт бер генә мәл - алағарай-апрель күренешен талантлы рәссам һүрәтенән дә яҡшыраҡ күҙ алдына баҫтыра.**

Яҙ айҙарын, ғәҙәттә, түҙемһеҙләнеп көтөп алабыҙ, тик быйыл, үкенескә, шатлыҡ, ҡояш, йылы нур урынына хәүеф һәм ҡурҡыу тойғоһо сорнаны беҙҙе. Телевизор йә радионды асып ебәрһәң дә, социаль селтәрҙәрҙән дә, гәзит биттәренән дә эс бошорғос бер үк хәбәр - коронавирус, нефткә хаҡтар, "иҫтән яҙып ҡолаған" һум хаҡында хәбәр көн-төн тынмай дауам итә. Финанс буйынса ҡайһы бер эксперттар Үҙәк банктың "клиник үлем" хәлендәге һумды реанимациялауына өмөт бағлай һәм был сара хәлде бер аҙ еңеләйтер ине тигән фекерҙә. Ләкин апрелдә генә була торғаны юҡ, ахыры, ыңғайға йүнәлештең. Шулай уҡ коронавирус та был айҙа ғына һөжүмен туҡтатырға йыйынмай әле. Шулай итеп, алағарайға үҙ фиғеленә тоғро ҡалып булһа ла: ни һыуыҡ, ни йылы, ни алға, ни артҡа, ни үле, ни тере тигәндәй, ләкин имен-аман ғына майға килеп етергә кәрәк буласаҡ, сөнки бөгөнгө көндөң төп һынауын тап ошо апрель күтәрергә тейеш, ти белгестәр. Майҙа иһә экспертттар көсөргәнеш бер аҙ йомшара төшәсәк, тип фаразлай. Ә инде оптимистар өсөн, әйтерһең дә, бошонорға бер ниндәй ҙә сәбәптәр юҡ. Киреһенсә, улар ошо хәлдәргә юмор менән ҡарап, социаль селтәрҙәрҙә һәр төрлө мәрәкә мемдар (карикатура тиһәң дә булалыр) уйлап сығара. "Кем белә, - ти улар,- бөгөн беҙ фантастика тип ҡараған фильм һәм сериалдарҙың ысынбарлыҡҡа әүерелеүе бик мөмкин. Ул саҡ беҙҙе сит планета кешеләренән йәки имәнес Годзилланан ҡарабойҙай ярмаһы менән әбрәкәй ҡағыҙы ғына ҡотҡара алмаҫ..." Эйе, көлөп алыу ҙа кәрәк. Апрель ауыр килә, түҙегеҙ, тиһәләр ҙә, ул бит ни тиһәң дә Көлкө көнө **(1)** менән башланып китеүсе ай! Был, тимәк, ниндәй хәлдә лә юмор һәм ыңғайға көйләнеш тойғоһон юғалтмау кәрәклеге тураһында ла иҫкәртеп торалыр беҙҙе.

Ер йөҙөн вирус баҫҡан, тип тормаҫтар, бына тиҙҙән, тап ошо айҙа, йылы яҡтарҙан ҡанатлы дуҫтарыбыҙ ҙа ҡайтып төшәр. Халыҡ-ара ҡоштар көнө **(1)** лә алағарайҙың тәүге көнө тип билдәләнһә лә, уларҙың һайрауы беҙҙең ҡолаҡтарҙы ҡара көҙгәсә иркәләп торор. Ил өҫтөнә киләме, мир өҫтөнәме - уртаҡ бәлә, әлеге осраҡта мәкерле сир, һәр кеме үҙ өйөнә инеп бикләнһә лә, кешеләрҙе бер-береһенә яҡынайта, үҙ-ара аңлашыуҙы еңелләштерә тип беләбеҙ. Халыҡ-ара кимәлдә лә уның шулай булыуын теләге килә. Рәсәй, һәр ваҡыттағыса, бәләгә тарыған башҡа илдәргә беренсе булып ярҙамға ашыҡты: әле Ҡытайға, әле Италияға тонналап медикамент һәм вирустан һаҡланыу саралары, медицина ҡорамалдары, башҡа төр кәрәк-яраҡ, табиптар бригадалары ебәрелде. Италияға ғына, мәҫәлән, уларҙы 15 хәрби самолет ташыны. Ябай халыҡ бындай эскерһеҙ ярҙамды баһалай һәм рәхмәтле, тик бына дошманлашыусы илдәр етәкселәре генә, әйтерһең дә, икенсе яҫылыҡта йәшәй. Власть әһелдәре бөгөнгө хәлде донъя күләмендә финанс бүленеше структураһын үҙгәртеү, капиталдың глобаль бүленешенә өлгәшеү маҡсатында файҙаланырға ынтыла. Был мәсьәләне, ғәҙәттә, һуғыш хәл итә, тик был юлы уның эшен пандемия башҡарып сығасаҡ, тип өмөтләнә, күрәһең, монополистар. "Һуғыш булғанса, вирус яҡшыраҡ", тип әйтеүҙән дә тартынмай шуға ла бәғзе берәүҙәр. Бәлки, улар үҙҙәренсә хаҡлылыр, ләкин нисек кенә булһа ла бының ауырлығы барыбер ябай халыҡ елкәһенә төшәсәк. Тормош, шулай итеп, Халыҡтар берҙәмлеге көнө **(2)** йөкмәткеһе, маҡсаты һәм йүнәлешенә лә төҙәтмәләр индерә: нимәгә ҡаршы һәм ниндәй идеялар өсөн берҙәмлеккә тупланыу кәрәклеге хаҡында хәбәр һөйләп тороу ҙа бында кәрәкмәй...

Бөгөнгө ваҡиғалар фонында апрелдә билдәләнәсәк иҫтәлекле даталар ҙа хатта тәҫһеҙләнә, мәғәнәһен юғалта төшә һымаҡ. Батып барғанда һаламға йәбешкәндәй, бары тик алағарайҙың ике яҡты көнө нурҙарын һибеп, күңелдә йылытып тора: Бәрәкәт кисе **(7)** менән изге Рамаҙан айы тыуып, ураҙа башланасаҡ көн **(24)**. Афәт мәлендә юғарынан төшөрөлгән ҡотолоу сараһылыр был, тигән мәғәнә аңғартыла түгелме беҙгә? "Шәғбан айының уртаһына тура килгән Бәрәкәт кисендә Аллаһы Тәғәлә бөни Кәлер ҡәбиләһендәге һарыҡтарҙағы йөндәр һанынса халыҡты йәһәннәмдән ҡотҡарып ҡалыр", - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм. Шәғбандың 15-нә ҡаршы (йәғни 7 апрелдән - һигеҙенә) көндө ураҙа тотоп, кисен ғибәҙәт менән үткәргә бойорған. "Шул кистә йә төндә Аллаһы Тәғәлә донъяға рәхмәт күҙе менән ҡарап һәм: "Гонаһтарын ярлыҡауымды һораусылар юҡмы? Булһа, ғәфү итәм. Ризыҡ һорауcылар юҡмы? Һораусылар булһа, ризыҡ бирәм. Ҡайғы-хәсрәттәрҙән ыҙа сиккәндәр йәки ауырып киткәндәр юҡмы? Күңелдәренә һәм тәндәренә шифа бирәм. Ниндәй генә теләктәре булһа ла һораһындар - теләктәрен үтәрмен, - тиер һәм Уның был мөрәжәғәте ҡояш сыҡҡансы дауам итер". Был кистә бәндәләрҙең бер йылға билдәләнгән яҙмыштары яҙыла...Йыл дауамында тыуасаҡ һәм үләсәк кешеләр ҙә ошо кистә билдәләнеп ҡуйылыр, ти. Әммә ләкин был ошо кисте генә Аллаһҡа ығынырға ла ҡалған көндәрҙе ҡәҙимгесә үткәрергә икәнде анлатмай. Аллаһы Тәғәләгә һөйөүҙе йөрәгендә, күңелендә йөрөт, Ул тыйғандарҙан тыйылып, яман уй-ғәмәлдәрҙән ситтә булып, фәҡәт изге уйҙа йөшәргә, һулышың һайын Аллаһты иҫкә төшөрөп кенә торорға ҡуша бөйөк тәғлимәт. Изге Рамаҙан башланыр көн һәм тотош был ай шулай уҡ бәндәләрҙең Аллаһ мәрхәмәте һәм шәфҡәттәренә лайыҡ булыр осоро. Шуның өсөн дә саф һәм ихлас күңел менән Рамаҙанда ураҙа тотоу беҙҙе бәлә-ҡазаларҙан, сир һәм рәнйеүҙәрҙән аралап ҡалыр тип өмөт итәйек.

Апрелдә тағы ла Халыҡ-ара балалар китабы **(2)**, Геолог **(5)**, Бөтөн донъя өҫтәл теннисы **(5)**, Һыу аҫты кәмәһендә һәләк булған моряктарҙы иҫкә алыу **(7)**, Бөтөн донъя һаулыҡ **(7)**, Космонавтика **(12)**, Экологик белем, Халыҡ-ара мәҙәниәт **(15)**, Халыҡ-ара һәйкәлдәр һәм тарихи урындар **(18)**, РФ мәшғүллек хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре, Умырзая **(19)**, Урындағы үҙидаралыҡ **(21)**, "Ер көнө" Бөтөн донъя акцияһы **(22)**, Бөтөн донъя китап һәм автор хоҡуғы **(23)**, Халыҡ-ара йәштәр теләктәшлеге **(23)**, Радиация аварияларында һәләк булғандарҙы иҫкә алыу **(26)**, Рәсәй парламентаризмы **(27)**, Халыҡ-ара бейеү **(29)**, Янғындан һаҡлау **(30)** көндәре билдәләнә.

**Алағарайҙа тыуғандар:**

**4** - М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры артисы, БАССР-ҙың халыҡ артисы **Тәнзилә Хисамоваға - 75 йәш.** (1945).

**14 -** дәүләт эшмәкәре, РФ Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһе идараһы, иҡтисад фәндәре кандидаты, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған иҡтисадсыһы **Фоат Хантимеровҡа - 70 йәш** (1950).

**22 -** совет сәйәсәте һәм дәүләт эшмәкәре, 1919 йылдың 20 мартында Совет власы менән Башҡорт Хөкүмәте араһында Башҡорт Совет Автономияһы тураһындағы Килешеүгә ҡул ҡуйған **В.И. Лениндың** (Ульянов) тыуыуына **- 150 йыл** (1870-1924).

**25 -** Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы йырсыһы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Әлфиә Юлсуринаға - 60 йәш** (1960).

**26 -** рәссам, БР Рәссамдар берлеге рәйесе, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы **Хәтип Фазыловҡа - 60 йәш** (1960).

**28 -** БР Хөкүмәте премьер-министрының беренсе урынбаҫары **Андрей Назаровҡа - 50 йәш** (1970).

**29 -** йырсы, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры солисы, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, халыҡ-ара конкурстар лауреаты **Йәмил Әбделмәновҡа - 55 йәш (1965).**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

---

күҙәтәбеҙ. Ата-әсәләрҙең балаһы менән туған телдә һөйләшеүен, туған телгә һөйөү уятыуын шарт итеп ҡуябыҙ. Ә ул шарттар үтәләме һуң? Юҡ, тип рәсларға йөрьәт итәм.

Беренсенән, хәҙерге быуын ата-әсәләр телебеҙ ҡыҫырыҡланған дәүерҙә тәрбиәләнеп үҫте. Бөтә предметтар ҙа мәктәптә башҡорт телендә уҡып сыҡҡан минең быуындан улар нығ айырыла. Икенсенән, заман үҙгәрҙе. Өйҙә ата-әсә башҡортса һөйләшһә лә, балалар барыбер бүтән телдәргә күсә бара, сөнки улар заман технологиялары тыуҙырған нәмәләр менән эш итә. Телевизор ғына түгел инде, хәҙер уларҙың ҡулдарында айфондар, интернет... Бындай шарттарҙа иң яҡшы сифатлы художестволы әҫәрҙәр менән дә хәлде ҡотҡарып булмайҙыр. Шуға күрә мин балаға туған телгә һөйөү уятыуҙы бишектән үк башлауҙы шарт итеп ҡуйыр инем. Сабыйҙарға бишек йыры йырлауҙан башларға кәрәк эште. Ә бының өсөн ата-әсәнең үҙаны юғары булырға тейеш. Аҙаҡ сабыйҙы туған телдә һамаҡлап сөйөргә, башҡорт телендә ҡыҫҡа ғына халыҡ әкиәттәре һөйләп йоҡлатырға, иртәнсәк шиғри һамаҡтар әйтеп уятырға - былар барыһы ла балаға тел өйрәтеү сараһы. Мин әле лә иҫләйем, атайым мине янына алып, "микики, микики, бүре башы ун ике", тип әкиәт һөйләп йоҡлата ине. Аҙаҡ ошо уҡ әкиәтте ҡыҙыма ла һөйләне. Йоҡлап китһен өсөн "микики, микики, бүре башы ун ике" тип ҡабатлай ҙа ҡабатлай, ә тегеһе: "Тиҙерәк ҡасһындар кәзәләр бүренән, әтү йоҡлайым бит", - тип әүен баҙарына китә... Бала саҡта тыңлаған әкиәттәремде мин әлегәсә иҫләйем. Бына нисек итеп һөйөү уятҡан беҙҙең быуында ата-әсәләр, олатай-өләсәләр.

Балалар өсөн ижад итеүсе яҙыусыларыбыҙ инендә, әлбиттә, ҙур бурыстар ята. Балаларыбыҙҙы телле итеү бит уларҙың төп хеҙмәте. Бөгөнгө әҫәрҙәр ҙә, асылда, шул бурысты үтәй. Бынамын тигән балалар өсөн яҙыусы әҙиптәребеҙ бар. Әммә уларҙы балаларға еткереү ғаиләләр кәмегәндән-кәмей. Сөнки улар үткән быуаттың етмешенсе йылдар урталарында уҡ урыҫлаштырылған мәктәптәрҙә уҡып сыҡҡан быуын вәкилдәре. Хәҙер килеп ошо ата-әсәләрҙең үҙҙәрен тәрбиәләргә кәрәк. Ҡайтанан... Әлеге быуын яҙыусылары яҙыр ул ысынлап та туған телгә һөйөү уятыусы әҫәрҙәрен, тик уларҙың әҫәрҙәрен кем уҡыр? Бына бит мәсьәлә низә...

---

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2020 йылда халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың 140 йыллығын байрам итеү тураһында указ сығарҙы. Указға ярашлы ойоштороу комитеты булдырыла, уға сараларҙы уҙғарыу планын әҙерләү бурысы йөкмәтелә.

✓Башҡортостандың Мәғариф министрлығы баланың йәмәғәт урындарында йөрөгәне өсөн административ яза ҡаралыуы хаҡында мәғлүмәтте кире ҡаҡты. Бынан алда интернетта бала ата-әсәнән башҡа сауҙа үҙәктәрендә, хатта урамда һәм транспортта йөрөгәне өсөн административ яуаплылыҡ янауы хаҡында мәғлүмәт пәйҙә булды. Мәктәптәр буйлап баланы түнәрәктәрҙә йәки өҫтәмә дәрестәрҙә асыҡлау өсөн рейдтар уҙғарылыуы, һөҙәмтәлә мәктәп етәкселегенә яза бирелеүе тураһындағы мәғлүмәт тә ялған. Барлыҡ кәрәкле һәм дөрөҫ мәғлүмәт рәсми сайттарҙа ғына баҫыла, тип иҫкә төшөрҙөләр министрлыҡта.

✓Башҡорт театры сәхнәһе һәм эстрада йондоҙо, популяр актер һәм лирик йырсар башҡарыусы Фидан Ғафаровҡа Өфө ҡалаһының почетлы гражданы исеме бирелде. Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт драма театры ҡала мэры Өлфәт Мостафин ҡул ҡуйған документты алды. Хәҙер Башҡорт драма театрында ике артист шундай маҡтаулы исемдә йөрөтә - 2019 йылдың сентябрендә күренекле артист Нурия Ирсаева ла ошо абруйлы наградаға лайыҡ булды.

✓Башҡортостанда ҡартлыҡ буйынса пенсионерҙар һаны 2010 йылда 855,7 меңдән алып 2019 йылда 1 миллиондан ашыу кешегә тиклем артҡан, тип белдерҙеләр республика статистиктары. Йыл башына ҡартлыҡ буйынса пенсияның уртаса күләме республикала 15,3 мең һумға еткән (2010 йылда 7,1 мең һум). Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, ҡартлыҡ буйынса һәр бишенсе пенсионер тиерлек мәшғүлдәр төркөмөнә ҡарай. Рәсми булмаған мәшғүллекте иҫәпкә алып, Башҡортостанда эшләп йөрөгән пенсионерҙарҙың өлөшө бер аҙ юғарыраҡ - уҙғарылған һорау алыуҙарға ярашлы ул 30 процент самаһы тәшкил итә, тип йомғаҡ яһанылар Башстатта.

✓Өфө ҡала округы Советының сираттағы ултырышында Ленин районындағы бер урамға хоккей тренеры Сергей Михалевтың исемен бирергә ҡарар ителде. С. Михалев 1987-1990 йылдарҙа һәм икенсе тапҡыр 2005-2009 йылдарҙа "Салауат Юлаев" хоккей клубының баш тренеры булды. 2007-2008 йылғы сезонда юлаевсылар Рәсәй чемпионатының алтын миҙалын яуланы.

ҠЫҪҠАСА

## ҺАҠЛАНҒАНДЫ...

✓ **Башҡортостанда үпкәләрҙе яһалма елләтеү аппараттарына ҡытлыҡ юҡ, тип белдерҙе республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин 24 мартта уҙған брифингта.** Республика дауаханаларында үпкәләрҙе яһалма елләтеү аппараты 700-гә яҡын. Бынан тыш, ошо маҡсатта файҙаланыу өсөн портатив аппараттар, наркоз-тын алыу аппараттары бар. "Был етәрлек. Шуға күрә бында паникаға урын юҡ, - тип билдәләне министр. - Бынан тыш, республика Хөкүмәте ҡарары буйынса, Башҡортостандың резерв фондынан өҫтәмә аҡса бүленде һәм тағы 20-ләгән аппарат һатып алына. Шулай уҡ Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте бойороғо менән илдең резерв фондынан Рәсәй төбәктәренә биш мелдән ашыу аппарат һатып алыу өсөн аҡса йүнәлтелде".

✓ **Көнөнә ете мең битлек! "Ишембай трикотажы" йәмғиәте күп тапҡыр файҙаланып була торған битлектәр тегеүҙе тиҙ үҙләштергән.** Әгәр ихтыяж була икән, сығарылған әйберҙәр һанын тәүлегенә 15 мең данаға тиклем еткерергә әҙерҙәр. Бер битлектең хаҡы - 30 һум. Тиҙҙән Башҡортостан дарыуханаларына Ҡытайҙан бер тапҡыр ҡуллана торған медицина битлектәре лә килтереләсәк, тип хәбәр итте Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығы етәксеһе Максим Забелин. Уларҙың хаҡы яңы коронавирус пандемияһы иғлан ителерҙән алдағыға ҡарағанда өс тапҡырға ҡиммәтерәк булыуы көтөлә. Әгәр элек бер тапҡыр файҙаланыла торған әйберҙең хаҡы 4-10 һум булһа, бөгөн иһә хаҡы өс тапҡырға ҡыйбатыраҡ - бер данаһы 35 һум. Максим Забелин һүҙҙәренсә, "Агиҙел" предприятиеһы сығарған битлектәрҙең дә хаҡы арттырыла: өс данаһы 70-100 һум. Тауарҙың ҡиммәтләнеүе тәьмин итеүселәрҙең сәйәсәте һәм марляның яңы һатып алыу хаҡы менән бәйле.

✓ **Республиканың Туризм буйынса дәүләт комитеты һәм "БашТурСоюз" ассоциацияһы Башҡортостанда йәшәүселәргә яңы коронавирус инфекцияһы пандемияһына бәйле сәйәхәттәр һәм уларҙы күсереү мәсьәләләрендә ярҙам күрһәтеү өсөн "Ҡыҙыу бәйләнеш" асты.** Телефон 8-800-505-94-56. Был хаҡта дәүләт комитеты рәйесе Салауат Нафиҡов хәбәр итте. "Әгәр һеҙ хәүеф янаған илгә юллама һатып алғанһығыҙ икән, сәйәхәттән тыйылырға кәңәш бирәбеҙ. Турагент менән һөйләшеп, сәйәхәтегеҙҙе икенсе ваҡытҡа йәки илгә күсерә алаһығыҙ, - тип билдәләне Салауат Нафиҡов. - Йәйгә хәл тынысланыр тип көтәбеҙ һәм йәйге турҙарҙы ғәмәлдән сығармаҫҡа тәҡдим итәбеҙ. Әгәр әлеге ваҡытта турҙы күсереү мөмкинлегегеҙ булмаһа, тур өсөн аҡсаны файҙаланмай тоторға була, улар унда тулы күләмдә һаҡлана. Әгәр аҡсаны кире ҡайтарырға теләһәгеҙ, юллама һатып алған турагентлыҡҡа барып, килешеүгә ярашлы эш итәһегеҙ".

✓ **Башҡортостанда яңғыҙ йәшәгән өлкән йәштәгеләргә һәм инвалидтарға азыҡ-түлекте, көндәлек кәрәк-яраҡтарҙы һәм дарыуҙарҙы өйҙәренә килтерәләр.** Коронавирусты иҫкәртеү барышында халыҡтың ошо категорияларына социаль ярҙам сараһы ойошторола. Республика Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ҡарамағында ваҡытлыса үҙәк булдырыла, ул оло йәштәгеләрҙе азыҡ-түлек һәм көндәлек кәрәк-яраҡ тауарҙар менән тәьмин итеүҙе ғәмәлгә ашыра. Ул ошо көндәрҙә эшләй башлай. "Беҙҙә хеҙмәтләндерелгән ололар һәм инвалидтар, шулай уҡ муниципалитеттарҙың хакимиәт башлыҡтары һәм башҡа рәсми сығанаҡтар мәғлүмәте буйынса асыҡланған өлкән йәштәге граждандар тәьмин ителә. Күп каналлы колл-үҙәккә килгән ғаризалар һәм мөрәжәғәттәр буйынса ла эшләйбеҙ", - тине министр урынбаҫары Юрий Мельников. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Өфөлә коронавирус инфекцияһы таралыу шарттарында консультация ярҙамы күрһәтеү буйынса колл-үҙәк эшләй. Уның номеры - 8-800-250-56-04. Коронавирус инфекцияһын иҫкәртеү мәсьәләләре буйынса Роспотребнадзорҙың Берҙәм консультация үҙәгенә мөрәжәғәт итергә мөмкин: 8-800-555-49-43. Ул тәүлек әйләнәһенә эшләй, хеҙмәткәрҙәр COVID-19 тураһында төп һорауҙарға яуап бирә.

ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!

# КӨСӨБӨҘ - БЕРҘӘМЛЕКТӘ



**(Башы 1-се биттә).**

**Беренсе.** Граждандарға тейешле барлыҡ социаль түләүҙәр һәм льготалар алдағы алты айҙа бер ниндәй өҫтәмә белешмәләр һәм инстанциялар буйынса йөрөүҙәрһеҙ автоматик рәүештә оҙайтылырға тейеш. Шулай уҡ Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына ветерандарға һәм тыл хеҙмәткәрҙәренә 75 һәм 50 мең һум күләмендәге түләүҙәр гәҙәттәгенән алда, май байрамдарына тиклем, апрелдә үк таратылырға тейеш.

**Икенсе.** Алдағы өс айҙа, апрелдән башлап, әсәлек капиталына хоҡуғы булған барлыҡ ғаиләләргә өс йәшкә тиклем һәр балаға ай һайын өҫтәмә рәүештә бишәр мең һум түләргә тәҡдим итәм. Ярҙамдың яңы сараһы, атап әйткәндә өс йәштән ете йәшкә тиклем балаларға түләүҙәргә килгәндә, барлыҡ ғаиләләр был түләүҙәрҙе июлдә түгел, ә бер ай алдан, йәғни июндән алһын өсөн Хөкүмәткә барлыҡ ойоштороу сараларын тиҙләтеүҙе йөкмәтәм.

**Өсөнсө.** Больничныйҙа булған йәки эшен юғалтҡандарға норма билдәләргә тәҡдим итәм: эшкә яраҡһыҙлыҡ буйынса түләүҙәр айына бер минималь хеҙмәт хаҡынан (МРОТ) да кәм булмаған сумманан сығып иҫәпләнергә тейеш. Хәҙер ҡайһы бер категория граждандарҙан тыш, эшһеҙлек буйынса иң юғары пособие айына 8 мең һум менән сикләнә. Уның күләмен минималь хеҙмәт хаҡы күләменәсә, йәғни 12130 һумғаса арттырырға тәҡдим итәм.

**Дүртенсе.** Ҡулланыусылар һәм ипотека кредиттары буйынса каникулдар булдырыуҙы тәҡдим итәм. Рәсәй банкына шәхси эшҡыуарҙар өсөн дә кредиттарҙы пролонгациялауҙың шуға оҡшаш механизмдарын ҡарауын һорайым.

**Бишенсе.** Бәләкәй, урта бизнес, микропредприятиелар, бигерәк тә хеҙмәтләндереү өлкәһенә тоторо-ҡло эш менән тәьмин итергә, тимәк, хеҙмәткәрҙәрен һаҡлап алып ҡалырға ярҙамлашырға кәрәк. Дәүләт был мәсьәләне хәл итеүҙә бизнесҡа ярҙам итәсәк. Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ компанияларына алдағы ярты йылда НДС-тан башҡа барлыҡ һалымдар буйынса кисектереү бирергә. Ә микропредприятиеларға, бындай кисектереүҙән тыш, социаль фондтарға страховка иғәнәләрен түләү буйынса кисектереү бирергә. Банк кредиттарына килгәндә, бында ла ауыр хәлдә ҡалған бәләкәй һәм урта бизнес компаниялары, микропредприятиелар шулай уҡ алты айға кредиттар буйынса кисектереү алырға тейеш. Ауыр хәлдә ҡалған предприятиеларҙы банкротлыҡтан һаҡларға кәрәк. Шул сәбәпле кредиторҙарға компанияларының банкротлығы һәм уларҙан бурыстарын, штрафтарҙы түләүҙәрен талап итеү буйынса алты айға мораторий индереүҙе тәҡдим итәм.

**Алтынсы.** Хәҙер беҙ граждандарҙың, бигерәк тә бәләкәй һәм урта предприятиеларҙа мәшғүл булыусыларҙың килеме кәмемәһен өсөн барыһын да эшләргә бурыслы. Уларҙың страховка иғәнәләрен ике тапҡырға - 30 проценттан 15 процентҡа кәметергә тәҡдим итәм. Әгәр эш хаҡы МРОТ күләмендә йәки кәмерәк икән, ставка элеккесә, 30 процент күләмендә ҡала.

● **Тағы ике сара хаҡында айырым әйтәм.**

**Беренсеһе.** Рәсәйҙән сит илгә, оффшор юрисдикцияһына киткән барлыҡ килемгә тейешле һалым һалынырға тейеш. Хәҙер шундай средстволарҙың өстән ике өлөшөнә бары тик 2 процент һалым һалына. Шул уҡ ваҡытта хатта бәләкәй эш хаҡына эшләп йөрөүселәр йән башына 13 процент һалым түләй. Был, йомшаҡ итеп әйткәндә, ғәҙел түгел. Шуға күрә килемен дивиденд рәүешендә сит илдәге иҫәбенә күсереүселәр өсөн һалым ставкаһын 15 процентҡа күтәреүҙе тәҡдим итәм. Әлбиттә, был ҡайһы бер илдәр менән ике тапҡыр һалым һалыуҙан ҡасыу тураһындағы килешеүҙе төҙәтеүҙе талап итә. Хөкүмәттән был эште ойоштороуын һорайым. Әгәр сит ил партнерҙары беҙҙең тәҡдимде ҡабул итмәһә, Рәсәй был килешеүҙәрҙән бер яҡлы сығасаҡ.

**Икенсе.** Донъяның күп илдәрендә граждандарҙың банктарҙағы аҡсаларына һәм ҡиммәтле ҡағыҙҙарына өҫтәлгән килемгә һалым һалына, беҙҙә - юҡ. Банк вкладтары һәм ҡиммәтле ҡағыҙҙары күләме 1 миллион һумдан ашҡан граждандарҙың килеменә 13 процент һалым билдәләүҙе тәҡдим итәм. Йәғни, вклад үҙе түгел, ә унан килгән процент килеменә генә һалым һалырға. Был сара вкладсыларҙың бер процентына ғына ҡағыласаҡ.

**Тағы шуны өҫтәйем:** билдәләнгән ике сараны тормошҡа ашырыуҙан бюджетҡа ингән барлыҡ өҫтәмә килемде балалары булған ғаиләләргә, эшһеҙ ҡалыусыларға, больничныйҙа булыусыларға ярҙам итеүҙе финанслауға маҡсатлы йүнәлтергә тәҡдим итәм. Әгәр беҙ берҙәм булһаҡ, ағымдағы хәл-тороштоң ауырлығын аңлаһаҡ, әгәр дәүләт, йәмғиәт, граждандар бер йүнәлештә барһа, һәр ҡайһыбыҙ хәленән килгәнде эшләһә, ҡабул ителгән барлыҡ саралар һәм тағы ла ҡабул ителәсәктәре, эшләйәсәк, һөҙөмтәләрен бирәсәк.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Сүп-сарҙы сығарыу һәм сорттарға айырыу менән шөғөлләнгән коммуналь хеҙмәттәрҙең эшселәренә бушлай битлектәр һәм респираторҙар бирергә тәҡдим ителде. Был ҡалдыҡтар аша коронавирус йоҡтороу хәүефе менән бәйле. Башҡортостандың Экологтар союзы рәйесе Александр Веселов һүҙҙәренсә, медицина учреждениелары пациенттарынан барлыҡ ҡалдыҡтар коммуналь составҡа ебәрелә. "Ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеү өлкәһенә хәүеф янай, сөнки сүп-сар сығарған, сорттарға айырған һәм уны эшкәрткән белгестәрҙең зарарланыуы ихтимал", - тине Александр Веселов.

✓Коронавирустың таралыуына юл ҡуймау маҡсатында Өфө электр транспортында дезинфекция саралары үткәрелә. Ҡала муниципаль электр транспорты идаралығының башҡарма директоры Александр Ежков һүҙҙәренсә, вагондар хлорамин менән дезинфекциялана. "Хеҙмәткәрҙәрҙең бирсәткәләре, респираторҙары бар, һәр вагонда ҡулланмалар эленгән. Эшкәртеү хәүеф янамай тип иғлан ителгәнсе уҙғарыла", - тип билдәләне ул.

✓Бөгөн Өфөнөң "Ҡаланы йәшелләндереү хужалығы" теплицаларында 80 мең дана петуния, 20 мең бәрхәт үлән һәм 30 мең цинерария үҫтерелә. Предприятие быйыл бөтәһе 260 мең бер йыллыҡ сәскәләр ҡарап үҫтерергә йыйына. Коммуналь хеҙмәт эшселәре 6-7 майға Еңеү паркында, 112-се кавалерия дивизияһы скверында һәм ҡала хакимиәте янындағы сәскә түтәлдәренә тәүге петунияларҙы һәм бәрхәт үләндәрен ултыртырға тейеш. Баш ҡала бер йыллыҡ сәскәләр ултыртыу буйынса былтырғы рекордты уҙып китергә һәм ҡала урамдарын 2 миллион 239 мең данаға яҡын сәскә менән биҙәргә теләй. 2019 йылда был һан 220 меңгә аҙыраҡ ине.

✓Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант яҙыу көнө билдәләнде. Республика Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйған бойороҡҡа ярашлы, 2020 йылда сара 25 апрелдә ойошторола. Акцияны 2024 йылға тиклем апрелдең һәр дүртенсе шәмбеһендә уҙғарыу планлаштырыла. Башҡортостан Республикаһының Мәғариф һәм фән министрлығына башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса коммерцияға ҡарамаған ойошма менән берлектә диктантты үткәреү буйынса саралар планын әҙерләү һәм раҫлау бурысы йөкмәтелде. Финанслау сығанаҡтарын республиканың Финанс министрлығы билдәләй.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *Әммә сит илдә ялда булып ҡайтҡан ҡайһы берәүҙәр ике аҙна изоляцияла булыу кәрәк, тигән талапҡа ҡолаҡ та һалмайынса, элеккесә әүҙем тормош алып барыуын дауам итә. Улар республика халҡының ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуя.*



*ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА*

**Йыл һуңында Ҡытайҙа башланған коронавирус эпидемияһы бөгөн пандемияға әүерелде. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса (27 мартҡа), донъяла 542 417 ошо сир менән сирләгән, 124 164 самаһы пациент һауыҡҡан, 24 354 кеше вафат булған. Рәсәйҙә 1036 кеше сирләй, шуларҙың 45-е һауыҡҡан. Был аҙнала коронавирус Башҡортостанға ла килеп етте.**

# ХӘҮЕФ ТӨРКӨМӨНДӘ...

## ололар ғына түгел

Республика Башлығы үҙенең социаль селтәрҙәрҙәге аккаунтында ошо хаҡта белдерҙе һәм һуңынан мәғлүмәт рәсми сығанаҡтарҙа ла раҫланды. Икенсе көнөнә иһә вирус йоҡтороусылар һаны тағы берәүгә артты. 26 мартҡа уларҙың һаны әлегә дүрт кеше. Яңы коронавирус инфекцияһы раҫланған кешеләр Өфө ҡалаһы йоғошло сирҙәр дауаханаһының махсус бокстарына урынлаштырылған. Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин белдереүенсә, улар өсөн барлыҡ шарттар булдырылған. Ауырыуҙарҙың бөтәһенең дә хәле тотороҡло тип баһалана. Сирлеләрҙең кемдәр менән аралашҡаны республика властарына билдәле. Уларҙың һәммәһе лә тикшерелә.

27 мартҡа COVID-2019 сиренә шик менән 79 пациенттың республика дауаханаларында ятыуы тураһында хәбәр ителгәйне. Уларҙың 13-ө - балалар. Әйткәндәй, күптән түгел сит илдән командировканан ҡайтҡан Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин менән Өфө районы хакимиәте башлығы Вилорий Угаров, финанстар министры Лира Игтисамова карантинда. Әммә сит илдә ялда булып ҡайтҡан ҡайһы берәүҙәр ике аҙна изоляцияла булыу кәрәк, тигән талапҡа ҡолаҡ та һалмайынса, элеккесә әүҙем тормош алып барыуын дауам итә. Улар үҙҙәренең мең-миңлеге арҡаһында туғандарының, таныштарының ғына түгел, баш ҡала, республика халҡының да ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуя.

Быға тиклем яңы сиргә ололар тиҙерәк бирешә, тигән ҡараш йәшәй ине, сөнки уларҙың иммун системаһы ҡаҡшаған, өҫтәүенә, йылдар буйына хроник сирҙәр йыйылған. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре лә быны раҫлай: COVID-2019-ҙан 39 йәштән йәшерәктәрҙең вафат булыу күрһәткесе 0,2 процент булһа, 80 йәште үтеүселәр - 14,8 процент.

Донъя буйынса сирҙең ниндәй тиҙлек менән таралыу мөмкинлеген Италия миҫалында күрһәтергә була: унда вирус ыҫҡа ваҡыт эсендә таралып, үлем күрһәткесе 4,3 процентҡа етте (шул уҡ ваҡытта ил буйынса уртаса һан - 2,5 процент). Был илдә ғүмер оҙайлығы иң юғарыһы булһа ла, коронавирустан вафат булыусыларҙың 98 проценты - 60 йәштән ололар, ә 80 йәште үтеүселәр араһында был күрһәткес - 16-18 процент.



Бигерәк тә ир-атҡа үҙ сәләмәтлегенә иғтибарлы булырға кәрәк, сөнки белгестәр белдереүенсә, ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда көслө зат араһында зарарланыусылар һәм вафат булыусылар ике тапҡырға күберәк.

Шул уҡ ваҡытта Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының йоғошло ауырыуҙар буйынса штаттан тыш баш белгесе Елена Малинникова әйтеүенсә, вирус һәр күҙәнәккә лә ултырып бармай. Унда аҡһым менән яҡшы бәйләнешкә ингән рецепторҙар бар. Бындай күҙәнәктәр өҫкө тын алыу юлдарында күп түгел, ә балаларҙа улар бөтөнләй тигәндәй юҡ, шуға күрә балаларға сир йоҡмаҫҡа ла мөмкин.

Әле илдә генә түгел, Башҡортостанда ла сирҙең киң таралыуына юл ҡуймау өсөн барлыҡ махсус саралар һәм тыйыуҙар индерелә: уҡыу йорттары, белем усаҡтары, театрҙар, кинотеатрҙар һ.б. объекттар ябылған йәки он-лайн режимда эшләй. Уҡыусылар әле каникулда, каникулдар 6 апрелгә тиклем оҙайтыла, әле белем биреү системаһында дистанцион уҡытыуға күсеү мәсьәләһе ҡарала. Юғары уҡыу йорттары 16-18 марттан дистанцион уҡыуҙа. Бөгөнгә республиканың 96 колледжы ситтән тороп уҡыуға күсте. Балалар баҡсалары иһә ирекле йөрөүгә күсерелгән. Шулай уҡ киң күләмле саралар ҙа кисектерелә, хатта Хөкүмәт, ҡала хакимиәте һәм БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай ултырыштары, кәңәшмәләр ҙә махсус режимда алып барыла. Аэропортта сит илдәрҙән һәм Мәскәү аша транзит рейстары менән ҡайтыусыларҙың барыһынан да анализ алына. Уларҙың барыһына ла 14 көн карантинда булыу һәм быны ҡәтғи үтәү талабы ҡуйыла, әлеге ваҡытта уны үтәмәүселәргә яза биреү тураһындағы закон проекты РФ Дәүләт Думаһында ҡарала. Өфөлә коронавирустың таралыуына юл ҡуймаҫ өсөн йәмәғәт транспорты туҡталыштарында, автобустарҙа, трамвайҙарҙа һәм троллейбустарҙа дезинфекция үткәрелә. Башҡортостанда бөтә водителдәр һәм республика халҡы менән эшләгән башҡа транспорт өлкәһе хеҙмәткәрҙәре өсөн битлек режимы индерелә, йәғни улар мотлаҡ медицина битлегендә булырға тейеш. Ойошмалар һәм учреждениелар хеҙмәткәрҙәренә өйҙә эшләргә рөхсәт бирелә. Хеҙмәткәрҙәр эш урынына мотлаҡ килергә тейеш икән, уларҙы һаҡланыу, гигиена һәм дезинфекция саралары менән тәьмин итеү, биналарҙы даими елләтеүҙе контролләү, кешеләрҙең ҡулы тейгән предметтарҙы эшкәртеү, температураны үлсәү эш биреүсенең бурысы булып тора. Хатта банктар ҙа, Гознак хәҙерге купюраларҙың махсус химик ҡатлам менән ҡапланыуы һөҙөмтәһендә бактерия һәм вирус таратыусы булып тормауын билдәләһә лә, банкоматтар аша ҡулаҡса әйләнешен сикләргә һәм даими рәүештә терминалдарҙы дезинфекциялап тороу тураһында күрһәтмә алды. Әммә был сикләү бары тик аҡса ҡабул иткән йәки биргән банкоматтарға ҡағылмай.

Ошо аҙнаның шаршамбыһында Өфөлә яңы инфекцион дауахана төҙөлөшө башланды. Ул йыл һуңына тиклем тапшырылырға һәм заманса ҡоралмалар менән йыһазландырылырға тейеш. Шулай уҡ Башҡортостан менән Татарстан һәм Силәбе өлкәһе сигендә коронавирус инфекцияһын йөрөтөүселәрҙе урынлаштырыу өсөн ике өҫтәмә обсерватор асыла. Әлеге ваҡытта бер генә обсерватор бар ине.

Баш ҡаланың Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы, 22-се ҡала клиник дауаханаһы һәм бер нисә ҡала дауаханаһы лабораториялары яңы вирус менән эшләү өсөн рөхсәт алған, тимәк, улар анализдарҙы тикшереү мөмкинлегенә эйә. Был аҙнала Өфөлә стационарҙар инфекцион госпиталдәргә әйләндерелә башланы. Тәү сиратта ул 4-се инфекцион клиник дауаханаһына, 18-се, 10-сы, 5-се һәм Дим районының клиник дауаханаларына ҡағыла. Республикала барлығы 1700 инфекцион койка-урын иҫәпләнһә, стационарҙарҙың профилен алмаштырыу һөҙөмтәһендә тағы ла 1000 самаһы урын буласаҡ.

Әйткәндәй, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров коронавирус инфекцияһы буйынса карантинда булғандар менән эшләгән табиптарға өҫтәмә түләү тураһында тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйыласағын белдерҙе. Потенциаль зарарланған сирлеләр менән эшләгән социаль хеҙмәткәрҙәр өсөн дә ошондай түләүҙәр ҡарала.

Башҡортостанда коронавирустан һаҡланыу һәм уның киҫкенләшеүенә юл ҡуймау буйынса саралар буйынса республика Башлығының махсус Указы донъя күрҙе. Ул, хәл-торошҡа һәм вәкиләр ағышына ҡарап, үҙгәртелеп, саралар исемлеге өҫтәлеп тора.

**Шәрифә САЛАУАТОВА әҙерләне.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



# ТАШҠЫНҒА ӘҘЕРҺЕҢМЕ?

**Быйыл, күреүебеҙсә, ҡар бик күп яуҙы һәм көндәр ҡапыл йылытһа, йылғаларҙа һыу кимәле кинәт күтәрелеүе ихтимал. Был йәһәттән Өфө ҡалаһының яуаплы предприятие һәм ойошмаларына ҙур бурыс йөкмәтелгән.**

Оператив кәңәшмәлә "Өфөводоканал" МУП-ы генераль директоры Артем Чакиров ташҡын осоронда һыу менән тәьмин итеү объекттарының әҙерлеге менән таныштырҙы. Предприятиела һыу аҫтында ҡалыу ихтималлығы булған һыу алыу ҡоролмалары скважиналары һанын асыҡлау системаһы булдырылған. Ул һыу кимәле буйынса ҡайҙа, ҡайһы водозабор һыу аҫтында ҡаласағын билдәләй.

Шулай уҡ "Өфө инженер селтәрҙәре" МУП-ының ташҡын ваҡытында ҡулланыусыларҙы йылылыҡ һәм эҫе һыу менән тәьмин итеүе мәсьәләһе ҡаралды. Был бигерәк тә Киров, Ленин, Дим районларына ҡағыла, сөнки предприятие директоры Максим Петров белдереүенсә, өс: З. Космодемьянская урамы, 38 адресы буйынса урынлашҡан 29-сы (Кооператив ялан), Геологтар урамы, 51а адресы буйынса урынлашҡан 98-се (Кузнецов затоны бисәтәһе), Лесозаводская урамы, 1/1 адресы буйынса урынлашҡан 106-сы ҡаҙанлыҡ (Нижегородка биҫтәһе) һыу баҫыу ихтималлығы булған территорияла урынлашҡан. Әгәр Ағиҙел йылғаһында һыу кимәле 8 метрҙан артыҡ күтәрелмәһә, артыҡ борсолор сәбәп юҡ.

Оператив кәңәшмә үткән ваҡытта Ағиҙел күләме - 102, Ҡариҙелдеке - 150, Димдеке 229 сантиметрға күтәрелгән. Ағиҙелдә был күрһәткес 475-520 сантиметр булғанда һыу Романовка ауылы һәм Козарез урамы араһындағы юл аша китә. Ғәҙәттән тыш хәл килеп тыуған осраҡта Козарез ҡасабаһынан халыҡты махсус транспорт менән сығарыу планлаштырыла. Шулай уҡ һыу кимәле 700-720, 800-850 сантиметрға күтәрелгәндә Затонда Әхмәтов урамының бер ни тиклем араүығында ла һыу баҫҡан урынды аша сығыу ойоштороласаҡ. Һәр йылдағыса, граждандарҙы ваҡытлыса урынлаштырыу пункттары билдәләнгән.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Гайморит

❖ Гайморит булғанда 2 ҡалаҡ ваҡланған кер һабыны һәм һөттө ҡушып, талғын утта ҡайнатырға. Икешәр ҡалаҡ пары сығарылған бәүел, һуған һуты, үҫемлек майы һәм бал алып ҡушырға һәм ҡайнатып, һыуыңансы болғарға. Килеп сыҡҡан майҙы тампонға һылап танауға тығырға. Саҡ ҡына башты эйеп ултырырға, бер нисә минуттан танауҙан бик күп лайла ағып сыға. Тын алыуҙы еңеләйтеү өсөн бер нисә тапҡыр ошо рәүешле дауаланыу ҙа етә.

❖ Гаймориттан һары мәтрүшкәнән әҙерләнгән төнәтмә, настойка һәм май ярҙам итә. Төнәтмәне әҙерләү өсөн бер ҡалаҡ һары мәтрүшкәгә 1 стакан һыу ҡойоп, 1 минут ҡайнатырға һәм 1 сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Танауҙың эсен сайырға.

Настойка өсөн үләнде 70 процентлы спиртта (1:10) бер тәүлек торорға. Һыу менән шыйығайтылған настойканы танауға тамыҙырға.

Һары мәтрүшкәнән май әҙерләүҙең ике ысулы бар.

1) Һары мәтрүшкә сәскәһен (киптерелмәгән) шешәгә йәки быяла банкаға һалып өҫтөн ҡаплағансы зәйтүн (үҫемлек) майы ҡойорға, йылы урынға йәки ҡояш төшкән ергә ҡуйып, 2 аҙна төнәтергә. Ваҡыты-ваҡыты менән һелкеп болғатып торорға. Әҙер майҙы һөҙөргә, һалҡын урында ҡараңғы һауытта һаҡларға.

2) 200 грамм киптерелмәгән һары мәтрүшкә сәскәһенә 500 мл зәйтүн (үҫемлек) майы ҡойоп, 20-30 минут талғын утта ҡайнатырға, болғатып торорға. Бер тәүлек йылы урында төнәтеп, һөҙөргә. Майҙы танау эсенә һөртөргә.

❖ Гайморит булғанда тоҙҙо табала ҡыҙҙырырға. Каланхоэ япрағынан 1 балғалаҡ һутын һығып алып, 2 мамыҡ бауҙы сылатырға. Тоҙҙо балалар ойоҡбашына тултырып, ныҡлап бәйләргә һәм йөн шарфҡа төрөргә. Салҡатан ятып мамыҡ бауҙарҙы танау эсенә тығырға, өҫтөнән шарф менән ҡапларға. Был рәүешле 2-3 көн дауамында иртән һәм кис дауаланғанда гайморит бөтә. Уның араһында шул уҡ каланхоэ һутын 1 сәғәт һайын танауға тамыҙып торорғоҙ.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Көньяҡ башҡорттары хаҡында рус ғалимы Небольсин: "Үҫәргән, Түңгәүер һәм айырыуса Бөрйән олоҫтары башҡорт халҡының иң аҫыл өлөшөн тәшкил итә: был халыҡ оҙон буйлы, сәләмәт, ныҡ тәнле, ҡыйыу һәм эшмәкәр".*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ТАРИХ ТӨПКӨЛӨНӘН СЫҠҠАН ҮҪӘРГӘНДӘР БЕҘ!




Бөрйән, ҡыпсаҡ, үҫәргән һәм тамъян ырыуҙарының берләштерелгән шәжәрәләрендә уларҙың юлбашсыларының 1564 йылда Мәскәү батшаһы Иван Грозныйға тоғролоҡҡа ант биреүҙәре хаҡында мәғлүмәт бар. Әммә ошо тарихи ваҡиғаның күрһәтелгән йылда булыуына шик бар. Көньяҡ башҡорттары, Алтын Урҙа тарҡалғандан һуң, Нуғай ханлығына буйһондоролған була. XVII быуат башында нуғайҙар ҡалмыҡтар ҡыҫымына дусар ителеп, элегерәк биләгән ерҙәрен ҡалдырып китергә мәжбүр була. Тимәк, тарихи Башҡортостандың көньяғындағы ерҙәрҙе биләгән башҡорт ырыуҙары тап шундай сәйәси ваҡиғаларҙан һуң ғына, шул уҡ ҡалмыҡ баҫымынан да зыян күрмәҫ өсөн, Рус дәүләте менән бәйләнеш булдырып, билдәле бер шарттар менән ошо дәүләт составына инеп китә. Башҡорт тарихсыһы Ә.З. Әсфәндиәров юрматы башҡорттарының үҙҙәре биләгән аҫаба ерҙәренә батша хакимиәтенән алған грамотаһында күрһәтелгән дата "лета 7117 августа 21 дня", йәғни 1609 йылдың 21 авгусында, тиелгән. Ә көньяҡтараҡ йәшәгән башҡа башҡорт ырыуҙарының юрматыларҙан да алдараҡ Рус хакимиәте менән бәйләнешкә инеүен дәлилллэүсе башҡа мәғлүмәттәр табылмаған. Шул уҡ шәжәрәләрҙә бөрйән, үҫәргән, ҡыпсаҡ, тамъян ырыуҙары биләгән ерҙәрҙең көньяҡ сиктәренең элекке Нуғай ханлығы баш ҡалаһы Сарайчыҡҡа тиклем барып етеүе хаҡында бәйән ителә, ә быны XVII быуат башынан да иртәрәк булыуы мөмкин түгел.

Ә бына Ю.Бикбов табып нәшер иткән Үҫәргән хроникаһында ата-бабаларының Урал бейҙән һуң йәшәгән вариҫтарының исемдәре Рус дәүләтенә ҡушылыу айҡанлы билдәле булған Бикбау бейгә тиклем һаналып китә: "... Урал бейҙән - Арапан бей (Туҡтамыш хан замандашы), Арапан бейҙән - Тимер Ҡанҡа бей (Бораҡ хан замандашы), һуңғыһынан - Ҡараса бей (Жәнибек хан замандашы). Әйтергә кәрәк, Чучи хан (Алтын Урҙаны нигеҙләүсе Сыңғыҙ хандың өлкән улы) династияһынан ике Жәнибек хан була, беренсе Жәнибек - Алтын Урҙа хакимы, хиджраның 760 йылдарында булған, икенсе Жәнибәк - Ҡырғыҙ-Ҡайсаҡ урҙаһын нигеҙләүсе, тәүгеһенән 100 йыл аҙағыраҡ йәшәгән, Урус хандың ( Аҡ Урҙа хакимы) вариҫы. Ҡараса бейҙән - Сарыш бей (Ҡасим хан замандашы), Сарыш бейҙән - Аҡмачуҡ бей, һуңғыһынан - Тоҡмачуҡ бей, Тоҡмачуҡ бейҙән - Дәтигәс бей, Дәтигәс бейҙән - Бикбау бей (рус батшаһы Иоанн Грозныйҙың замандашы), башҡа башҡорт юлбашсылары менән бергә 1556 йылда рус подданствоһын алған".

XIX быуат этнографы Д.Н. Соколов үҫәргәндәр хаҡында бына нисек яҙған: "Башҡорт ҡәбиләләре араһында иң күп һанлыларҙан һаналған үҫәргәндәр Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш тарафтарын, Һаҡмарҙың урта ағымында Зәйҙең ике яғы буйлап, Урал йылғаһына еткәнсе тиерлек булған ерҙәрҙе биләй. Төньяҡ-көнсығыштан улар түңгәүерҙәр, төньяҡ-көнбайыштан ҡыпсаҡтар менән сиктәш, был ҡәбиләнең территорияһы, Көньяҡ Урал тауҙары менән бергә, Башҡортостандың сиктәренән көньяҡҡа, башҡорттарҙың элекке дошмандары булған ҡырғыҙҙар яғына табан сығыбыраҡ тора. Ҡәбилә биләгән ерҙәрҙең майҙаны 7 000 кв. саҡрым самаһы, халҡы 42 000 тирәһе". Был мәғлүмәт XIX быуат аҙағына ҡарай.

Көньяҡ башҡорттары хаҡында рус ғалимы П.И. Небольсиндың иҫкәрмәһе иғтибарға лайыҡ: "Үҫәргән, Түңгәүер һәм айырыуса Бөрйән олоҫтары башҡорт халҡының иң аҫыл өлөшөн тәшкил итә: был халыҡ оҙон буйлы, сәләмәт, ныҡ тәнле, ҡыйыу һәм эшмәкәр".

Үҫәргән ырыуы башҡорттарының бөгөнгө вариҫтары Башҡортостандың Дәүләкән, Ейәнсура, Йылайыр, Күгәрсен һәм Хәйбулла райондарында йәшәй. Үҫәргәндәрҙең боронғо аҫаба ерҙәре Ырымбур өлкәһенең хәҙерге Гай, Орск, Ҡыуандыҡ, Саракташ райондарына ҡарай, бында ла әлегәсә уларҙың вариҫтары йәшәй. Шулай уҡ Һамар һәм Һарытау өлкәләренең ҡайһы бер ауылдарында үҫәргән ырыуы вәкилдәренең барлығы билдәле.

Заманса геногеография мәғлүмәттәре үҫәргән ырыуы башҡорттарының сығыштары буйынса төрлө этник компоненттарҙан хасил булыуын раҫланы. Ошоға тиклем үткәрелгән генетик тикшеренеүҙәр үҫәргән ырыуының ирҙәр генофондында түбәндәге гаплотөркөмдәр булыуын асыҡланы: N1c1-M178 (49%), J2-M172 (38%), N1 (5%), R1a1-M198 (4%), R1b1a2 - M269 (4%).

Үҫәргәндәрҙең N1c1-M178 гаплотөркөмө уларҙың ата-бабаларының бер өлөшө Хорезмдың Кердер ерлегендә көн иткән уғырҙарҙан булыуын дәлилләй. Ғөмүмән, ошо гаплотөркөмдөң айырым субкладтарына ҡараған генетик нәҫел линиялары башҡорттарҙа, яҡуттарҙа, ханты-мансиҙарҙа, чукчаларҙа, буряттарҙа, монголдарҙа, япондарҙа, ненецтарҙа ғына түгел, байтаҡ ҡына Европа халыҡтарында ла киң таралған, уның процент нисбәте фин-уғырҙарҙа - норвегтарҙа, латыш, литва, фин, удмурт һәм мариҙарҙа күп. Күрәһең, ошо гаплотөркөмдөң тәү бабалары Байкал буйы территорияһынан төньяҡҡа табан күсенгән, уларҙың вариҫтары артабан Урал тарафтарына, һуңынан, бынан 4500 йылдар самаһы элегерәк, Европаға барып еткән.

Үҫәргәндәрҙең икенсе бер ҙур гаплотөркөмө - J2-M172. Ул Азияла ла, Европала ла киң таралған. Төньяҡ Кавказда - ингуштарҙа (88%), чечендарҙа (56%), әзербайжандарҙа (30%), грузиндарҙа (27%), әрмәндәрҙә (22%). Был гаплотөркөм Месопотамияла, Тигр һәм Евфрат йылғалары арауығында хасил булып, артабан Кипрға (37%), Ираҡҡа (34%), Ливанға (26%), Төркиәгә (24%), Грецияға (23%), Сицилияға (23%), Үҙәк Италияға (23%), Албанияға (19,5%) тарала. Төрлө тарафтарҙа йәшәүсе йәһүдтәрҙең 19-ҙан алып 25 процентҡа тиклеме ошо уҡ гаплотөркөмгә ҡарай.

Үҫәргәндәрҙең гаплотиптарына J-PF5197 линияһына ҡараған гаплотиптар иң яҡыны, тип иҫәпләнә. Улар хәҙерге ваҡытта Ғәрәп ярымутрауында һәм Көньяҡ Азияла (Һиндостан, Пакистан) йәшәгән халыҡтарҙа табылған. Күрәһең, үҫәргәндәрҙең J2-M172 гаплотөркөмөнә ҡарағандары ҡасандыр Арал диңгеҙе, Һырдаръя тарафтарында көн иткән мөйтәндәрҙең вариҫтарылыр.

Үҫәргәндәр дөйөм башҡорт тарихында күренекле урын биләй. Рус дәүләтенә ҡушылғандан бирле улар башҡорт халҡының үҙ ерҙәре, ғөрөф-ғәҙәттәре, батша хөкүмәте менән килешеүҙәрҙә ҡаралған хоҡуҡтары өсөн береһе артынан береһе тоҡанып торған ихтилалдарҙа әүҙем ҡатнаша, башҡалар менән бер рәттән тиңһеҙ юғалтыуҙарға дусар була. Үҫәргән башҡорттары Рәсәй империяһы алып барған яуҙарҙа ҡатнаша, 1812 - 1814 йылдарҙа француз баҫҡынсыларына ҡаршы һуғышта батырлыҡтар күрһәтеп, батшалыҡтың хәрби орден-миҙалдарына лайыҡ була.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 10-12-се һандарҙа).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Башҡорттар китте һуғышҡа

1942 йылдың март аҙаҡтарында - апрель баштарында 112-се башҡорт атлы дивизияһын хәрәкәт итеүсе армияға - фронтҡа ебәреү буйынса әҙерлек эштәре башлана. Дивизия штабында тимер юл эшелондарына тейәлеү һәм юлға сығыу планы төҙөлә. 1-се эшелонда 275-се кавполк 1942 йылдың 11 апрелендә юлға сыға. Дим тимер юлы стацияһына башҡорт атлыларын оҙатырға партия өлкә комитеты һәм дәүләт учреждениелары вәкилдәре, Өфөгә яҡын райондарҙан фронтҡа китеүселәрҙең яҡындары, туған-тыумасалары килеп етә. Ошо көндә бында ҡыҫҡа ғына митинг та уҙғарыла.

Ғәскәр, аттар, дивизия мөлкәте тейәлгән 13 эшелон береһе артынан береһе көнбайышҡа - фронтҡа табан ҡуҙғалып китә. Эшелондар Шишмә, Дәүләкән, Раевка, Куйбышев (хәҙерге Һамар) аша үтә. Ветерандар һөйләүенсә, поездар бик әкрен бара, сөнки иң элгәре һуғышҡа инергә тулыһынса әҙер булған ҡоралллы ғәскәрҙәр һәм һуғыш техникаһы тейәлгән эшелондарға юл асыҡ булырға тейеш була.

112-се башҡорт атлы дивизияһының һуғышҡа нисек китеүе хаҡында уның ғәрәсәтле яуҙарҙа тере ҡалып, тыуған яҡтарына еңеү менән әйләнеп ҡайтыу бәхете тейгән командирҙары - дивизияның политбүлек начальнигы урынбаҫары Сабир Ҡадиров һәм полк комиссары Сәғит Әлибаев матур иҫтәлектәр ҡалдырған. Гәзитебеҙ биттәрендә уларҙың яҙмаларынан ошо ваҡиғалар хаҡындағы өлөштәренән өҙөктәрҙе ҡабатлау урынлы булыр, тибеҙ.

**Сабир Ҡадиров үҙенең "Урал бөркөтө" китабында бына ниҙәр теркәп ҡалдырған:**

"1942 йылдың яҙы ла етте. Ҡояшлы матур көн: 11 апрель. Дивизия бөгөн фронтҡа китә. Штабта ҡыҙыу эш ҡайнай. Комдив Шайморатов тимер юл станцияһы начальнигы, тимер юл хәрби коменданты менән өҙлөкһөҙ элемтәлә. Бөгөн ул хатта иртәнге ашын да онотто. Башта полк командирҙарын һәм комиссарҙарын йыйып һөйләште, һәр береһенә тәғәйен бурыс йөкмәтте, дивизия штабы начальнигы полковник И.И. Голеневте хәл менән таныштырҙы, һуңынан адъютанты Сафиуллин менән вокзалға төштө. Бында дивизия эшелонға тейәлә ине. Эскадрон командирҙары эш барышы тураһында рапорт бирҙеләр. Шайморатов атынан төшөп, вагонға инеп китте, һуғышсыларҙың ҡайһылай урынлашыуын, аттарҙы ҡарап сыҡты. Етешһеҙлекте лә күрмәйенсә үтмәне, һуғышсылар, уны оҙатып, ҡәнәғәт тамаҡ ҡырҙы: "Ай-һай, тынғыһыҙ, олатайҙарса хәстәрлекле, уның менән бер ҡайҙа ла хур булмаҫһың", - тиҙәр. (М. М. Шайморатовты һуғышсылар, полк командиры Т. Т. Кусимовҡа эйәреп, әллә ҡасан уҡ "Олатай" тип атайҙар ине.) Состав алыҫ юлға сығырға әҙер. Өфөнән тәүге эшелонды оҙатырға партия Өлкә Комитете, хөкүмәт вәкилдәре, китеүселәрҙең туған-тыумасалары килеп етте. Митинг башланды. Партия һәм хөкүмәт вәкилдәре дивизия һуғышсыларына изге теләктәр күндерҙе. Шул саҡ оҙатыусы халыҡ араһынан трибунаға бөрмә билле апаҡ тун кейгән, ҡулына аҡ ебәккә ураулы метр самаһы оҙонлоҡтағы төргәк тотҡан, ап-аҡ һаҡаллы һикһән йәштәрҙәге ҡарт күтәрелде. Көн һалҡынса булыуға ҡарамаҫтан, ул бүркен һалды, тирә-яҡҡа күҙ ташланы ла, һүҙ башланы.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Әммә был яҡта етешлек, бөтөнлөк, камиллыҡ уңайлыҡтар йәки барлыҡ-юҡлыҡ менән үлсәнмәй. Бында донъяны ҡабул итеү фәлсәфәһе саҡ ҡына башҡасараҡ. Бында кешеләр газһыҙ-һыуһыҙ йәки юлһыҙ ҙа бәхетле була белә.*

# БӨРЙӘНДӘР ТӘБИҒӘТКӘ ЕРЕККӘН,

## улар өсөн етешлек барлыҡ-юҡлыҡ менән үлсәнмәй

**Республикабыҙ район хакимиәттәре вазифаларын йәш ир-егеттәр биләй һуңғы йылдарҙа. Был бик тә ыңғай һәм күркәм күренеш. Беренсенән, көсө-дәрте ташып торған белемле йәш ир-егеттәребеҙ иңдәренә яуаплылыҡ алып, ил йөгөнә егелә, икенсенән, йәш ир-азамат ул үҙе үк йәшәүгә-йәшнәүгә этәреүсе, әйҙәүсе, өмөт биреүсе, маҡсаттарға ҡыйыу ынтылыусы образ сағылышы. Был үҙе үк халыҡта ышаныс тыуҙыра. Өсөнсөнән, үҙ ерлегебеҙҙә үҫеп сыҡҡан һәм урындағы хәл-проблемаларҙы, йәшәйеш көйөн яҡшы белгән, аңлаған йәш кадрҙарыбыҙ бар. Шундайҙарҙың береһе - Бөрйән муниципаль район хакимиәте башлығы Ғәзиз Миңлеәхмәт улы МАНАПОВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**



**Ғәзиз Миңлеәхмәт улы, әйҙәгеҙ, райондың үҙенсәлектәре тураһында һөйләшеп алайыҡ әле. Бөрйән - ул Бөрйән, шулай бит? Ул Баймаҡта, Хәйбулла ла, Дыуан да түгел. Бөрйән - ул башҡорттоң иң боронғо тарихын артыҡ үҙгәртмәйенсә генә һаҡлаған берҙән-бер төбәк. Уның ерлеге лә, тәбиғәте лә, климаты ла һәм халҡы ла башҡа яҡтарҙыҡынан айырыла. Һеҙҙенсә, ниндәй улар: Бөрйән һәм бөрйәндәр?**

- Иң беренсе, был минең тыуған районым, ҡобайырҙағыса "Кендегемде киҫкән ер, Тәмле һыуын эскән ер". Шунлыҡтан, әгәр мин был төбәк кешеләре хаҡында һөйләйем икән - үҙемде ҡылыҡһырлайым. Һәм "Бөрйәндә" тип тә түгел, ә "беҙҙә" тип әйтәсәкмен. Ниндәй кешеләр йәшәйме беҙҙә? Бик ихлас, ябай, баҫалҡы һәм тура һүҙле башҡорттар ғүмер итә беҙҙә. Улар, бер ҡарағанда, үҙҙәренең урман-тауҙары кеүек дәрәжәле, һауалы, һалҡын да кеүектәр. Ә яҡынлашҡанда, асылдарын белгәндә, әҙәпле, тәртип тотҡан, хөрмәт һәм ихтирам күрһәтә белгән, ипле икәнлектәрен аңғараһың. Ысынлап та, ауыл халҡы тәүфиҡле ул беҙҙә. Төрлө йыйындарҙа, кәңәшмәләрҙә лә бер ваҡытта ла йөҙ йыртыу, мәҙәниәтһеҙ ҡыланыу тигән нәмәләр юҡ, хатта бик сетерекле һорауҙарҙы ла боронғо аҡыллы ҡарттарса һәлмәк аҡыл, кәңәш, теләк менән белдереү йолаға ингән. Тура һүҙлелектәре лә шул әхлаҡи нормаларға, намыҫ принцибына ҡоролған. Уникаль халыҡ ул беҙҙең бөрйәндәр. Был һыҙаттар әлеге шул ерлек һәм этник үҙаң яҡшы һаҡланыуҙан киләлер, тип иҫәпләйем.

Бөтә нәмә лә сағыштырыуҙа асыҡлана, тиҙәр. Һеҙ әле мегаполис тормошо менән урман кешеһенең йәшәйешен сағыштырырға маташаһығыҙ. Тик улар икеһе ике донъя. Ғүмерҙә ҡаланы күрмәгән һәм бер ваҡытта ла күрмәйәсәк кешеләр бар бында, хатта район үҙәгенә лә өс-дүрт йылға бер генә сығып әйләнгәндәр етерлек. Мөмкинлектәре сикләнгәндән түгел, ә ихтыяждары булмағанға. Улар үҙҙәренең шул тыныс, һил, мөһабәт зоналарын комфортлы тип таба, башҡа тормош эҙләмәй.

Төптән аңлатҡанда, әлегеләй фәлсәфәгә төшөп китергә тура килә. Тәбиғәт менән кеше араһындағы гармонияға, идиллияға нигеҙләнә был фәлсәфә. Әйтәләр ҙә инде, бәхетле була торған урынды эҙләмә, йәшәгән ереңдә бәхетле була бел, тип. Бына беҙ шуны беләбеҙ.

Ә инде райондың йәшәйешенә килгәндә, мин уның хәлен башҡа райондар менән сағыштырмайым да. Үҙегеҙ билдәләп үттегеҙ - был район айырым биләмә. Ҙур ҡалаларҙан алыҫ ята, географик урыны ла тау-урманлы, эре предприятиелары юҡ. Был үҙенә күрә кире күренештәрен дә бирмәй ҡалмай. Тәбиғи тыуым буйынса беренсе урында торһаҡ та, районда халыҡ һаны артмай. Тимәк, йәштәр эш эҙләп ситкә китә. Был тәңгәлдә уларҙы ла ғәйепләп булмай, уңайлыраҡ йәшәү шарттары һәм яҡшыраҡ хеҙмәт хаҡы юллау уларҙы ошолай тыуған ерҙәренән айырылырға мәжбүр итә. Шул уҡ ваҡытта бында ерлектең аҫаба халҡы йәшәй, беҙҙә күсеп килеүселәр һирәк. Халыҡ бер-береһен, ата-бабаларын, зат-ырыуын белә. Һәм ошо сәбәптән дә улар үҙ-ара татыу, әҙәпһеҙлеккә, йола боҙоуҙарға юл ҡуймайҙар.

Эйе, Бөрйәндә йәшәү шарттары юғары уҡ кимәлдә түгел. Әммә был яҡта ана шул етешлек, бөтөнлөк, камиллыҡ уңайлыҡтар йәки барлыҡ-юҡлыҡ менән үлсәнмәй. Бында донъяны ҡабул итеү фәлсәфәһе саҡ ҡына башҡасараҡ. Бында кешеләр газһыҙ-һыуһыҙ йәки юлһыҙ ҙа бәхетле була белә. Йыш ҡына Үрге Нөгөш ауылында булырға тура килә. Унда ҡыш көндәре бөтөнләй юл өҙөлә. Уйлап ҡараһаң, шундай уңайһыҙлыҡтан халыҡ асыулы торорға тейеш кеүек тә, ә уларҙа кире тойғоларҙың әҫәре лә юҡ. Юҡ, улар күнгән йәки башҡа тормошто белмәй түгел. Улар тәбиғәткә үтә лә ереккән һәм уның менән бербөтөнлөктәрен тәбиғи ҡабул итә белә.

**Бөгөн туризмға йәшел юл асылғас, барыһы ла Бөрйәнгә ябырыла түгелме? Бөрйәндәр үҙҙәре берәй файҙа сығара аламы тәбиғәттәренән?**

- Был тәңгәлдә беҙ "ябырылыусыларҙы" сикләй алмайбыҙ һәм хатта ҡаршы тороу урынһыҙ ҙа тип уйлайым. Туризм халыҡҡа йәшәү шарттарын яйлауға бер ыңғай йүнәлеш, кәсеп итеп ҡабул итәбеҙ. Бөрйәндәр бөгөн миҙгеле менән ял итеүселәрҙе йәшәтеү, туҡландырыу, хеҙмәтләндереү өлкәһендә аҙмы-күпме сауҙа итергә, үҙҙәре етештергәнде һатырға күнегә. Әле бөрйәндәрҙең туристарҙы файҙаланып аҡса эшләргә өйрәнәһе бар. Был улар өсөн яңы асылып торған өлкә. Сувенирҙар эшләү, аҙыҡ-түлек, дөйөм туҡланыу нөктәләре булдырыу, торлаҡ тәҡдим итеү, иҫтәлекле урындар буйлап экскурсиялар ойоштороу, һыу юлдары буйлап йөрөтөү ҙә килем алыу юлдары ул.

Беҙҙә завод-фабрикалар йәки цехтар юҡ. Леспромхоз эшләп килде, әммә ул бөгөн юҡ кимәлендә. 100-120 кешегә булһа ла эш урыны бирә ине ҡасандыр. Әле ошо юҫыҡты киренән терелтеүҙең төрлө варианттарын ҡарайбыҙ - нисек килеп сығыр.

Белеүегеҙсә, беҙҙең территорияның 42 процентын Федераль ҡурсаулыҡтар биләй. Рәсәй буйынса бер түгел, ике ҡурсаулыҡты үҙенә индергән бер генә район да юҡ. Был, бер яҡтан, беҙҙең мөмкинлектәрҙе сикләһә, икенсе яҡтан, тәбиғи ресурстарҙы ҡулланып йәшәй белергә өйрәнеү әле килер, тигән өмөттә лә йәшәтә. Бөгөнгө быуын тәүге аҙымдарҙы яһаһа, киләһе быуын - йәштәр оҫтарыр, моғайын.

Бөгөнгө һалым алыу-түләү һәм башҡа системалар шулай итеп ҡоролған - беҙгә туристарҙан килем алыу мөмкинлектәре аҙ. Бында ер, мөлкәт һалымы ғына килә. Мультипликатив эффект тигән төшөнсә аша ҡарағанда, туризм туранан-тура килемгә генә түгел, ауыл хужалығы, райондың төҙөкләндерелеүе, юлдар төҙөлөүе кеүек яҡтарға ла үҫеш бирә. Быныһы ла яҡшы.

Урындағы йәштәр туризмды үҙҙәре лә ойоштора башланы. Этнотур эшләп килә. Ер алып ял урындары ҡорола. Солоҡсолоҡ, йылҡысылыҡ, һунарсылыҡ та туризмды йәлеп итә башланы. Райондың бюджеты 850 миллион булһа, шуның 138 миллионы беҙҙең үҙебеҙҙең килем һәм шуның 5 миллионы туризмдан килә. Шүлгән мәмерйәһе ЮНЕСКО ҡарамағына инһә, был уңыш беҙгә лә ҡулай булыр һәм райондың күп яҡтарына иғтибар артыр ине. Шулай уҡ Шүлгәнгә сәйәхәт итеүҙе лә йәнләндерә, байыта төшһәләр, ял итеүселәр унда сифатлы ял итеп, күп мәғлүмәт туплап ҡайта алыр ине.

**Һәр хәлдә, эш юҡ тип ҡул ҡаушырып ултырмаясаҡ бөрйәндәр?**

- Әлбиттә. Беҙҙә өс төп йүнәлештә эшләү ҡулайлы. Беренсеһе ауыл хужалығы, икенсеһе туризм, өсөнсөһө ағасты тәрән эшкәртеү системаһы. Туризм линияһы буйынса йүнәлештәр ҙә, проблемалар ҙа билдәле. Бөгөн беҙҙең 92 процент ерҙәребеҙҙең Дәүләт урман фонды ҡарамағында һәм 42 процентында ҡурсаулыҡтар булыуы аяҡты-ҡулды бәйләй. Быларҙың үҙенең ыңғай яҡтары ла, кире күренештәре лә бар. Беҙҙең, ерле халыҡтың, был тәңгәлдәге хеҙмәте туристарҙы хеҙмәтләндереү. Беҙгә ял итеүселәргә ҡунаҡханалар, ваҡытлыса торлаҡтар төҙөү эштәре йәнләндерелә. Тау саңғыһы курорттарын асыуға ла урындар билдәләнгән. Урман хужалығы министрлығы был тәңгәлдә беҙгә булышлыҡ итә. Инвесторҙарҙы йәлеп итеү өсөн беҙгә ерҙе, урынды әҙерләп, ауыҙҙарына сәйнәп һалып тигәндәй бирергә кәрәк. Юғиһә, ҡырыҫ тәбиғәт эсенә килеп инеп ниндәйҙер ҙур төҙөлөштәр башларға ашҡыныусылар аҙ.

Ағасты тәрән эшкәртеүгә килгәндә, 2018 йылда Ҡурғашлы ауылында "Белпромресурс" тигән ойошма хәрәкәткә килде. Аҙыраҡ ауырлыҡтары бар, әлбиттә, әммә был да яйға һалыныр тип өмөт итәбеҙ. Башта ҡоролмаларҙы ҡытайҙар килеп ҡороп, эште башлап ебәргәйнеләр, тәүге продукция ла экспорт булып Ҡытайға китте. Унан инде был хеҙмәттәшлектән баш тарттыҡ һәм бөгөн тауар Учалы, Стәрлетамаҡ ҡалаларына ебәрелә. Әлеге өлкә өйрәнеү, тәжрибәләр үткәреү, ҡулайлаштырыу өҫтөндә. Киләсәктә уға өмөт бар.

Район буйынса ағас менән булышыусы барлыҡ эшҡыуарҙарға ла ағасты сеймал килеш ебәрмәскә, ә тәрән эшкәртеүҙе маҡсат итеп ҡуйырға тигәнде талап итәбеҙ. Ауыл халҡы электән нимәгә күнеккән? Сыҡҡан ағасты тамырҙа көйө һатыуға ла, иң түбән килемгә ризалашырға. Мәҫәлән, 70 кубометр ағас сыҡты икән, ул уны шул 70 меңгә бирә лә ебәрә. Иң еңел юл. Ә саҡ ҡына баш ватыңҡырап, ҡыбырланҡырап алһа, йәғни, ҡырҡып, таҡта итеп үткәреп, кубометрын 3 меңдән генә һатһа ла, 210 мең аҡса сығара. Унан тағы ла мәшәҡәтләнә бирһә -

киптереп йәки бура бурап йәки евровагонка кеүек материалдар яһап һатһа - тағы ла мулыраҡ табыш ала. Бына ошоно төшөндө хәҙер беҙҙең халыҡ та: ауылдарҙа ағасты тәрән эшкәртеүсе егеттәр күренә башланы. Ҡырҡылған һәм ҡырҡылмаған пиломатериалдар, брус, таҡта һәм башҡалар етештереү бөгөн ауыл ерендә лә яңылыҡ түгел.

Артабан киткәндә, ошо йылдың февраль айында XIX Рәсәй сәнәғәт форумы сиктәрендә Бөрйәндә ҡояш электр станцияһы асылды. Был Европалағы иң ҙур энергия туплауыстары булған гибрид ҡояш электр станцияһы. Бөрйән районы өсөн был яңылыҡ оло ярҙам. Йыш ҡына ут һүнеү сәбәпле урындағы халыҡ көнкүрештә ҡыйынлыҡтар кисерә ине. Хәҙер уларҙы электр энергияһы менән тотороҡло рәүештә тәьмин итеү мөмкинлеге тыуҙы. Бөрйән ҡояш электр станцияһы селтәр менән параллель рәүештә лә, автономлы режимда ла эшләй. Шулай итеп, электр станцияһы бөтә районға электр энергияһы бирергә, ә авариялар осрағында автономлы режимда дауаханаларҙы, мәктәптәрҙе, балалар баҡсаларын электр менән тәьмин итергә тейеш.

Ауыл хужалығына килгәндә, ул беҙҙә беренсе сиратта бал ҡортона бәйле. Тик бында ла үҙ үҙенсәлектәре бар. Беҙҙең бренд таҙа Бөрйән ҡорто бит инде. Бөрйән бал ҡортон бер урында ҙур күләмдә тотоп булмай. Улар тәбиғәттәре менән иркен территорияла ғына йәшәргә ҡулайлашҡан. Карпат ҡорттары йәки башҡа көньяҡ ҡорттары ике ҡатлы умарталарҙа ла, бер майҙанда йөҙәр, ике йөҙәр баш йорттарҙа ла һыйышып йәшәй ала. Ә беҙҙекеләр - юҡ. Беҙҙекеләрҙә тәүтормош инстинкттары һаҡланған: уҫаллыҡ - һаҡланыу сараһы, йыш күс айырыу - тоҡомон таратыу яйы, күп йомортҡа һалыу - үрсеү. Бына ошондай ҡатмарлы холоҡло ҡорттар менән эш итергә мәжбүр беҙҙең ҡортсолар. Был тәңгәлдә Бөрйән балы тигән брендты алыу өсөн эштәр алып барабыҙ. Шул мәсьәләне хәл иткән осраҡта, хужалыҡтарыбыҙҙың продукцияһы яҡланған һәм конкурентһыҙ булыр ине.

Ҡымыҙ ҙа башҡа яҡтарҙан айырмалы рәүештә икенсерәк төрлө Бөрйәндә. Йомшаҡ урман үләненең ҡымыҙы сөсө, эсеүгә йомшаҡ. Кәзә ҡымыҙы ла шулай уҡ. Районыбыҙ кәзә ҡымыҙы етештереү буйынса алдынғылар рәтендә. Айнур Дәүләтбаев тигән эшҡыуар егетебеҙ Өфөнөң 23 сауҙа нөктәһендә кәзәнең һөтөн, ҡымыҙын һәм сырын һатыуға сығара. Һөт етештереүселәр ҙә юҡ түгел. Миҫалға алғанда, Ҡолғана ауылынан Ғәетбаев Сәлих ағай 50 баштан артык һауын һыйыры тота һәм һөтөн, башҡа һөт аҙығын район баҙарына алып килә һәм күрше районһарҙың һөт йыйыу станцияларына тапшыра.

Мал көтөү урындары тар булыуға ҡарамаҫтан, халыҡ был боронғо кәсебенән баш тартырға уйламай, киреһенсә, мал үрсетеү өҫтөндә.

Бөрйән районында минераль инештәр ҙә, графит һәм плитә таш яткылығы ла, хатта тауҙан йылы сыҡҡан урындар ҙа бар. Быларҙы урындағы ҡыҙыҡһыныусылар үҙҙәре эҙләп тапҡан һәм тикшереп ҡараған. Атап әйткәндә, Яңы Усман ауылынан Ҡадир Ҡаһармановтың тәжрибәләре былар. Киләсәктә ошо асыштарҙы ҡулланып, яңы йүнәлештәр башларға була. Былар беҙҙең планда.

**Ҡасандыр саф башҡорт телендә генә һөйләшкән Бөрйән дә бөгөн руссалашты һымаҡ. Нисек уйлайһығыҙ, туған тел мәсьәләһе ҡырҡыу проблема булып баҫмаҫмы киләсәктә?**

- Бөрйәндә бөгөн дә саф башҡортса һөйләшәләр. Бына мин урамда, хатта үҙәктә лә, русса аралашып торған башҡорттарҙы күргәнем юҡ. Белеүегеҙсә, рус һәм башҡа милләттәр ҙә башҡортса аралашып йәшәй. Мәктәптә рус класы бында борондан булды, уҡыу-уҡытыу дөйөм республика программаһы буйынса алып барыла. Бында халыҡ артыҡ рухын, телен яҡлап айҡашып өйрәнмәгән, уларҙа агрессия юҡ. Сөнки уны ҡыҫырыҡлаған башҡа милләттәр ҙә юҡ иҫәбендә. Беҙҙә бармаҡ менән генә һанарлыҡ булған икенсе милләттәрҙе, йәки ваҡытлыса килгәндәрҙе, ҡунаҡ итеп кенә ҡабул итәләр йәки улары үҙҙәре лә башҡортса аралашып өйрәнгән.

Балаларҙың рус теленә күсә барыуын күҙ уңында тотһағыҙ, был ғәйепте тик ғаиләләргә һәм ата-әсәләргә генә ҡайтарып ҡалдырырға кәрәк. Мәҫәлән, минең балаларым өйҙә тик башҡортса ғына аралаша. Өләсәй-олатайҙары ла, әсәләре лә уларға тик башҡортса мөрәжәғәт итә һәм шуны талап итә лә. Шунлыҡтан мин, мәҫәлән, биш бала үҫтергән атай булараҡ, мәктәпте йә иһә йәмғиәтте минең балаларымды урыҫлаштыра тип ғәйепләй алмайым. Балам туған телен белмәй, унан ситләшкән, милли ерлегенән айырылған икән, бында мин - ата-әсә яуаплы. Сөнки рухи тәрбиәгә нигеҙ ғаиләлә һалына. Рух иһә бөрйәндәрҙә тәбиғи, ул тойғоно, хатта тойғо ғына түгел, булмышты уларҙан бер нисек тә тартып алып йәки икенсе итеп булмай. Әлеге ваҡытта рух төшөнсәһен мин тыуған ерендә һөйөү, тоғролоҡ, милләтеңде, үҫкән ер-һыуыңды яратыу, телеңә хыянат итмәүҙә күрәм.

**Эскелек мәсьәләһе нисек ҡуйылған Бөрйәндә? "Беҙҙә эсмәйҙәр" тип әйтә алаһығыҙмы?**

- "Эсмәйҙәр" үк тип әйтмәйем, әммә "Эскелеккә ҡаршы көрәшәләр" тип әйтә алам. Эскелек, үткән йылдар менән сағыштырғанда күпкә кәмене. Был бер беҙҙә генә түгел, сағыштырмаса республикала шулайҙыр. Халыҡтың аңы үҙгәрә бара, донъяны ҡабул итеүе һәм уға мөнәсәбәте лә икенсе юҫыҡҡа төшә. Бөгөн дин килде. Ул да эскелеккә ҡаршы ҙур көс булды. Ауылдарҙа эске һатыусыларҙы контролгә алалар, тыялар, оялталар, закон нигеҙендә лә яза бирәләр. Был да файҙаға. Йәштәр сәләмәт тормошто модаға индерҙе. Эскелекһеҙ күпкә өлгәшерҙәрен дә аңланылар. Спорт алға китте. Хәҙер бәләкәй ауылдарҙа ла балалар спортҡа ылыҡты. Был ыңғай күренештәрҙең береһе лә беҙҙең районды ла урап үтмәй.

**Һеҙ республикала иң күп балалы йәш район башлығы, шулай бит? Әйҙәгеҙ, ғаиләгеҙ менән дә танышайыҡ әле? Ниндәй тәртиптәрҙә, йолаларҙа йәшәй был ҙур ғаилә?**

- Беҙ ҡатыным менән икебеҙ ҙә ошо төбәк кешеләре, үҙем Иҫке Собханғолдоҡо, хәләл ефетем Байназар ауылы ҡыҙы. Һөнәрҙәребеҙ буйынса ул уҡытыусы, мин иҡтисадсы. Балаларҙың олоһона 10, кесеһенә 1 йәш тулды. Дүрт ҡыҙыбыҙ һәм бер улыбыҙ бар.

Мин, әлбиттә, ғаиләбеҙҙе ҙур ғаилә итеп күрмәйем. Беҙҙең яҡта бындай ғаиләләр ғәҙәти ул. Ҡатыным менән икебеҙ ҙә шундай уҡ күп балалы ғаиләләрҙә үҫкәнбеҙ. Өйләнешкәс тә, әле дүрт балабыҙ булғансы, әсәй менән бер йортта көн иттек. Айырым сығыуыбыҙға әле яңы ғына. Шунлыҡтан, өйләнмәй йөрөгән егеттәрҙең: "Ғаилә ҡора алмайым, сөнки йортом юҡ, эшем юҡ ", - тиеүҙәренә ышанмайым. Был тәңгәлдә теләк һәм маҡсат юҡтыр, тип уйлайым.

Балалар ике баланан артһа, уларҙың күплеге тойолмай икән ул. Улар араһында ололарҙың бәләкәстәрен ҡарау тәртибе барлыҡҡа килә. Беҙҙең өйҙә, мәҫәлән, апаһы һеңлеһенең өйгә эштәрен тикшерә, мәктәпкә әҙерлеген барлай, бәләкәстәрен баҡсанан ала. Был эштәргә ул шул тиклем яуаплы ҡарай, хатта үҙенең түңәрәктәренән ашығып сығып баҡсаға йүгерә икән.

Балаларҙы тәрбиәләү буйынса бер ниндәй ҙә айырым методика юҡ, яп-ябай, үҙебеҙсә халыҡ тәрбиәһе. Атай менән әсәй эшләй, балалар уларға мөмкин тиклем ярҙамлаша. Бер ниндәй ҙә "шуны эшләһәң шуны алып бирәм" йәки "биш"кә уҡыһаң шулай була" тигән вәғәҙәләр ҙә юҡ. Яҡшы уҡыу, тәртип белеү, хеҙмәткә өйрәнеү балаларҙың ғаиләләге беренсе һабағы, артабанғы тормош нигеҙе, тип иҫәпләйбеҙ. Балалар ғаиләлә нимә күрә, осҡанда шуны ҡабатлай. Шунлыҡтан, бөгөн уларҙы йәмғиәткә файҙалы, шәхси планда уңышлы һәм ата-әсәгә мәрхәмәтле булырлыҡ итеп үҫтереү - беҙҙең төп бурыс.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғәзиз Миңлеәхмәт улы менән күп нәмәләр хаҡында һөйләштек. Ир-егеттең бөгөнгө хәле, ҡатын-ҡыҙ холҡондағы милли һыҙаттар, балалар психологияһы, районға ҡағылышлы төрлө мәсьәләләр, киләсәк пландар һәм башҡа темаларҙы ҡуҙғаттыҡ. Ниндәй генә йүнәлеште алғанда ла, етәксенең киң эрудициялы, юғары интеллектлы, фәлсәфәүи ҡарашлы бик тә белемле ир-уҙаман булыуын аңғармау мөмкин түгел ине. "Бар шул үҙебеҙҙең башҡорттар араһында ошондай етәкселәр, ир-уҙамандар!" тип шатланып ҡалдыҡ редакцияла.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

*Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ*



# ҺЕҘ КЕМ, КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ,

## йәки Тарихи документтар ни һөйләй?

**1795 йылғы V ревизия буйынса Ырымбур губернаһының 12 өйәҙендәге башҡорттар һаны:**

| № т/б | Өйәҙҙәр | V ревизия буйынса башҡорттарҙың һаны | | | Ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар нисбәте |
|---|---|---|---|---|---|
| | | ирҙәр | ҡатын-ҡыҙҙар | бөтә башҡорттар | |
| 1. | Верхнеуральск | 10 184 | 8 663 | 18 847 | 1,18 : 0,82 |
| 2. | Бәләбәй | 8 991 | 8 289 | 17 280 | 1,08 : 0,92 |
| 3. | Бөрө | 10 675 | 9 829 | 20 504 | 1,08 : 0,92 |
| 4. | Бөгөлмә | 1 213 | 1 204 | 2 417 | 1,01 : 0,99 |
| 5. | Боғоруслан | 221 | 223 | 444 | 0,99 : 1,01 |
| 6. | Быҙаулыҡ | 580 | 535 | 1 115 | 1,08 : 0,92 |
| 7. | Минзәлә | 8 027 | 9 813 | 17 840 | 0,81 : 1,19 |
| 8. | Ырымбур | 11 556 | 10 632 | 22 188 | 1,08 : 0,92 |
| 9. | Стәрлетамаҡ | 14 137 | 12 992 | 27 129 | 1,08 : 0,92 |
| 10. | Троицк | 7 370 | 7 079 | 14 449 | 1,04 : 0,96 |
| 11. | Өфө | 4 238 | 4 171 | 8 409 | 1,02 : 0,98 |
| 12. | Силәбе | 5 225 | 4 842 | 10 067 | 1,07 : 0,93 |
| | **Бөтәһе** | **82 417** | **78 272** | **160 689** | **1,06 : 0,94** |

V ревизия материалдары көнбайыш башҡорттарының ниндәй ырыуҙарға ҡарағанын аныҡ билдәләргә мөмкинлек бирә. Минзәлә өйәҙендә Байлар, Бүләр, Йәнәй, Ирәкте, Ҡырғыҙ, Гәрәй, Ҫарылы-мең башҡорт олоҫтарының, Бөгөлмә өйәҙендә - Ҡырғыҙ, Юрмый, Ҡыр-йылан, Байлар олоҫтарының аҫаба ерҙәре, Бәләбәй өйәҙендә Бүләр, Ҡыр-йылан, Кальнин (дөрөҫөрәге - Ҡаңны), Ҡырғыҙ, Дыуанай, Елдәк, Ирәкте һәм Меңдәрҙең Ҡырҡөйлө-, Ил-күл-, Күл-иле-, Ҫаралы-мең башҡорттары biләгән ерҙәр йәйрәп ята. Бөрө өйәҙе территорияһында Ҡаңны, Шәмшәҙе, Танып, Елдәк, Эске Йылан, Таҙлар, Бүләр, Ирәкте Ҡырғыҙ, Йылан, Ҡыр-Йылан, Гәрәй, Урман-Гәрәй, Ҡыр-танып, Өфө-Танып, Сунлар, Уран, Балыҡсы олоҫтарының аҫаба биләмәләре булған. Пермь губернаһының Уса өйәҙендә Ғәйнә олоҫо башҡортарының 28, Пермь өйәҙендә - 2, Красноуфим өйәҙендә - өпәй, ҡошсо, һыҙғы башҡорттарының 27 ауылы була.

Көнбайыш Башҡортостанды төйәк итеүселәрҙең этник сығышы тураһында байтаҡ фараздар бар. Шуларҙың береһенә ярашлы, 1897 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбе һөҙөмтәләре буйынса Бөгөлмә, Минзәлә, Алабуға һәм Сарапул өйәҙҙәрендә йәшәгән 200 мең башҡорттоң ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә (1897-1920 йй.) үҙенең милли үҙаңын үҙгәртеп, татарҙар составына инеп китеүе уларҙың элекке замандарҙан бирле башҡорт этносына ҡарамауын, башҡорт та, татар ҙа булмайынса, ниндәйҙер бер күсмә төркөм булыуын аңлата. Башҡортостандың көнбайыш райондарының төрки халҡы башҡорт булмаған, тип иҫәпләй ошо фараз яҡлылар. Шул уҡ ваҡытта улар ошо халыҡтың башҡорт сығышлы булыу мөмкинлеген бөтөнләйгә инҡар итә алмай, әммә ошо мәсьәләне бына нисек хәл итергә теләй: татар мөхитендә башҡорттар "тулыһынса ассимиляция"ға бирелгәс, уларҙың татар этносына ҡарауын танып, башҡорттар иҫәбенән сығарырға кәрәк, ти улар.

Икенсе берәүҙәр башҡорттарҙың ҡасандыр Көнбайыш Башҡортостандың тәү халҡы булыуын раҫлай. Әммә XVI быуатта Иван Грозный Ҡаҙанды яулап алғас, татарҙар күпләп Башҡортостанға күсенә башлай. Уның көнбайыш яғындағы татарлашҡан башҡорт төркөмө һәм башҡорт йоғонтоһона эләккән татар типтәрҙәре төркөмө барлыҡҡа килә. Өсөнсөләр мәсьәләне ябай ғына хәл итә. Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуынан һуң төп халыҡ үҙ ерҙәрен ҡалдырып, төбәктең көньяҡ һәм көнсығыш тарафтарына күсеп китә. Волга буйынан килгән татар мигранттары элек башҡорттарҙыҡы булып, буш ҡалған ерҙәрҙе төйәк иткән, имеш. Ошо ерҙәргә килеп сыҡҡан күскенселәр ни эшләптер "башҡорт" булып яҙыла. Йәнәһе, бына ошо рәүешле Башҡортостандың көнбайыш, төньяҡ-көнбайыш, хатта көньяҡ-көнбайыш төбәктәрендә башҡорт тип йөрөтөлгән ауылдар барлыҡҡа килә.

**(Дауамы бар).**

✓ *Һалған да оноткан. Бер көнө эштән ҡайтһалар, ҡаҙ ҡурҡып өйҙә осоп йөрөй икән. Ояһын ҡараһалар, ап-аҡ бөркөт себеше ҡаҙ күкәйҙәре өҫтөндә ыҫылдап ултыра икән. Ҡаҙ ояһына башҡаса кермәгән дә, баҫмаған да.*





*Спартак ИЛЬЯСОВ*

# АТА-БАБАМ ҺӨНӘРЕ - ҠОШ СӨЙӨҮ

Инә бөркөт йомортҡаларын утыҙ биш-ҡырҡ ике көн баҫа. Бер-береһен табышҡан йәш бөркөттәр ояны яңынан ҡора. Әгәр оло ата бөркөт йәш йәки тиңдәш инә бөркөт эйәртеп алып ҡайтһа, иҫке ояны яңырталар, таҙарталар, йомшарталар. Ата бөркөт ояла баҫҡан инә бөркөттө ташып ашата. Нигеҙҙә, ул ҡуян, йомран, ҡош ите була. Әммә ул үҙ ҡорбанын ояһы янында ботарламай ҙа, йөнөн дә туҙҙырмай. Ситтә, йыраҡта, тамағы төбөнә йомшаҡ ит тултыра, шуға ла муйыны байтаҡ йыуанайған төҫлө күренә. Ояға осоп етер саҡта, тамағы тулы булғанлыҡтан, тоноҡ, моңһоҙ тауыш биреп килә. Оя ситенә ултырып, ауыҙынан ауыҙға йә инә бөркөт алдына ҡоҫа. Инә бөркөт ял итер өсөн осҡанда ата бөркөт ояға ултыра. Уның төп бурысы - ояны һыуһарҙан, башҡа бөркөттәрҙән һаҡлау. Йәнлектәрҙең иғтибарын йәлеп итмәҫ өсөн, оянан төшкән һәр сүп-сарҙы, һөйәктәрҙе ситкә ташып ташлай. Май айында бер йәки ике ап-аҡ мамыҡлы себеш сыға. Улар үҙ-ара соҡошмай, әммә бик болашмаҡ, һоғалап ашайҙар. Ике көнлөк себештә һаҡланыу, дошманды үҙенсә ҡурҡытыу сифаты бар. Ояға кергән ҡулдың сит икәнен белеп, ауыҙҙарын асып, телдәрен сығарып ыҫылдай беләләр.

Алда яҙып үткән һунарсы Диас ағайым урман ҡарауылсыһы булып эшләгән осоронда ниндәйҙер бер ғиллә менән ҡайҙандыр бер бөркөт йомортҡаһы алып килеп, баҫып ултырған ҡаҙ аҫтына төндә генә һалған. Һалған да оноткан. Ул турала еңгәгә лә әйтмәгән. Бер көнө эштән ҡайтһалар, ҡаҙ ҡурҡып өйҙә осоп йөрөй икән. Ояһын ҡараһалар, ап-аҡ бөркөт себеше ҡаҙ күкәйҙәре өҫтөндә ыҫылдап ултыра икән. Ҡаҙ ояһына башҡаса кермәгән дә, баҫмаған да. Күрәһең, бөркөт йомортҡаһы иртәрәк баҫылғанға, ҡаҙ бәпкәләренән алда сыҡҡан. Ул бөркөт себешен ағайым аҫрап үҫтерҙе, һунарға өйрәтте. Хәйер, ул турала аҙаҡ яҙырмын.

Егерме - егерме биш көн үтеүгә, бөркөт балаһы көнөнә бер килоға яҡын ит ашай ала. Һәм төрлөһөн дә. Турғайҙы ла, һайыҫҡан, сәүкәне лә, ҡыҙыл һум итте лә.

Бөркөт балалары тиҙ үҫә. Ике айлыҡ сағында ҙур бройлер тауығындай була. Өс айҙа ҡанаттары яралып, оло бөркөт фиғелен, төҫөн ала. Әлбиттә, ҡырҙа, үҙ ояһында үҫкән бөркөт балаһының ғәҙәте лә, алымы ла башҡа була. Ояла үҫеп еткән балаларын инә бөркөт август аҙағында оянан төртөп төшөрөп, осороп ебәрергә тырыша. Әгәр ояла ике себеш булһа, береһе уның сибек, бәләкәй, ябыҡ, көсһөҙ була. Етлегеп етмәгәнлектән, ул, ғәҙәттә, йығылып төшөп үлә, яралана, оса алмай юҡҡа сыға. Әгәр аҙыҡты тигеҙ ашап етлекһәләр, иртәме, һуңмы, икеһе лә осоп китә. Әммә шул хаҡ. Үҫеп еткән балаларын осорор өсөн инә бөркөт балаларын оянан төртөп төшөрөр өсөн күп көс һала. Ниһайәт, береһе китә. Уның артынан ата бөркөт төшә. Инә бөркөт һуңғыһын да ситкә этәрә. Ғәҙәттә, тәүге осоу уңышһыҙ булып, бөркөт себештәре йыраҡ та түгел ергә төшә. Ҡайһы саҡта ерҙәге ташҡа, йығылып ятҡан ағасҡа менеп ҡуналар. Атай менән инәй хәҙер аҙыҡты шул ташта, ағаста ултырған себештәренә бер ике-өс көн ташый. Унан һуң ғына көс-хәл менән эйәртеп осороп алып китәләр.

Эйәртеп осороп алып китеү - үҙе бер ҡыҙыҡ күренеш. Йомран, ҡуян киҫәге йә ҡош ҡапҡан ата йәки инә бөркөт, аҙыҡты ауыҙына ҡапҡан килеш, ситкә ултыра, йә ситтәрәк осоп йөрөй башлай. Бик асыҡҡан себеш бөркөттөң түҙер хәле ҡалмай, ашарға эйәреп осоп китә. Аҙыҡ өсөн көрәш һауала дауам итә. Оло ҡош, йәнәһе, аҙыҡты ауыҙынан бирмәҫ өсөн, ары ла, бире лә кәйелә. Һауаға текә менә, ергә шыҡыя. Ҡыҫҡаһы, ауан себеште төрлөсә осорға алғандан һуң ғына һунар алымдарын өйрәтер өсөн йыраҡ-ҡараҡ, инде дүртәүләп, йә өсәүләп осалар. Ата бала бөркөт үҙ-үҙенә ышанып, икмәк таба алып, ғаилә ҡорорлоғона инанып, өс-дүрт йәшкә тиклем яңғыҙ, үҙаллы йәшәйҙәр. Һунар ерен биләйҙәр, ҡош-ҡортто, йәнлектәрҙе өйрәнәләр, оя ҡорор урын һайлайҙар, төндәрен шул ҡаяла, шул ағаста үткәрәләр. Ләкин оя ҡормайҙар. Өс йәки дүрт йәш тулғас, шул ерҙә йәрәшеп, оя ҡора башлайҙар. Алымдары нәҡ тә аҡыллы егеттәрҙеке кеүек.

Ҡараһыу бөркөттән башҡа тағы ла бер төрлө бөркөт бар. Башы килбәтһеҙерәк, дөйөм фиғеле Уралтау, Урал алды бөркөтө кеүек булһа ла, төҫө менән айырыла. Был бөркөт ерән, һоро тиерлек. Түше, эсе хатта һорғолт, әммә ул тауҙарға осоп китмәй, текәлектәрҙе лә үҙ итмәй. Күберәк ялан яҡта йәшәй. Уҫаллығын, башҡа сифаттарын күҙәтергә тура килмәне. Әммә ҡуянды, ҡаҙҙы һуҡһа ла, селде, күгәрсенде тибә алманы.

Тауҙар араһында һары бөркөт осрамай. Ул кәүҙәһе менән дә башҡаларҙан ҡайтыш күренде.

## Таҙғара

Элек фермаларҙа мал күп булып, үлгән быҙау, башмаҡтар ҙа, тиҙәклектәр ҙә булған осорҙа осрай ине ул ҡош. Таҙғараны халыҡ башы таҙ, ундағы йөндәре ваҡ, ә муйынында яға кеүек оҙон йөндәр уратып алғанға, таҙбаш, таҙғара тип атаған. Төҫө ҡара-көрән. Башында, елкәһендә ҡауырһын юҡ. Күгелйем булып тора. Ҡанаттары киң. Осҡанда ҡанат остарында бармаҡтар торған кеүек. Аҡ таплыларын күргәнем юҡ. Аяҡтары тубығына тиклем яланғас. Ҡамаулаһаң, бигерәк тә ашап ултырғанында яҡын килә башлаһаң, ҡаҙ ыҫылдаған кеүек тауыш биреп, ризаһыҙлығын белдерә. Килгән дошманының үҙенән көслөмө йә ҡайтышмы икәнен тиҙ шәйләй. Бәләкәй эт йәки көсөк янына килһә, емтеген ташлап осоп китмәй.

Уралдың Таганайы менән Көркәк армыты араһындағы таулы-яланлы ерҙә таҙғараның ояһын осратҡаным булманы. Күсмә ҡош.

Таҙғараны һунарға өйрәтеүҙәре тураһында ҡарттайҙар иҫтәлек ҡалдырмаған. Орнитологтар уны далала ағас башында оялай, көрән таплы бер бөркөт кенә йомортҡа һала, тип иҫәпләйҙәр. Шулайҙыр. Бик һирәк ҡош. Минеңсә, ул һарыҡ малын күпләп аҫраған һәм байбаҡтар йәшәгән ерҙә йәшәйҙер, тигән фекерҙәмен. Беҙҙә ул үтмеш ҡош. Таҙғараның ҡойроғо башҡа бөркөттәрҙекенә ҡарғанда ҡыҫҡараҡ, ҡанаттары киңерәк, тупағыраҡ күренә.

## Көсөгән

Көсөгән, булмышы йәшәүгә ҡулайлашыуы менән дала, ялан бөркөтө. Бөркөттәр араһында иң ғәйрәтлеһелер, тигән уйҙамын. Һарыҡҡа, кәзәгә, шул иҫәптән ҡыр кәзәһенә ташлана, өйрәтелгәне бүре лә ала. Ялан ҡошо икәнен шунан беләм: ташланған ҡорбаны шырыҡҡа, таш, ер өңгә, таллыҡҡа кереп күҙҙән юғалһа, башҡаса эҙәрлекләмәй, көтөп тә ултырмай уның сыҡҡанын, ситкә, икенсе табыш эҙләргә оса.

Төҫө ҡара-көрән. Башындағы йөндәре ҡыҫҡа, ҡара бәрхәт кеүек. Аҡ таптары бар, сыбар кеүек. Ҡабырғаһында, ҡанат төптәрендә лә аҡ таптар бар, елкәһе һарғылт буйҡат. Көсөгәндең дә осҡанда ҡанат остары йәйелгән бармаҡтарҙы хәтерләтә. Ҡойроғо оҙон түгел. Ҙур ҡош. Көсөгән ултырған ҡайын ботағының эйелеү миҡдары уға ауырлығы 5,7 килограмлыҡ таш элгәс кенә шул кимәлгә етте. Тимәк, уның ауырлығы 5,5 - 6 кг булған. Был бәхәсһеҙ. Көсөгәндең бик батыр, көслө ҡош булыуын иҫбатлаусы бер ваҡиға булды. Ғүмерем буйы хеҙмәтемдең күп осоро колхоз-совхозда етәксе булып эшләп үтте. Үткән быуаттың һикһәненсе йылдың урталары. Ҡырҙа ятҡан мал-тыуарҙы ҡарап килергә тип, йәйге сандауға киттем. Төш ваҡыты. Сандау янындағы өйҙә һис бер кем юҡ. Әле төшкө ялға килмәгәндәр, буғай. Лагерь - туплаyыу ҙур тау итәгендә. Аҫта йылға, шарлыҡ, ялан-урмандар, сауҡалыҡтар, тағы ла тауҙар. Тыңлап тора торғас, эт өрөүе ишетелде. Күрәһең, ҙур булмаған эт хужаһынан алда өйгә ҡайтып килгәндер. Машиналы кешене өй янында күргәс, өрә-өрә ялан буйлап кире сапты. Шул саҡ өҫтән, ҡаялыҡтар яғынан, ҙур ҡара бөркөт эткә йомолдо. Бер типте этте, эт сайылдап, янтайып ҡалды. Ҡош, ныҡ уҡ күтәрелмәй, сабып барған эткә тағы ла һөжүм итте. Тотто, баҫты этте. Эт сайылдай. Икеһе үлән араһында йомарланып һуғышалар, тик аратирә ҡара ҡоштоң күтәрелгән ҡанат остары ғына күренгеләп ҡала. Оҙаҡ та тормай көтөү күренде. Малдар ҡош менән эт алышҡан ер аша туп-тура туплауға киләләр. Малдар өҫтәренә килеп баҫҡас, ҡош теләр-теләмәҫ, ялҡау ғына ҡанаттарын ҡағып, йыраҡ та түгел ултырған ҡайын ботағына ҡунды. Тик көтөүсенең эте генә тороп беҙҙең янға килмәне. Ул йән биргәйне.

Көсөгәндең ояһы ағас башында булғанын беләм. Йомортҡалары аҡ, икәү генә. Өй ҡаҙын да, йыланды ла еңел ала. Тауышы саңҡылдап йыраҡҡа ишетелә. Һауала бик бейектә осҡанда ла саңҡылдай. Төлкөгә, бүрегә ҡуйылған ҡапҡанға һуғылған осраҡтары ла билгеле. Боттары тырнаҡ бармаҡтарына тиклем йөн менән ҡапланған.

## Ҡарағош

Ул бөркөттәр ғаиләһенең вәкиле. Урманлы, яланлы ерҙе ярата. Бөркөт кеүек оҫта боролоп оса. Күрәһең, уның был һәләте тәбиғәттәндер. Ағас араһы йылғырлыҡты талап итә. Йәнлек эҙләгәндә ерҙән генә оса ала, яландан яланға күсә. Урман араһында кәйелеп, ҡанаттарын ергә текә ҡуйып та оса ала. Кәбән, таш, ағас өҫтөндә ултырып, ҡорбанын оҙаҡ көтә ала. Дөйөм төҫө ҡара-көрән. Уға беҙҙең бөркөттәр оя ҡорорға, һунар итергә бирмәй, ахыры. Һирәк осрай. Күсмә ҡош тип әйтергә була. Аяҡтары йөн менән тубығына тиклем генә ҡапланған. Кәүҙәһе һәм ауырлығы ҡаҙҙай. Күҙҙәре үткер, ғорур. Үҙе ҡара булһа ла, ҡабырғаһында һороҡ ваҡ ҡаурыйҙар бар. Ҡанаттарында аҡ төртөктәр сәсмәһе күренә. Ояһы ҡаяла осрамай кеүек, булғаны һәр саҡ ағас башында. Батыр ҡош. Әммә бөркөт, көсөгән кеүек, көсө етерҙәй, ашауға яраҡлы һәр йәнлеккә йәбешеп бармай. Һарыҡ көтөүҙәре ятҡан ерҙә нисек тә булһа һарыҡ бәрәсен элеп алып китергә тырышмай, ә һуйылған һарыҡтың эс-ҡарынын, йә үлгән һарыҡты көтә. Әммә бәрән саҡ ҡына ситкә китһә, ул уйлап тормай йомола, бәрәстәренән дә баш тартмай.

Бер көтөүсенең һөйләүе буйынса, туплауҙағы өйгә бесәйен алып барғас, өй тирәһендә йөрөгән бесәйҙе тибә. Ҡарағош уны шарылдатып һауаға мендереп алып китә. Боролмалы, һығылмалы бесәй һауала бөгәрләнеп килеп, ҡарағоштоң йә ботон, йә аяғын тешләп ала, күрәһең, ул уны ысҡындырып ебәрә. Ҡарағош осоп төшөп барған бесәйҙе ергә тиклем шыҡыйып оҙатып килә. Ләкин алмай, ағас башында көнө буйы ултыра, күрәһең, яраһы һыҙлағандыр. Тик көн кискә ауышҡас ҡына табышын алып китә. Тауышы бөркөттөкө кеүек түгел, "ҡъяҡ-ҡъяҡ-ҡъяҡ" тип йә саҡыра, йә үҙенең ҡайҙа икәнен белдерә. Табыш тапһа, һис тауыш сығармай. Йомортҡаһы тауыҡтыҡынан ҙур, ҡаҙҙыҡындай, әммә оҙонса түгел, беленер-беленмәҫ көрән таптары бар, аҡ. Ҡорбанын һағалап, ағас, кәбән башында оҙаҡ ултыра.

Башҡорт халҡының ҡаҙаҡтар, ҡырғыҙҙар, ҡайһы бер башҡа халыҡтарҙағы кеүек, шөғөл өсөн дә, зауыҡ өсөн дә йыртҡыс ҡоштарҙы өйрәтеп көн итеүҙәре билдәле. Ҡош өйрәткәндәге һәм ҡулланғандағы барлыҡ әйберҙәр үҙ исемдәре, башҡортса исемдәре менән беҙгә килеп еткән. Әммә һунар ҡоштарын өйрәтеү һәм уның ысулдары тураһында яҙып алынған фольклор материалдарын да, әҙәби әҫәр ҙә осратҡаным булманы. Шуға ла киләсәк быуын өсөн, тарихсы, әҙәбиәтсе, фольклорсылар өсөн яҙыла был яҙмаларым. Ҡош өйрәтеү, ҡош тотоу, уны ҡулланыу ваҡиғалары йырҙарҙа ла сағылыш тапҡан. Йырҙарҙа сөйөр ҡоштоң кешеләр менән аралашып йәшәүе, уға хеҙмәт итеүе генә күренмәй, ә ҡайһы береһенең физик һәм тәбиғи үҙенсәлеге лә сағыла. Башҡорт халҡының был йырҙарында һандуғас, кәкүк һәм башҡа ҡоштарҙан тыш, һунар ҡоштары бик нескә тойғолар менән бәйләнә, унда ҡоштоң сифаты, тәбиғәте тасуир ителә.

*Урал тауҙан Яйыҡ күренә микән,*
*Ҡара ташҡа (Килен ташҡа)*
*менеп ҡараһам.*
*Үткән ғүмерҙәрем ҡайтыр микән,*
*Һағышымды һалып йырлаһам.*
*Шаңҡылдайҙыр шоңҡар, ай, балаһы*
*Уй ҡаяһы ташы ҡатында.*
*Баулы шоңҡар кеүек талпынамын*
*Тыуған илгә осоп ҡайтырға.*
*Ҡарсыға ла сөйҙөм, эй, үрҙәккә.*
*Тибә алмай төштө үҙәккә.*
*Ултыра ла торғас бер йырланым,*
*Түҙә алмай янған йөрәккә.*
*Һауаларҙа осҡан, эй, яғылбай*
*Ҡыйғас-ҡыйғас оса ем тапмай.*
*Сит ерҙәрҙә йөрөй ир-арыҫлан,*
*Ҡайтыр өсөн иленә юл тапмай.*
*Киҫеп тә генә алып ит ашаттым*
*Тағараҡҡа ҡунған бөркөткә.*
*Төхмәт кантон эше палатала.*
*Башы китһә икән Иркутҡа.*
*Күк ыласын-ҡоштоң, ай, балаһы*
*Талпына-талпына ғына бауҙа үлә.*
*Ирмен тигән генә ир-егеттәр*
*Шаһит ҡына булып яуҙа үлә.*
*Саңҡ-саңҡ итә ыласын,*
*ай, үткер ҡош,*
*Ҡунып Ирәндектең ташына.*
*Ыласынҡай кеүек оран һалып*
*Тора батыр яуҙың башында.*
*Ыласынҡай тигән үткер ҡошто*
*Аҫырайым буйға еткәнсе.*
*Дуҫ-ишемдән минең дошманым күп,*
*Сер бирмәйем үлеп киткәнсе.*
*Саңҡып та саңҡып, эй, ҡысҡыра,*
*Төлкө алмаһа сарға бөркөтөм.*
*Сапсып та сапсып ярһып тора*
*Бүре һуғыр ҡола юрғағым.*
*Аҡ ҡарсыға менән күк ҡарсыға*
*Ҡайылып оса тауҙы итәкләп.*
*Ризыҡ ҡына ҡайҙа, бәндә шунда.*
*Ризыҡ- нәфсе йөрөтә етәкләп.*

**(Дауамы бар).**

✓ *Бер көйҙө тамамлауға ятаҡтың аҫҡы ҡатындағы тәҙрә төбөндә ултырған ике егет беҙҙе ҡул сабып сәләмләй. Йүгереп менделәр. Йөрәктәре түҙмәне. Улар Әбйәлил районынан Сабирйән Солтанов менән Радик Өмөтҡужин булып сыҡты.*



ЙӨРӘК ҺҮҘЕ

**Йөрәгә ҡушыуы буйынса ижадсы, шағир, драматург, журналист, һөнәре буйынса уҡытыусы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Радик Исмәғил улы Өмөтҡужин менән танышыуыма 40 йыл ваҡыт үтеп тә киткән. Дуҫымдың 60 йәше тулыр алдынан бергә үткән йылдарҙы иҫкә төшөрөп, ваҡиғаларҙың иң ҡыҙыҡтарын барлап ултырҙым әле. Шуларҙың бер нисәүһен бәйән итергә йөрьәт ҡылдым.**

# ИСМӘҒЗӘМ ДУҪЫМ



## Мәҡәл беҙгә ҡағылмай…

"Ике дуҫтың береһе ҡол була" тигән мәҡәл-әйтем беҙгә ҡағылмай. Сөнки беҙ бер-беребеҙҙең атайҙарыбыҙҙы яҡшы беләбеҙ һәм улар ҙа дуҫын ҡол итә торған кешеләр түгел. Бер мәл атайҙарыбыҙҙы ла таныштырырға, дуҫлаштырырға уйлағайныҡ, өлгөрмәнек. Минең атай ысын донъяһындағы төп йортона ҡайтып китте. Ә улар, Радик менән минең кеүек үк, бик яҡшы дуҫтар булырҙар ине. Исмәғил ағай менән осрашһаҡ, һөйләшеп һүҙҙәребеҙ бөтмәй. Тарихты яҡшы белгән, бик матур итеп Ҡыҙыл һөйләшендә һүҙ атҡарған, үҙенсәлекле һәм бай тәбиғәтле дуҫымдың атаһы. Әсәһе Ғәлимә апай нурлы, яғымлы йән эйәһе, минә лә үҙ балаһына ҡараған һымаҡ ҡарай. Радик атаһының да, әсәһенең дә иң күркәм сифаттарын үҙ иткән.

Бер-беребеҙгә ҡол булмауыбыҙҙың икенсе аңлатмаһы: беҙ бер ниндәй сәбәп буйынса ла бер-беребеҙгә үпкә һаҡламайбыҙ, икәү-ара мөнәсәбәттә килеп тыуған проблемаларҙа ғәйепләне эҙләмәйбеҙ. Тағы ла шуныһы: беҙ бындай мөнәсәбәт хаҡында икәү-ара килешеп һөйләшкәнебеҙ ҙә, шарт ҡуйышҡаныбыҙ ҙа булманы. Былар барыһы ла аң төбөндәге өнһөҙ серләшеү кимәлендә. Беҙ хатта икәү-ара проблемалы хәлдәр була ҡалған осраҡта ла быны өсөн бер-беребеҙҙе алдан уҡ ғәфү итеп ҡуйғанбыҙ. Аванс менән! Бына шундай дуҫым ул Радик Өмөтҡужин.

Беҙ дуҫлашҡан саҡтағы Советтар Союзы тарҡалып юҡҡа сыҡты, социалистик идеология, коммунизм төҙөүсенең әхлаҡи кодексы емерелде, марксизм-ленинизм тәғлимәте йәшәүҙән туҡтаны, "Кеше кешегә дуҫ һәм иптәш" тигән лозунгтар онотолдо, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы йәшәүҙән туҡтаны, быуат ҡына түгел, меңйыллыҡ алмашынды - ә беҙ һаман дуҫ булып ҡалдыҡ!

## Йәш һалдат мәктәбе

Башҡорт дәүләт педагогия институтына уҡырға инергә һынау тотабыҙ. Ятаҡтын, Баймаҡ районының Ишбирҙе ауылынан Миңләғәле Хәсәнов менән (хәҙерге ваҡытта Стәрлетамаҡ филармонияһында ҡурайсы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы) ятаҡ бүлмәһенең тәҙрәһен асып ебәреп, тәҙрә төбөнә ултырып ҡурай тартабыҙ. Бер көйҙө тамамлауға ятаҡтың аҫҡы ҡатындағы тәҙрә төбөндә ултырған ике егет беҙҙе ҡул сабып сәләмләй. Икеһе лә телняшкала. Йүгереп менделәр. Йөрәктәре түҙмәне. Улар Әбйәлил районынан, беҙҙең кеүек үк "абитурҙар" Сабирйән Солтанов менән Радик Өмөтҡужин булып сыҡты.

Был хәл 1980 йылдың июль айында булды. Радик менән ана шулай танышып киттек. Аҙаҡ икебеҙ бер төркөмгә эләктек. 1-се курстың икенсе яртыһынан, Аксаков урамындағы данлыҡлы 6-сы ятаҡҡа күскәс, бер бүлмәлә йәшәй башланыҡ. Тағы ла бер йылдан ике кешелек бүлмәлә бергә торҙоҡ.

Радиктың институтҡа тиклем әрме сафында хеҙмәт итеүе, был йәһәттән байтаҡ ҡына тәжрибә туплауы минең өсөн файҙаға ғына булды. Монголияла хеҙмәт иткән ул. Түгерек менән мөнгөнөң нимә икәнен яҡшы белә. Дөрөҫөн әйткәндә, йәш һалдат мәктәбен мин уның менән уттем тиһәм дә була. Институтты тамамлап, үҙем дә әрме сафына алынғас, Радикҡа ҡарап күп нәмәгә өйрәнеүем файҙаға ғына булды. Бик бөхтә ул, һәр ваҡыт өҫ-башы таҙа, йыуылған, үтекләнгән, карауаты һалдаттар сафы һымаҡ ипкә килтерелгән, һ.б. Ә мин иһә кисә генә ауылдан килгәнлектән, был гәмәлдәрҙе әсәйем, апайҙарым башҡарғанлыҡтан, үҙаллылыҡтың тәүге һабаҡтарын Радиктан алдым. Сер итеп кенә әйтәм: тәмәке тартырға ла Радик өйрәтте.

## Сублимация

Радиктың күҙгә күренмәгән магниты бар. Төркөмдәштәребеҙҙең барыһы ла уға тартылып ҡына торҙо. Егеттәр дуҫлашырға, ҡыҙҙар серләшергә ынтылды. Урыҫсаға грамотаһы шәп. Почергы матур. Курсыбыҙҙағы өс урыҫ, ике башҡорт төркөмө араһында бер үк текстка диктант яҙғанда ла иң яҡшыһы уныҡы була торғайны.

Атаһы менән әсәһенең берҙән-бер балаһы булғас (әммә иркә түгел), уға өйҙән ай һайын тиерлек аҡса ебәрәләр ине. Мин иһә 11 балалы ғаиләнән булғас, был йәһәттән - таҡы-тоҡо. Аҡса килгән көн кәйефебеҙ күтәренке. Етмәһә, Радик сумарт. Башҡорт дәүләт университетында уҡыған дуҫтарыбыҙға ла барып урайбыҙ. Ҡайһы ваҡыт Рәйес Түләк, Ғәбиҙулла Зарипов, Рәмил Ҡолдәүләт, Марсель Искәндәр үҙҙәре беҙгә килә. Пединституттың тарих факультетында уҡыған Ибраһим Фәйзуллин да беҙгә йөрөй торғас, төркөмдәш ҡыҙыбыҙға өйләнеп ҡуйҙы.

Радик ауыр булып тойолған хәлдәрҙән еңел генә сыға ала торғайны. Бер мәл кеҫәлә бер тин дә аҡса ҡалмаған саҡта икәүләп Өфө урамын ҡыҙырабыҙ. Кәйефте күтәреү сараһын ул еңел эҙләп тапты. Бер мәл ул мине ҡиммәтле тиренән тегелгән тундар һатылған магазинға әйҙүкләне. Инде лә, төрлө фасонда тегелгән меңәрмеңәр һумлыҡтарын кейеп ҡарай башланы. Бер тунды өҫтөнә элэктерә лә, көҙгә янына килә. Һатыусылар уға төрлө кәнәштәрен биреп, әленән-әле яңыларын, ҡиммәтерәктәрен тәҡдим итеп кенә тора. Ул минән кәнәш һораған була, йәнәһе, килешәме, алайыммы, тигәнерәк ишара ташлай. Мин уның уйынын төшөнөп алдым да, тунға ҡарата ниндәйҙер дәғүә белдерәм. Икәүләп кейемдең етешһеҙлеген табабыҙ ҙа, икенсеһенә үреләбеҙ. Дуҫымдың ҡылығы минә лә оҡшай төштө, мин дә бер ике тунды ябынып ҡараным. Сублимация ысулы килеп сыҡты. Магазиндан шат йылмайып сыҡтыҡ. Һөҙөмтәлә Радик институтты тамамлағандан һуң өҫтәмә рәүештә психологка уҡып сығып, диплом алып, мәктәптә психолог булып та эшләп йөрөнө...

## Саҡырылмаған ҡунаҡтар

Сублимация уҡ булмаһа ла, тағы бер ваҡиға. Студент саҡта асығырға ла тура килә. Студент булғандар был хәлде яҡшы беләләр. Бер мәл кеҫәлә бер тин дә аҡса ҡалмаған саҡта Ауыл хужалығы институты (хәҙерге Аграр университет) туҡталышында баҫып торабыҙ. Трамвайлыҡ та тинһеҙбеҙ. Әйткәндәй, был һүҙбәйләнеш Буранбай Искужиндыҡы. "Карт-корога ярҙам итеп йөрөп, трамвайлыҡ та тинһеҙ ҡалғандар..." - ти ул бер шиғырында.

Ярай, ситкә киттем, шулай итеп туҡталышта баҫып торабыҙ. Уның ҡарауы, "Галле" ресторанында гөрләп түй барғаны ишетелә. Эстә гармун, йыр тауыштары яңғырай, беҙҙең эстә ас бүреләр олой. Шул саҡ ҡапыл ресторандың ишеге асылып китмәһенме лә, унан йөҙләгән кешеләр эркелеп килеп сығып, гармунға бейей-бейей беҙҙе уратып алмаһынмы. Беҙ ҙә улар ыңғайына башҡортса тыпырҙай башланыҡ. Тыпырҙамаҫ инек, тик торһаң, төркөм беҙҙе тапап үтәсәк. Радикҡа ҡарайым. Ул минә күҙ генә ҡыҫты. Мин аңлайым уның был хәләтен, тимәк, түйға ҡушылабыҙ. Төркөм ресторан алдында биш минут самаһы тыпырҙағандан һуң, нисек килеп сыҡҡан булһа, шул уҡ тиҙлектә кире һерлекте. Тулҡын беҙҙе лә эскә упты. Шулай итеп, беҙ ҙә түйға ҡушылып киттек. Түйҙың шундай ҡануны бар бит инде: ҡыҙ менән егет туғандары бер-береһен "ҡоҙалар" тип атай. Беҙгә лә түйҙа ҡатнашыусыларҙың барыһы ла, ике яҡ та, "ҡоҙалар" тип өндәште.

## Грузинса һөйләште

1983 йылдың йәйе. Беҙҙең факультеттың башҡорт булеге базаһында ойошторолған "Айгөл" студент төҙөлөш отряды сафында Шишмә ҡасабаһындағы йорт төҙөлөшөндә эшләп, электричкала баш ҡалаға ҡайтып киләбеҙ. Поезға ултырыр алдынан ҡумәгебеҙгә ҙур ғына ҡарбуз һатып алғанбыҙ. Беҙҙең вагонда грузиндар ултырған. Улар вагонда ла, тамбурға тәмәке тартырға сыҡҡанда ла үҙҙәренең теленлә ҡысҡырып һөйләшә. Нисектер, улар беҙгә үҙ-ара әрләшкән һымаҡ тойола. Бындай саҡта утты-һыуҙы кискән, әрме сафында булған Радик ситуацияны үҙ ҡулына алды. Ул да грузиндар һымаҡ уҡ ҡысҡырып, ҡулындағы бысағы менән ҡарбузды телә-телә, уларға оҡшатып, Кавказ халыҡтары акцентында әллә ниндәй "сантиметр" тигәнерәк һүҙҙәрҙе ҡушып, ләпелдәй башланы. Уға дуҫыбыҙ Баязит Ғиниәтов ҡушылды. Ул Радиктан да арттырыбыраҡ ебәрә. Эй, килештерәләр үҙҙәре. Уның ҡарауы, грузиндар шымып ҡалды. Улар беҙгә шикләнеп ҡараны ла, бер аҙҙан әйберҙәрен алып, күрше вагонға тайҙы. Эх, үҙҙәренән һорашырға ине: нимә тип уйланылар икән беҙҙең турала. Беҙҙең телгә оҡшатып, ниндәй телдә аралашалар былар, тинеләрме икән. Хәҙер ҡарбуз телгән һайын ошо ваҡиға иҫкә төшә.

## Яңы тормош башлайбыҙ!

"Яңы тормош башлайбыҙ!" тигән ынтылыш бер ваҡытта ла беҙҙе ташлап китмәне. Бигерәк тә ял көндәрендә иртәнсәк уянабыҙ ҙа, бүлмәбеҙҙе йыйыштырырға, өҫ кейемдәребеҙҙе йыуырға тотона торғайныҡ. Икенсенән, иртә таңдан тороп тышҡа сығып йүгереү ҙә, университеттың бокс секцияһына йөрөү ҙә, Крупская (хәҙерге Әхмәтзәки Вәлиди) исемендәге китапханаға дәрес әҙерләргә барыу ҙа, насар ғәҙәттәрҙән арыныу ҙа - былар барыһы ла беҙҙен ошо ынтылышҡа инде. Яңы тормош башлауға ынтылыш беҙҙе "Киске Өфө" гәзитендә бергә эшләгән саҡта ла ташлап китмәне. Бер нисә көн һуҙымында асығыу ҙа беҙҙең ошо программа нигеҙендә килеп сыҡты. Бер нисә тапҡыр эсеүҙе ташлап, яңынан башлап, ары һуғылып, бире һуғылып йөрөй торғас, студент саҡтағы ниәтебеҙ тормошҡа ашты. Хоҙайға шөкөр, хәҙер икебеҙ ҙә айыҡ тормош алып барабыҙ. Әлбиттә, был аҙым беҙгә еңел генә бирелмәне. Минең эсеүҙе ташлауым хаҡындағы яҙмаларым "Киске Өфө" лә баҫылғас, иң тәүҙә Радик дуҫым мине күтәреп алды. Уның "Дуҫым атын минә туғарҙы" тигән яҙмалары "Исмәғзәм" тахаллусы аҫтында донъя күрҙе. Әйткәндәй, Исмәғзәм уның йүргәк исеме.

## Ул барыбер шағир

Радик бер ваҡытта ла шағир, яҙыусы буларға ынтылманы. Шул уҡ ваҡытта әҙәби ижадтан да ситтә йөрөмәне. Минә ҡалһа, ул яҙмайынса булдыра алмағаны өсөн яҙһы һәм яҙа. Әгәр ҙә ынтылышы булһа, күптән әллә нисә китап сығарып, Яҙыусылар союзына ағза булып инеп, әллә ниндәй исемдәргә лә лайыҡ булыр ине. Икебеҙ ятаҡтың бер бүлмәһендә йәшәгән саҡта күңелле булып алабыҙ ҙа, бүлмәнең икешәр мөйөшөн бүлешеп алып, шиғыр ижад итәбеҙ. Сыймаҡлаған юлдарыбыҙҙы бер беребеҙгә уҡып, яҙғандарыбыҙҙы "классик" шедеврҙарға тиңләп, бер-беребеҙҙе маҡташабыҙ. Әммә дуҫыбыҙ Ҡолдәүләт әйтмешләй:

Алданыуҙар алдан йөрөй икән,
Айныҡыуҙар килә һуңынан.

Иртәгәһенә яҙғандарыбыҙҙы уҡып сығып, йәнә аптырайбыҙ. Баҡтиһән, уларҙың бер ниндәй ҙә мәғәнәһе юҡ икән дә. Әммә шундай һаташыулы маташыуҙар ваҡытында Радик дуҫым көтөлмәгән мөхәббәт шиғыры яҙып мине һеңгәҙәтте. Аҙағы шулай тамамлана ине:

Күҙҙәреңә йондоҙ ҡолап төшкән,
Иртән унда Ҡояш уяныр...

Күпмелер ваҡыттан һуң тағы ла көтөлмәгән ошо шиғыр:

Ҡышҡа ҡыйын китеү был донъянан,
Күҙҙәреңән көмөш йәш тама.
Урам буйлап шул саҡ уйнап йөрөй
Яңы тыуған Яҙкәй - йәш бала.
Тормош шулай дауам итә инде,
Ерҙә бөгөн ярһыу яҙ айы.
Кемдер бераү түгә һуңғы йәшен,
Кемдер тыуа шул саҡ йылмайып.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**Редакциянан: Беҙ ҙә Әхмәр Үтәбайҙың Радик Өмөтҡужин тураһында яҙғандарын, ҡылыҡһырлағанын мисәт һуғып раҫлайбыҙ: шәп әҙип, журналист йәшәп ята Әбйәлил районының Хәлил ауылында, мәктәптә балалар уҡыта. Уның "Киске Өфө"лә эшләгән йылдарын беҙ ҙә һағынып иҫкә алабыҙ: ниндәй темаға тотонһа ла, аҫыл фекер, алтын аҡылға ҡора ине мәҡәләләрен. Уның һымаҡ журналистар, дөрөҫөн әйткәндә, бармаҡ менән һанарлыҡ хәҙер. Әле лә унан һирәкләп кенә килгән яҙмаларҙы көтөп алып, тәмләп кенә уҡытабыҙ уҡыусыларыбыҙға. Күберәк "Исмәғзәм Исмәғилев" тигән псевдоним менән баҫыла ул беҙҙең гәзиттә. Юбилейы менән ҡотлайбыҙ коллегабыҙҙы, ижад ҡомары ташламаһын, мәктәп эштәренән бушаған арала беҙҙең уҡыусыларҙы үҙенең яҙмалары менән ҡыуандырып торһон, тигән теләктәребеҙҙе юллайбыҙ.**

**"Киске Өфө"ләр.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТИҘ АРЫЙҺЫҢМЫ?

■ Организмға йод етешмәү арыуҙың сәбәбе була ала. Ғәҙәттә, яҙ һәм йәй миҙгелдәрендә энергия дефициты булырға тейеш түгел һымаҡ, шулай ҙа ындай күңелһеҙлек килеп тыуған икән, туҡланыу режимына иғтибар итегеҙ, ти белгестәр. Әгәр ҙә тиҙ арыйһығыҙ, һалҡын тейеп бара, сәстәрегеҙ ҡойола, тирегеҙ кибә икән, етмәһә, хәтер насарайып, ишетеү һәләте түбәнәйһә, йөрәк тибеше боҙолһа, организмға йод етешмәүе ихтимал. Йод дингеҙ кәбеҫтәһендә, балыҡ һәм диңгеҙ ризыҡтарында күп. Йодлы тоҙҙо ла ҡулланырға була, әммә тоҙҙо оҙаҡ һаҡлаһаң, йодтың күпселек өлөшө юҡҡа сыға, сөнки йод - осоусан берләшмә.

■ Кеше нимә ашай, шул уның тиреһендә асыҡ сағыла, тиҙәр. Ниндәйҙер микроэлемент етмәһә, матдәләр алышыныу процесы шунда уҡ боҙола башлай. Шулай итеп, тирене йәш һаҡлау өсөн ниндәй витаминдар кәрәк һуң? С витамины коллаген епсәләре барлыҡҡа килеүендә ҡатнаша. С витамины етерлек булғанда, тире күгәреп бармай, күҙәнәктәр ҙә әүҙемерәк яңыра. Был витамин аҙыҡ-түлек менән етерлек ҡулланылырға тейеш, ул йәшелсә, емеш-еләктә, мәсәлән, ҡара ҡарағатта, цитрус емештәрендә, паприкала, шпинатта, кивила, сельдерейҙа күп. Е витамины тирене ультрафиолеттың насар эҙемтәләренән һаҡлай. Ул балыҡтың майлы сорттарында, йомортҡала, үсемлек майҙарында, сәтләүектәрҙә бар. А витамины етешмәһә, тире кибә башлай. Тырнаҡтарҙың, сәстәрҙең сәләмәтлеге лә А витамины менән бәйле. А витамины сығанаҡтары - аҡ май, ҡабаҡ, эремсек, һыйыр бауыры.

■ Корнелл университеты (АҠШ) ғалимдары раҫлауынса, дисгевзия - тәм тойоусанлыҡ боҙолоуы һөҙәмтәһендә кеше ашарға ярамаған нәмәләр ашап, организмына ҙур зыян килтерә. Ғалимдар 158 ауырлы ҡатын-ҡыҙҙан торған төркөмдә тикшеренеүҙәр үткәргән. Ындай тайпылыш уларҙың 47 процентында күҙәтелгән һәм улар йышыраҡ боҙ, крахмал, порошок, һабын, ҡағыҙ, пенопласт, аш содаһы ашаған. Тәм тойоусанлыҡ боҙолоуы, тәү сиратта, организмға тимер етешмәгәндә барлыҡҡа килә. Һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың тәм тойоусанлығы боҙолоуы менән бергә гемоглобин кимәле түбәнәйеүе асыҡланған. Шуға ла ындай ҡатындар хәүеф төркөмөнә ҡарай, улар араһында ауырлығы нормаға тулмаған балалар табыусылар күберәк. Ашарға ярамаған нәмәне ашарға теләү тойғоһо тимер дефициты менән бергә ҙурая. Анемия мейегә йоғонто яһай һәм кеше ғәҙәттән тыш ашарға ярамаған әйбергә ынтыла башлай, әммә бынан гемоглобин кимәле күтәрелмәй. Ғалимдар иҫәпләүенсә, табиптар дисгевзияға тейешенсә иғтибар бүлергә тейеш, юғиһә, уның сәләмәтлеккә насар йоғонтоһо ҙур.

■ Бөтөн донъя яман шеш тикшеренеүҙәре фонды белгестәре фекеренсә, йәйәү йөрөү яман шеш сирҙәрен булдырмау өсөн дә файҙалы. Көн һайын 45 минут физик әүҙемлек тә күптәрҙе был сирҙән ҡотҡара алыр ине, тип иҫәпләй табиптар. Медицина статистикаһы күрһәтеүенсә, даими әүҙемлек онкологик сирҙәрҙе булдырмауҙа мөһим урынды биләй. Физик әүҙемлек матдәләр алышыныу һәм организмдың таҙарыныу процесын көсәйтә. Яман шештән күп төрҙәре менән тап физик күнекмәләр ярҙамында көрәшергә була, тип белдерә ғалимдар.

ХӘТЕРКИТАП

**Әсмә Мәүлембирҙе ҡыҙы Усманова Хәйбулла яҡтарының илһөйәре, тере тарихсыһы, хикәйәтсеһе ине. Уҡытыусы булараҡ, ул бар белгәнен түкмәй-сәсмәй тыңлаусыға, өйрәнеүсегә, ғалимға еткерергә ашыҡты. Уның менән ҡорған әңгәмәнең һәр бөгәлө - тотош бер дәүер, хеҙмәт, кеше яҙмышы һәм тарих. Уның менән теләһә ниндәй темаға һөйләшеп була, әммә һүҙ халыҡ ижады, халыҡ тамырҙары, бөгөнгөһө һәм киләсәге юҫығына бороласаҡ. Кемгәләр ул үҙ белгәнен һөйләп туймай, кемделәр бирелеп тыңлай... Уҡытыусы, эҙәрмән, ижадсы ҡото бар ине уның булмышында. Әсмә апай менән бик күп тапҡырҙар әңгәмә ҡороу бәхете тейҙе миңә. "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына шул әңгәмәләремдән бер нисәһен тәҡдим итәм.**



# ҺИГЕҘ ОХМАЖ АСҠЫСЫ

## Беренсе әңгәмә

*Тамъянымдың еләнендә*
*һигеҙ ожмах асҡысы,*
*Шул ожмахтарға менергә*
*Булһа ине баҫҡысы.*

"Мин атай-әсәйемдең күмәк - ун бер балалы ғаиләһендә иң оло бала булдым, иртә ҡул араһына индем, - тип һөйләп китә Әсмә апай. - Бына беренсе класҡа уҡырға төштөк. Ул саҡта модаға ингән кишмер (кашемир) яулыҡ бөтәбеҙҙә лә тиерлек бар, заманында иң матур кейем. Уҡытыусыбыҙ яулыкты дәресҡә ябынып ултыртмай, тыя. Арҡабыҙға ғына һалып ултырырға ярайлы, тип һорай батырыраҡ ҡыҙҙар. Ярай, тип рөхсәт итә. Бөтәбеҙҙең дә яулыктар бер ишерәк булғас, буталып-алмашынып ҡуймаһын өсөн: "Әсәй, яулығыма тамға ҡуйып бирсәле", - тинем. Әсәйем яулыҡ ситенә бер билдә сигеп ҡуйҙы. Ҡыя сигеп эшләнгән билдә. "Был - ҡыя сигеү", - тине. Йәшлектә беҙгә эш етерлек булды. Колхоз эшенә йөрөйбөҙ. Кәшәуәрҙәр аш өлгөрткәнсе, ял ваҡытында ҡыҙҙар ҡулъяулыҡ сигә. Эре ҡыя сигеү исулы менән сигәләр. Кемдер ял мәлендә уйнай ҙа шаяра, ә мин ҡул эше тотҡан апайҙарға текләп ҡарап, отоп ҡалырға тырышам. Ул ваҡытта, өйрәнәм, тиғәнмендер инде, халыҡҡа ҡайтарам, тимәгәнмендер. Шуға әсәйем әйткән була торғайны: "Әсмәне мин бер нимәгә лә өйрәтмәнем, Әсмә үҙе өйрәнде", - тиғән булыр ине. Әсәйем үҙе лә бик оҫта булды. Һуғыш ваҡытында ҡыҙҙарҙы "английский вязка" менән шарф бәйләп өйрәтә торғайны. Теген машинаһы булманы, ҡул менән һырып тегә ине. "Майғулланып, бесәлләнеп текмәгеҙ, ныҡ итеп тегегеҙ", - тип беҙ теккән нимәне яратмай, кире һүттереп, үҙенсә эшләтер ине. Ҡораманы ҡул менән ҡората торғайны. Тун да текте, кейем дә.

...Ә бейемемдең "Зингер" машинаһы булды. Ул кешегә кейем теккән, ошо һөнәре арҡаһында етеш кенә йәшәгән улар. Бәлки, бейем дә аҡыл биргәндер, бәлки, мине лә һөнәрле итергә тырышҡандыр, өйләнешкәс, ирем миңә лә теген машинаһы алып бирҙе. Машинала тегә белмәй инем, ирем үҙе тегеп өйрәтте. Шулай аңлы, белдекле булды ул..."

*Бөйөк Ватан һуғышы йылдары. Ялан-ғаслыҡ, аслыҡ, етемлек илде ҡороштора. Ун йәшлек Әсмәгә әсәһе үҙенең еләндәрен һүтергә ҡуша... Боронғо затлы еләндәрҙе һүтергә өлкәндәрҙең ҡулы бармай, ә бала кеше тыңламай нишләһен.*

"...Әсәйемдең ике еләне булды. Боронғо тамъян еләне менән үҫәргән еләне. Икенсе класта ғына уҡый инем әсәйем миңә ошо эште ҡушҡанда. Бик матур, мөһөр баҫып сигелгән боронғо еләндәрҙең тауары күмәк баланың өҫ-башын йүнәтергә, кейем тегергә кәрәк булғандыр инде. Ике ҡәрсәйем нишләргә белмәй уфтанышып, доға ҡылып, аптырашып ултырҙылар, тик әсәйемдең ҡарарына ҡаршы бер ни ҙә эшләй алманылар. Минең дә уларҙы һүткем килмәне. Шул хәтлем ҡыйын булды миңә был эште башҡарыуы. Инде шул ирекһеҙҙән ҡылған гәйебемде ҡаплар өсөнмө, мин ғүмер буйы елән тегеү хаҡында уйланым, халыҡты, йәштәрҙе еләнле итеү тураһында хыялландым..."

*Ике ҡәрсәһе ике яғында доға уҡып, Алланан ғәфү үтенә, йөрәге һыҙлап ҡына ҡыҙ бала үҙенең ырыу еләндәрен һүтә. Ошо мәлдә уның алдына тағы ла олораҡ бурыс ҡуйылғандай була - ҡасан да булһа был еләндәрҙе янынан тегергә, халыҡҡа ҡайтарырға... Донъялағы - донъялыҡта бит.*

## Икенсе әңгәмә

*"...Башҡорттарҙың ошоғаса һаҡлап алып ҡалған берҙән-бер нәмәһе - үҙҙәренең биҙәктәре. Шулай итеп, арыу-талыу белмәгән егәрле башҡорт ҡатыны - үҙ халҡының сәнғәтен һәм гүзәллеген һаҡлаусы ул."*
*М.А.Круковский,*
*рус этнографы, XX быуат башы.*

"...Беҙҙең Хәйбулла яғы халҡы электән етешһеҙерәк көн күргән, сей тырышлыҡ менән көн иткән. Бар байлығы - мал, ул булмаһа, эш харап. Минең атайым, аяғы ауырғас, тегенсе булды. Бик матур итеп итек-ситектәр, тун-толоптар текте. Уның ваҡ эшкә ҡамалып, тирейөнгә сумып, энә-беҙгә сәнселеп, өйҙә ултырыуын күреп, йәлләп, әсәйем: "Карт яткау өйҙән сыкмай", - тип шаярткан була торғайны. Шунан үҙе тағы: "Яҡкаулыҡ тәгәрәй-тәгәрәй ҡаса һинән - бынау хәтле итеп кем ситек тегә был тирәлә, шуны семерләп сигеп ултыра бит әле", - тип ыңғайына һыйпап, яратып, маҡтап ҡуйған булыр ине. "Шәп мин, зерә шәп - сабата ла үрә беләм әле мин", - тип атай беҙҙе көлдөрә торғайны, үҙе иҫәп-хисапҡа шәп булды, бухгалтер булып та эшләне. Уны атаһы, мулла итәм, тип, мәҙрәсәлә уҡытҡан булған. Заманалар үҙгәргәс ни, был уйы уйылып итып ҡалған. Шулай ҙа атайым алдынғы ҡарашлы булды, балаларын уҡытам, тип атлығып торҙо..."

"Әбйәлил яғынан килгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың биҙәүестәре шау көмөш тә көмбәҙ була торғайны. Бер саҡ атайымдан һорайым: "Нишләп беҙҙең яҡта юҡ һуң шул тәңкәләр?" "Әбйәлил электән Урал эсендә, Магнит заводтарына яҡын, көмөш сыҡҡан ерҙә йәшәй, шуға ундағы халыҡ алтын-көмөштә таный ҙа, таба ла, таға ла", - ти торғайны атайым.

Баймаҡ менән Әбйәлил - базарлы ер, тимәк, аҡсалы халыҡ. Май-ҡоротон апарып һатһа ла ҡулына аҡса инә, ә беҙҙең яҡ - сит яҡ, юл да юҡ, эш тә юҡ, аш та юҡ - сиҙәм үҙләштереү башланғансы шулай булды..."

"Әсәйемдең еләндәрен боҙған мәлдә күңел төбөндә юшҡын ҡалды. Ғүмерлек әрнеү менән хыял ҡалды. 1957 йылда миңә Ленинградҡа һәм Мәскәүгә барырға тура килде. Әле Өфөнө лә күрмәгәнмен, был яҡта бер ҡалаға аяҡ баҫмағанмын, әммә Ленинградҡа юл төштө. Барыуын-барғас, бер нимәгә ҡарамай, Эрмитажды күреп ҡайтырға тейеш инем. Шул Эрмитаж мине яңынан тыуҙырҙы, тиергә була. Тәнем эҫеле-һыуыҡлы булып, һәр экспонатты ҡараным. Һәр бер төймә, һәр бер нәмә һаҡланған! Петр Беренсенең әллә нисә кафтаны ята - тегелеп бөтмәгәндәре лә бар... Ә беҙ нишләп әсәйемдең бер нәмәһен дә һаҡламаныҡ икән, тип, ҡара гәжәпкә төшөп аптырап ҡайттым үҙебеҙҙең маңҡортлоҡҡа. Йәш булһам да шуны аңлағанмын бит әле, байғош..."

## Өсөнсө әңгәмә

*Тарих көҙгөһө - йыр һәм тел, кейем һәм аш-һыу. Орнамент - халыҡ тарихының баһалап бөткөһеҙ шаһиты.*
*С.Н.Шитова,*
*башҡорт этнографы, XX быуат аҙағы.*

*Хәйбулла районының Тыуған яҡты өйрәнеү музейы 1992 йылда асыла, Әсмә Мәүлембирҙе ҡыҙы "Этнография" бүлеген туплаусы була. Музейға килеүселәр был гәжәйеп бүлмәгә килеп кереүгә бер тын һүҙһеҙ ҡарап тора. Иң бай экспозицияларҙың береһе - башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейеме күргәҙмәһе. Башҡортта нисә ырыу бар, шунса кейем төрө... Күргәҙмә - Хәйбулла яғы оҫтаһы Әсмә Мәүлембирҙе ҡыҙы Усманованың ижады. Башҡортостанда ғына түгел, донъяла берәү ындай уникаль йыйылма.*

"Кейемдәр тураһында гел ҡыҙыҡһынам. Наил Бикбулатов, Раил Кузеев, Рим Янғужин, Альмира Янбухтина, Светлана Шитоваларҙың китабын уҡыйым. Бер йыл Өфөгә семинарға барҙым. Альмира Ғәйнулла ҡыҙы Янбухтина үҙе оҫталыҡ дәресе үткәрҙе. Уға үҙем теккән бер ҡулдәкте күрһәттем: "Дөрөҫ эшләгәнмеме?" - тип һораштым. "Дөрөҫ эшләйһегеҙ", - тине. Светлана Николаевна Шитова менән дә күп аралаштым. Мин күберәк һорашам, үҙем бер нәмә лә һөйләмәйем. Әгәр ҙә шулай-шулай була ул, тип белгәнемде һөйләһәм, яҙып алырға әҙер генә торалар. Ә мин өндәшмәйем. Тәү мәлдәрҙә шулай тыңлап, өйрәнеп тик йөрөнөм. Уғаса булмай, әсәйем дә үлеп ҡалды. Уның туҡһан йәше тулыуға бер бүләк булыр, тип, ошо кейемдәрҙе тегә башлағайным. Үҙемдең хыялым бар ине бит - теге саҡ һүтелгән еләнде кире тергеҙеп, әсәйемде ҡыуандырырмын, тигәйнем... Булманы, өлгөрмәнем. Ҡуйһаң, уға елән ябыны бүтән насип булмаған...

Беҙҙең Хәйбулла районында бөрйәндәр, үҫәргәндәр, ҡыпсаҡтар йәшәй. Ялан Ҡыпсағы тигән ауыл бар ине, хәҙер юҡ ул, шунда ҡара-ҡыпсаҡ ҡәүеме йәшәне. Шул ауылдан өс саҡрымда Айыулы тигән ауылда уҡыттыҡ, шунда ла кешеләрҙән һораша торғайным. Баяғы минең һорашыуымдың, ҡыҙыҡһыныуымдың сәбәбе бер - кейемдәрен өйрәнеү.

1990 йылда Ишмулла Дилмөхәмәтов йыйынына Күгәрсен районы Сәнкем-Тәүәкән ауылынан килтерелгән тирмәгә кереш генә үҙебеҙҙең район тирмәһен ҡорҙоҡ. Сәнкем тирмәһендә бер боронғо түбәтәйҙе күреп ҡалдым. Түбәтәйгә төрлө төҫтәге ынйыларҙан теҙеп бетеү сигелгән. Йәйғор бетеү! Сәнкем-ҡыпсаҡтарҙың бетеүе! Илаһи матур тамға! Йәйғор бетеү ҡатын-ҡыҙҙарҙың ғына түгел, ирҙәрҙең дә кейеменә ҡуйыла һәм шунан танылып тора торған булған. Йәйғор бетеү түбәтәй, ҡашмау олоно, елән итәге, елән инсә-яурынсаһында ла осрай, бигерәк тә балалар кейеменә мотлаҡ ҡуйыла торған булған..."

**Сәрүәр СУРИНА.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***Йомшаҡ урман юлын батыра баҫып бала артынан эйәргән айыу. Бына бер ҡарағай төбөнә туҡтаған бала. Һыҙырылған урындарҙы ҡарап, сайырын сәйнәргә алғандыр, тигән һығымта яһаны.***



*МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ*

# ӘРУӘХТАР ЯРҘАМЫ БУЛДЫМЫ?



**"Әҙерәк машинала ултырып тор, балам. Делянкаға үтеп булмаҫ машина менән. Һине эйәртһәм, тауға менгәндә арырһың. Мин оҙаҡламайым, асыҡһаң, һыуһаһаң, сумканан ризыҡтар алып, ашап алырһың..." - тине бәһлеүәндәй атаһы һәм ҡулына балтаһын тотоп, эре аҙымдар менән ышаныслы баҫып, күтәртелгән юлдан төшөп, урманға ыңғайланы.**

Эй, урманға тәүгә сыҡмайҙар ҙа инде. Атаһы менеп киткән тауҙа ла булғаны бар. Тау башында тирә-яҡҡа ҡарап тороуы ғына матур, менгәнгә тиклем аралағы батҡыл үҙәкте үтәһе, оҙон, еүеш үлән араһынан бараһы бар. Уны сыҡҡас, тауҙы менеүе үҙе бер этлек. Беренсе тапҡыр менгәндә, атаһы бүтән эйәртмәҫ, тип мыжымай түҙҙе, хәҙер бер ҙә атлығып тормай. Ә шулай ҙа шәпләнеп, ризалығын белдереп башын һелкеп ҡалһа ла, атаһы күҙҙән юғалыуға уҡ күңелһеҙләнә башланы. Тәүҙә машина тәҙрәһендә бызылдаған күгәүендәрҙе тотоп, ҡорһағына үлән тығып осороп ебәрҙе. Хәс тә вертолет кеүек осоп киттеләр. Бер нисәүһенең, осоп арығанһыңдыр, хәҙер йәйәү йөрө, тип, ҡанаттарын өҙөп ебәрҙе. Үлтергеһе лә килмәй уларҙы, тик бигерәк тынғы бирмәйҙәр, йәйҙең йәмен бөтөрөп безелдәшәләр генә. "Улар ҙа Алла мәхлүҡтәре, тәбиғәттең бер ҡоштары. Былай ҙа уларҙың ғүмерҙәре ҡыҫҡа, үҙеңә теймәһә, үлтермә", - тип ҡартатаһы теймәҫкә ҡушһа ла, ҡара тап булып атҡа һырыһа, устары ҡыҙыл ҡанға буялғансы үлтерә уларҙы. Рәхмәт йөҙөнәндер, аттары моронон битенә тейҙереп-тейҙереп ала. Рәхәәәт...

Күгәүендәр ҙә ялҡытты. Ашағыһы килмәһә лә, сумканы ҡутарып, тәмлекәстәр ашап алды. Йыбанһа ла, атаһын сабыр ғына көтөргә тырышты - ирҙәр сабыр була, тип өйрәтә лә ҡартатаһы. Ҙур инде Фәрит, тиҙҙән алты йәше тула, унға тиклем иҫәпләй ҙә белә. Уның уйҙарын бүлеп, тышта ҡыштырҙау ишетелде. Машина тәҙрәһенән үрелеп ҡарауға, алда, юл уртаһында, ҙур матур бесәй ултырғанын күрҙе. Эй, матурлығы, ҡолаҡтарына әллә алҡа элгән инде. Һуң, был Рөстәмдәрҙең бесәйе бит. Холоҡһоҙланды, урманға алып барып аҙаштырҙым, тип һөйләнә ине, ҡалай ҙурайып киткән. Урманда сысҡан күп, ашағандыр туйғансы. Өләсәһе Фәриткә: "Аша, балам. Ашаһаң, ҙурайырһың",- тип тыҡып ҡына тора. Бесәйҙәр менән һуғышып, ҡолаҡтары яраланып, сапсылып бөткән ине, ниндәй матур булып йөн үҫкән. Бесәй тороп, еҫкәнеп, машина тирәләй йөрөнө лә, ҡапыл капотҡа һикереп менде. Уны яҡындарыраҡ күрергә тырышҡан Фәритте күреп, бер ырғыуҙа юл ситенә үк етеп туҡтаны.

Рөстәмде ҡыҙыҡ итергә булды Фәрит, аҙаштырған бесәйен тотоп алып ҡайтып, ихатаһына ебәрергә. Ҡапыл башына килгән уйын тормошҡа ашырырға булып, йәһәтләп машинанан сығып, бесәйҙе саҡыра башланы: "Бес...бес...бес..." Тик бесәй, ят кешегә килгеһе килмәнеме, урман яғына ынтылды. Артыҡ ҡабаланмай ҙа, тота алырһыңмы, тигәндәй, ҡырғараҡ китеп, күҙәтеүен белде. Күтәрелгән юл ситендәге бейек үләнде үткеһе килмәһә лә, ҡыҙыҡһыныуы еңде Фәриттең. Хәҙер инде иркәләнеп кенә бесәйгә яҡынланы. Өс-дүрт аҙым ҡалыуға, уныһы тағы төпкәрәк инде. Үҙенә иптәш табыуға ҡыуанып, уның артынан атланы ла атланы. Бесәй ағас башына менгәс тә, уның артынан менмәксе булып, оҙаҡ аҙапланды. Тик хәле бөтөп арығас ҡына, ситкәрәк ултырып, хәл йыйҙы. Бесәй ҙә бер ни тиклем Фәритте ҡарап ултырҙы ла, икенсе ағасҡа ырғып, күҙҙән юғалды. Фәрит килгән юлынан машинаға табан атланы. Бесәйгә әүрәп, алыҫ ҡына киткәнлеген, аҙашҡанлығын белмәй ине әле.

* * *

Ниһәйәт, нисә йыл һораған ун кубометр ағасты бирҙеләр Хәбиргә. Ағасы һәйбәт тә, тик текә тау башынан әләкте, төшөрөүе мәшәҡәтле булмаҡсы. Йығып, ботап, өйөп ҡуйҙы ла, алып ҡайтырға уңайлыраҡ юл эҙләй башланы. Бер урында йылға аша күпер һалып, тураҡ тарттырмаҡсы булып самалағайны ла, килеп сыҡмаҫ, үҙәге бигерәк лүтерле, тип, кире уйланы. Ҡулындағы балтаһы менән билдәләр һалып йөрөнө лә, ҡул һелтәне. Арыраҡ барып, икенсе үҙәктән кисеү, юл эҙләр, тип ҡарар итте һәм машинаһына табан ыңғайланы. Килеүенә, машинаһында улы юҡ ине. Шаярып йәшенгәндер тип, тәүҙә өндәшмәй генә сәйен һемереп алды, һыуһағайны. Унан машина аҫтын, тирә-яғын ҡараштырып, һөрәнләй башланы. Шунда ғына ул туҙанлы капот өҫтөндәге ҙур һеләүһен эҙҙәрен күрҙе, теле аңҡауына йәбеште. Улына һеләүһен һөжүм иткән. Сәбәләнеп, ҡайһы яҡҡа һөйрәгәнлеген эҙләп, йүгергеләне. Ямғыр йыуған, ауыр ағас тейәлгән машиналар ҡатырған ҡырсынташлы юлда бер эҙ ҙә күренмәй ине. Тирә-яҡты йүгерә-йүгерә ҡысҡырып оҙаҡ эҙләгәс, бәлки, өйгә юлланғандыр, тигән өмөт менән ҡайтырға сыҡты. Бер нисә соҡорло-батҡаҡлы урында туҡтап ҡараһа ла, улының эҙе күренмәне. Ҡайтып етеүгә туғандарына, күршеләренә хәбәр итеп, бөтә ауыл менән эҙләргә сыҡтылар. Кемеһе һыбай, берәүҙәр машина менән, икенселәре йәйәү, урманды һөҙһәләр ҙә, Фәритте ҡараңғы төшкәнсе таба алманылар. Иртәгәһенә кем ҡайһы төбәктә эҙләйәсәктәрен тәғәйенләп, һүҙ беркеттеләр.

* * *

Насир бабай ҙа төнө буйы йоҡлай алманы. Ҡустыһының юғалған улы ҡайһы тирәлә булыуы мөмкинлеген уйланы. Тик таң алдынан ғына күҙе эленеп, төшөндә таныш аҡлан күреп, һиҫкәнеп уянды. Тәүҙә аҡландың ҡайҙа булыуын иҫенә төшөрә алмай аҙапланды. Аҙаҡ ҡына Бөрйән тарафындағы, ауылдан ун өс саҡрымдай алыҫлыҡтағы сабынлыҡтарҙы хәтерләне. Иртәнге сәйен эскәс тә, йәһәтләп атына һыбай атланып, төшөндә күргән аҡланға юлланды. Юлда барғанда ла, баланың нисек ҡараңғы урманда ҡуныуын күҙ алдына килтереп, хафаланды. Һеләүһен эҙҙәрен бөтөнләй башынан ҡыуып сығарырға тырышты. Бер аҙ барып, тирә-яҡҡа һөрәнләгәс, төшөп, эҙҙәрҙе ҡарап ала ла, атын тағы юрттыра. Ҡояш байтаҡ күтәрелһә лә урманда һалҡын, иртәнге ысыҡ һирпелмәгән әле. Кинәт юлда айыу эҙен абайланы. Атынан төшөп, эҙенә күҙ һалғас та, айыуҙың бик ҙурлығын самаланы. Үҙенең ҙур резина итектәренә үлсәгәндә лә әллә күпме артып ҡала. Тағы, юлдағы үлән араһынан атлаған бала итектәре эҙен күреп, баҙап ҡалды. Тәне эҫелеһыуыҡлы булып, башына ҡан йүгерҙе. Бала артынан атлаған бит был урман хужаһы. Эҙҙәргә ямғыр һибәләгән булыуынан самалауынса, кисәге эҙ. Бөгөн иртәнсәк эре күҙле, ҡыҫҡа ямғыр яуҙы. Төндә... Айыу менән... Артығын уйлай алмай ине башы. Йәһәтләп атына һикерҙе лә, артабан эҙҙәр буйлап китте. Берсә юғалтып, кире табып, оҙаҡ барҙы эҙ буйлап. Йомшаҡ урман юлын батыра баҫып бала артынан эйәргән айыу. Бына бер ҡарағай төбөнә туҡтаған бала. Һыҙырылған урындарҙы ҡарап, сайырын сәйнәргә алғандыр, тигән һығымта яһаны. Унан төшөндә күргән аҡланға килеп сығып, тағы һөрәнләне. Бер инешкә етәрәк ҡолағына бала илауы салынды. Инеш буйындағы батҡаҡта тубығынан батҡан Фәрит илай ине, үҙе: "Итектәремде сығарып алып булмай ҙа ҡуя..."- тип һөйләнә. Насир бабай тыныс ҡына бала янына килеп: "Әй, әттәгенәһе. Сыҡмайҙармы? Хәҙер һөйрәп сығарабыҙ уны. Һин үләндә ултырып тор. Мин итектәреңде сығарып йыуайым..." Шунда ғына ул бөтә тәненең ҡалтырауын, ҡурҡыуын тойҙо. Баланы йыуындырып, бергәләп ашап, сәй эскәндә лә ҡалтыраныуы үтмәгәйне әле. Ҡыялатып ҡына баланан:

- Төндә өшөнөңмө? Һыуыҡ булдымы? - тип һораны.

- Мин Мәфтуха инәйҙәрҙә йоҡланым. Өшөмәнем. Өйҙәре йылы ине, - тип яуапланы.

Ул әбейҙең күптән үлгәнлеген белгән Насир бабай, аптырап ҡалды.

- Өйҙә тормай торғайны, өйҙә булдымы үҙе? - тигән булды ҡаушауын һиҙҙермәй.

- Өйҙә ине. Тағы Сәкинә апай ҙа бар ине. Бергәләп йоҡланыҡ... - Был юлы бөтөнләй һүҙһеҙ ҡалды Насир бабай. Сәкинә тигәне йәш кенә көйө һай ғына һыуға батып үлеп ҡалғайны элек үк. Ниңә үлгәнлеген дә белмәнеләр.

- Юлда бер нәмә лә осраманымы?

- Юҡ. Әй, урманда Рөстәмдәрҙең бесәйен таптым. Тик тотторманы ғына.

Баланы алдына ултыртып, ҡайтырға ҡуҙғалғас та йоҡлап китте, ҡайышын сисеп, үҙенә ҡуша бәйләп ҡуйырға тура килде. Әкрен генә юрттырып, ауылға ингәс тә әбейе фельдшерға, күрше-тирәгә хәбәр итергә йүгерҙе. Шунда уҡ килеп еткән фельдшер ҡыҙыҡай баланың һау-сәләмәт икәнен әйтте. Тик тәненә йәбешкән тиҫтәләрсә талпанды күреп, баш сайҡаны, әкрен генә булышып сығарырға тырышты. Ихатаһында ултырған Насир бабай ғына һеңгәҙәүенән арына алмай ине. Күргән төшө, айыу юлы, батҡаҡҡа батҡан бала, ярҙамға килгән әруахтар... Әҙәмгә һөйләһәң, ышанмаҫ...

**Гөлдәр КӘЛИМУЛЛИНА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



## ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

### 14-се идея: "Мин"ебеҙҙең ауырлығы

Ҡайһы саҡ беҙ үҙ "мин"ебеҙгә шул тиклем ҙур ауырлыҡ һалабыҙ, хатта ул беҙгә йәшәргә ҡамасаулай башлай. Беҙҙең "мин"ебеҙҙең ауырлығы аң даирәбеҙҙе киңәйтер урынға, киреһенсә, йыш ҡына уны сикләй башлай. Минең нимәне күҙ уңында тотҡанды аңлайһығыҙҙыр. Әйтәйек, берәү ресторанға килеп инә лә өҫтәл артына барып ултыра һәм, сырайын һытып, мыжый башлай: "Уф, ике сәғәт буйына магазиндар буйлап сабып, хәлдән тайҙым. Был официант ҡайҙа булған тағы?" Ә официант, моғайын, ике сәғәттән дә ашыу аяҡ өҫтө үткәргәндер. Әгәр теге әҙәм: "Был тиклем өҫтәлдәрҙе нисек хеҙмәтләндереп өлгөрәһегеҙ, етмәһә, ошондай йонсоу көндә?" - тип һораһа, официант ғәжәпләнеп ҡалыр, моғайын. Сит "мин"дең ауырлығы беҙҙекенән ҙурыраҡ булып сыҡҡанда үҙебеҙҙе нисек тойоуыбыҙҙы һиҙгәнең барҙыр әле.

Бер ҡатын үҙен сығырынан сығарған хәл тураһында һөйләне. Ул иренә: "Бөгөн иртәнсәк ҡулым һыҙлап уяндым", - ти икән, ә ире: "Ә мин бөтөнләй ҡулдарымды күтәрә алмайым", - тип яуап ҡайтарған. Бер кемгә лә, нимәһелер ауыртҡанда, икенсе берәүҙең тағы ла нығыраҡ ауыртыныуы оҡшамай. Ундай саҡта һинең "мин"ең сикһеҙ ауырая.

Инжилдан бер эпизодты иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле. Уҡытыусы бер аҙға ғына аулаҡта ҡалырға теләгән, ләкин биш меңләп кешенән торған халыҡ төркөмө Уны янъяҡлап уратып алған. Уны нисек тә күреп ҡалыу өсөн, арттағылары этеп-төртөп алға ынтылған. Уның "Мин"е тыныслыҡ һәм яңғыҙ ҡалыуҙы талап иткәндә, Ул асыуланырға тейеш ине лә бит, ләкин үҙ уңайлығы хаҡында онотоп, тыныс ҡына: "Барыһын да ултыртығыҙ", - тигән. Һәм бөтәһенә лә ашарға биргән.

Бөйөк шәхескә хас һыҙат - йыуашлыҡ. Мин ярамһаҡланыуҙы әйтмәйем. Бөтөнләй икенсе нәмәне күҙ уңында тотам. "Мин"дең ауырлығы "Беҙ"ҙең ауырлығы менән тигеҙләшеүен һиҙемләргә һәм рычагҡа баҫмаҫҡа кәрәк.

Ғүмер үткән һайын, күпме ваҡыт үҙ "мин"еңде беренсе урынға ҡуймаҫҡа мөмкин булыуын асыҡларға тырыш. Шул саҡта һин дуҫтарың артыуын, йәшәүе күпкә мәғәнәлерәк, күңеллерәк булыуын төшөнөрһөң.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

КӨН ҠАҘАҒЫНА

# КҮҘАЛЛАУ...

## ысынбарлыҡ түгел әле



**Бына бер нисә йыл инде Өфө ҡалаһының генераль планы әҙерләнә. Ниндәйҙер ваҡытта ул тынып ҡала ла, бер мәлдә ҡапыл ҡабаттан күтәрелеп, йәмғиәт тағы ла геүләп ала. Быға тиклем Өфө ҡалаһының үҫешен күҙаллаған элекке генераль планды инде тарихҡа оҙатырға ла мөмкин, сөнки уның нигеҙенә һалынған иҫәпләүҙәрҙең мөҙҙәте үткән. Шуға ла быйыр был мөһим бурысты атҡарыу Рәсәй генә түгел, заманында СССР территорияһы үҫешен планлаштырыу менән шөғөлләнгән, 70 йыллыҡ тарихы булған Мәскәү Генплан институтына тапшырыла. Рәсәйҙең яңы тарихында был ойошма баш ҡала, Мәскәү өлкәһе, Түбәнге Новгород, Ҡаҙан һ.б. кеүек халҡы миллиондан ашҡан ҡалаларҙың генераль үҫеш планын эшләй. Ошо көндәрҙә "Башинформ" агентлығында Өфө өсөн мөһим булған документтың төп мәлдәре менән таныштырҙылар. Сарала Өфө ҡалаһының баш архитекторы Олег Байдин, Мәскәү Генплан институтының территориаль үҫеш буйынса архитектура-планлаштырыу берекмәһе етәксеһе Александр Котенков, 4-се архитектура-планлаштырыу оҫтаханаһы етәксеһе урынбаҫары Наталья Чернышова ҡатнашты.**

- Ҡаланың генераль планы - территорияны үҫтереүҙе планлаштырыу системаһында нигеҙ документ булып тора, - тине Александр Александрович. - Тап ошо нигеҙҙә һәм уға ярашлы башҡа документтар эшләнә. Генпланда ҡаланың барлыҡ тармаҡтарын үҫтереүҙең: транспорт йәки социаль инфраструктура булһынмы, төҙөкләндереүме, рекреацион территориялар, йәмәғәт ұҙәктәре булдырыуымы, ҡаланың тарихи үҙәген һаҡлап ҡалыуымы - талап ителгән балансы һаҡланырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта ул ҡала хужалығы менән һөҙөмтәле идара итеү бурыстарын тормошҡа ашырыу буйынса кәрәкле һәм аныҡ план өсөн нигеҙ ҙә булып торасаҡ.

Яңы генплан 20 йылға (2040 йылға тиклем) иҫәпләнгән һәм ул йыл һуңында ҡабул ителергә тейеш. Сифатлы әҙерләнгән документ - ҡаланың һөҙөмтәле үҫеше, ҡала мөхитенең төҙөкләндерелеүе һәм халыҡтың тормош сифатын яҡшыртыуҙы тәүге планға ҡуя. Бөгөн ҡала бынан 15 йыл элек ҡабул ителгән генплан буйынса йәшәй. Ошо осор эсендә демография күрһәткестәре лә, төҙөлөштең макроиҡтисади һәм бюджет шарттары ла, ҡала инфраструктураһы ла, федераль ҡануниәт тә үҙгәрештәр кисерә, биләмәләрҙең сиктәрен дөрөҫләү ихтыяжы тыуа. Генераль пландың төп принциптары булып агломерацияны ла иҫәпкә алған (әлеге ваҡытта унда 2 миллион самаһы кеше иҫәпләнә) үҫеш, ҡала үҫешенең тотороҡло балансы, транспорт һәм инженер инфраструктураһының үҫеше, йәшеллеккә өҫтөнлөк биреләүе, яңы төҙөлөш менән мәҙәни мираҫ объекттарының гармониялы урынлашыуы, үҙәктең һәм периферияның тигеҙ үҫеше, ҡулланыу зоналарының аралашыуы, социаль инфраструктура менән 100 процент тәьмин ителеш, ҡала мөхитендә йәшәү сифатын күтәреү тора.

Генераль планды эшләүселәр 2040 йылға тиклем баш ҡала халҡының 1250-1300 мең булыуын күҙаллай. Шулай уҡ эш урындары, балалар баҡсалары, мәктәптәр һәм был учреждениеләргә ихтыяж ҙур булған урындарҙы ла ентекле тикшергән белгестәр. Мәҫәлән, бөгөн балалар баҡсаларында 1000 кешегә 46 урын тура килһә, йәғни балалар баҡсаларының 99 проценты артығы менән тулһа, мәктәптәрҙә 1000 кешегә 160 урын тура килә, артығы менән тулы мәктәптәр күләме 70 процент тәшкил итә. 2040 йылға иһә урындар буйынса ла, мөмкинлектәр буйынса тейешле шарттар тыуҙырыласаҡ.

Транспорт инфраструктураһына килгәндә, ул Өфө менән периферияны тоташтырырға, шул уҡ ваҡытта ҡала эсендә тығындар барлыҡҡа килтермәҫкә тейеш. Был йәһәттән трамвай бәйләнешенә һәм тиҙ йөрөшлө электричкаға өҫтөнлөк биреләсәк. Аныҡлап әйткәндә, трамвай Өфөнөң көньяғы менән төньяғын, шулай уҡ Инорс, Һупайлы, Лихачев сәнәғәт узелын үҙәк районлар менән бәйләргә тейеш, шулай уҡ Дим районына һәм Затонға трамвай юлы һалыу ҙа күҙаллана. "Ҡайһы бер ҙур ҡалаларҙағы кеүек, кешегә тәғәйен ергә барыу өсөн ҡатмарлыҡтар кисермәҫкә, шул уҡ ваҡытта ул шәхси транспортҡа түгел, ә йәмәғәт транспортына өҫтөнлөк бирергә, урамдарҙа шәхси транспорт 25 процентҡа кәмергә тейеш", - тине Александр Александрович. Иҫәпләүҙәр буйынса, әгәр бөгөн кеше автомобилдә тәғәйен урынға 38-40 минут барһа, 2040 йылға был ваҡыт 31 минутҡа ҡалыр тип күҙаллана. Йәмәғәт транспортында иһә был ваҡыт 7-10 минутҡа ҡыҫҡарырға тейеш.

Документ йәмәғәтселек фекерен дә иҫәпкә аласаҡ, бының өсөн ул йәйгеһен йәмәғәт тыңлауҙарына сығарыласаҡ. Әле иһә халыҡ фекерен өйрәнеү өсөн opros.genplanmos.ru/poll/ufa адресы буйынса тәҡдимдәр ҡабул ителә. "Беҙ һәр фекергә ҡолаҡ һаласаҡбыҙ", - ти документты эшләүселәр. Әлбиттә, баш ҡала халҡы бындай мөмкинлекте файҙаланыр тип ышаны килә, ни тиһәң дә, презентациялар нисек кенә матур үтмәһен, улар барыбер бик күп һораүҙар тыуҙыра. Мәҫәлән, быға тиклем Өфөлә "Парк эсендәге ҡала" концепцияны тормошҡа ашырылһа, баш архитектор Олег Байдиндың журналистарҙың һорауҙарына биргән аныҡ булмаған яуабынан тоҫмалланыуынса, киләсәктә ҡала урмандары ла төҙөлөш эштәре алып барыласаҡ майҙанға әүерелеүе мөмкин. "Башҡа миллионлы ҡалаларҙа ҡала урмандары 3-5 мең гектар тәшкил итһә, Өфөлә ул 21 мең гектар. Үҫентеләр бик күп, беҙгә эшләргә эш етә", - тине ул һәм ҡала урмандарының бөгөн күҙалланған "халыҡ өсөн уңайлы территория түгел, кереһенсә, хәүефле урын" булыуын да билдәләне, сөнки уларҙа тротуарҙар, юлдар юҡ, төҙөкләндереү эштәре алып барылмай, нигеҙҙә, был территория халыҡтың йәшерен гараждар һәм мөгәрәптәре урыны.

Эйе, халыҡ һаны артыуы торлаҡ фонды артыуын талап итәсәк. Бының өсөн, әлбиттә, яңы төҙөлөш майҙансыҡтары кәрәк буласаҡ. Өфөнөң ярымутрау икәнен иҫәпкә алғанда, уның майҙанын бер нисек тә арттырыу мөмкин түгел (хәйер, генплан төҙөүселәр ҡаланың аныҡ ҡына сиге билдәле булмауын да белдерә). Ҡариҙел һәм Ағиҙел йылғалары ашаһында ла ҡала ерҙәре биғүк күп тип булмай. Тимәк, халыҡты торлаҡ менән тәьмин итеү өсөн бейек ҡатлы йорттар төҙөргә һәм уларҙы урынлаштырыу майҙандары табырға тура киләсәк. Икенсе яҡтан, геологик күҙлектән ҡарағанда, был ҡаланың аҫтында карст барлыҡҡа килеүе лә хәүефләндерә. Был хаҡта яҙып та сыҡҡайныҡ инде. Ә төҙөүселәр был проблемаға иғтибар итмәй, ҡала хакимиәтенең уларға йөғонто яһау мөмкинлеге юҡ.

Уйланырға мәжбүр иткән тағы бер мәсьәлә: генплан күҙаллаған эштәрҙе башҡарыу өсөн ҙур күләмдә финанстар кәрәк буласаҡ. Әлбиттә, ҡала ҡаҙнаһы ғына быны күтәреп сыға алмаясаҡ, республика һәм федераль бюджеттан да өҫтәмә финанслау, инвесторҙар ылыҡтырыу талап ителәсәк. Бынан тыш, ошо ҙур пландарҙы тормошҡа ашырыу барышында килеп тыуған тағы әллә күпме ваҡ эштәргә сығымдар... Ҡыҫҡаһы, генераль планды ысын һәм уңайлы тормош вәғәҙә иткән документ тип ҡабул итергә ярамай. Барыһы ла уны тормошҡа ашырыу барышында асыҡланасаҡ. Уның ни кимәлдә дөрөҫ һәм реаль булыуын ваҡыт күрһәтер.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Март - Апрель (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (6) дүшәмбе | 5:24 | 6:54 | 13:30 | 18:17 | 19:47 | 21:17 |
| 31 (7) шишәмбе | 5:22 | 6:52 | 13:30 | 18:19 | 19:49 | 21:19 |
| 1 (8) шаршамбы | 5:19 | 6:49 | 13:30 | 18:21 | 19:51 | 21:21 |
| 2 (9) кесе йома | 5:17 | 6:47 | 13:30 | 18:23 | 19:53 | 21:23 |
| 3 (10) йома | 5:14 | 6:44 | 13:30 | 18:25 | 19:55 | 21:25 |
| 4 (11) шәмбе | 5:12 | 6:42 | 13:30 | 18:27 | 19:57 | 21:27 |
| 5 (12) йәкшәмбе | 5:09 | 6:39 | 13:30 | 18:29 | 19:59 | 21:29 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



# ҺЕҘ БЕЛГӘНДӘРҘӘН

**Коронавирус сире иммунитеты ҡаҡшаған кешеләр өсөн бигерәк тә ҡурҡыныс, тигәнде ишеткәнһегеҙҙер инде. Шуға ла 65 йәштән өлкәндәргә мөмкин тиклем һаҡланырға кәңәш ителә.**

Иммун системаһын һаҡлау, нығытыу өсөн ниндәй саралар күрергә икәне лә һәр кемгә таныш. Был арала күберәк С витамины ашарға тырышығыҙ, ул кешенең иммун системаһын нығыта. Ҡытайҙар күрә, генетик мутация сәбәпле, әлеге көндә кронавирусҡа ҡаршы вакцина йәки һыналған дауалау әмәлдәре юҡ. Пекин хәрби госпиталенең генераль директоры Чэнь Хорин әйткәндә хәтерегеҙҙә тотоғоҙ: "Йылы һыуға һалынған лимон киҫәктәре ғүмерегеҙҙе ҡотҡара ала". Лимонды өскә бүлеп, сынаяҡҡа һалырға һәм ҡайнар һыу ҡойоп, бер аҙ төнәтеп эсергә. Үткәрелгән тәжрибәләргә ярашлы, лимон һуты вирустарҙы үлтерә. Лимон һуты яман шеш булғанда зарарланған күҙәнәктәрҙе генә үлтерә, һауҙарына бер нисек тә йоғонто яһамай. Уның составындағы кислота юғары ҡан баҫымын, ҡан әйләнешен көйләй, ҡандың ойошоусанлығын кәметә, ваҡ ҡан тамырҙарын һаҡлай.

Ҡытай белгестәре кәңәштәренә ҡушып, Мөхәммәт бәйғәмбәр ҡулланырға кәңәш иткән биш дауа тураһында ла тағы бер тапҡыр хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ. Тәүгеһе - **кыст аль-хинди**. Һиндостанда үҫкән был шифалы үҫемлек тамыры һәм ҡайырынан әҙерләнгән онтаҡ ҡырҡыу еҫле була. Ул вируслы һәм бактериялы инфекцияларға ҡаршы яҡшы дауа, ҡатын-ҡыҙҙарға айырыуса файҙалы, хатта түлһеҙлектән дауаланырға ярҙам итә, тиелә. Ҡулланырға ярамаған осраҡтар һирәк, кыст аль-хиндиҙы балаларға, йөклө һәм имеҙгән ҡатын ҡыҙҙарға ла ҡабул итергә була. Иммунитетты нығытыу өсөн көнөнә 5 тапҡыр бәрәр балғалаҡ кыст аль-хинди онтағын ашарға, аҙағынан йылы һыу эсергә кәрәк - дауаланыу мөҙҙәте 1 ай.

**Ҡара әнис** тә бөтә төр ауырыуҙарҙы иҫкәртеүсе шәп сара. Әнистең төп компоненты тимохинондың яман шеш, бактерияларға ҡаршы тәьҫире көслө, ул организмдың ауырыуҙарға ҡаршы тороусанлығын арттыра. 1 балғалаҡ ҡара әнисте ваҡларға һәм балға ҡушып, иртәнсәк ас ҡарынға, ашарҙан 1 сәғәт алда ҡабул итергә.

**Алма һеркәһе** лә йоғошло ауырыуҙарҙан һаҡланырға ярҙам итә. 1 стакан алма һеркәһе, 1 стакан бал, 25 мл һарымһаҡ һутын ҡушып бутап, парҙа йылытып (ҡайнатырға ярамай) әҙерләнгән төнәтмә бигерәк файҙалы. Иммунитетты нығытыу өсөн 2 ҡалаҡ әҙер дауаны йылы һыуға һалып, 2 аҙна дауамында көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда эсеү ҙә етә. Әммә һаҡ булығыҙ, алма һеркәһен ҡулланырҙан алда табип менән кәңәшләшергә онотмағыҙ.

Борондан билдәле файҙалы үҫемлектәрҙең береһе - **имбир**. Организмды нығытыу маҡсатында 200 грамм имбир, 100 грамм лимон һәм 100 грамм балды ваҡлағыс аша үткәреп (ҡырғыс, ит үткәргес, блендер), ҡушып болғарға. Ауырыу үҙен һиҙҙергәс тә йоҡлар алдынан 1 ҡалаҡ ашап ятығыҙ, ауырыуҙы иҫкәртеү өсөн көн һайын бер ҡалаҡ дауаны 1 стакан ҡайнар һыуға иҙеп эсегеҙ.

Әлбиттә, был халыҡ дауалары тураһында табип менән дә кәңәшләшергә кәрәк. Һәм бөгөн иң мөһиме - гигиеник ҡағиҙәләрҙе үтәү, күмәк халыҡ араһында йөрөмәү, ваҡытыңды мөмкин тиклем күберәк үҙ өйөңдә, ғаилән менән үткәреү.

*Атаһы тороп, улы һөйләгәндән биҙ; әсәһе тороп, ҡыҙы һөйләгәндән биҙ.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



АФАРИН!

**Милли йәштәр театры сәхнәһендә төрөк яҙыусыһы Решат Нури Гүнтекиндың "Салы ҡошо - һайрар ҡош" романы буйынса әҙерләнгән "Уйҙарымдан ғына юғалма" тигән яңы спектаклдең премьераһы булып үтте. Режиссеры Илдар Ғиләжев тәҡдиме менән ул мәшһүр башҡорт режиссеры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, быуын-быуын актерҙарҙың остазы һәм ошо Милли йәштәр театрын асыуға (бынан теүәл утыҙ йыл элек!) юл ярып йөрөгән оло шәхестең - Ғабдулла Ғиләжевтың рухына арналды. Быйыл уның тыуыуына 90 йыл.**

# САЛЫ ҠОШО МОҢО...

## һағындырғайны



Яңы спектаклдең сценарийын Илдар Ғиләжев менән Зөһрә Буракаева яҙған. Салы ҡошоноң башҡорт сәхнәһенә ҡуныуы кемгәлер оҡшамағандай һуҙҙәр ҙә йөрөнө алдан, һәр хәлдә, уны һаға-йып ҡаршы алдылар. Әммә, минеңсә, классик роман биргән уй-хис дарьяһы-нан бөгөнгө заманда ла янғырашлы тойғоларҙы тотоп алыу - бик ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс. Тамашасыға кино-сериал аша яҡшы таныш булған герой-ҙарҙы сәхнәлә күреү үҙе үк иғтибарҙы йәлеп итә. Шул уҡ ваҡытта авторҙар әҫәрҙең сәхнәүи лейтмотивын да оҫта тотоп алған. Нимә ул мөхәббәт? Ике йөш, саф йөрәктең дөрләп яныуымы? Әллә һынауҙар аша лайыҡлы үтә алыу-сы тәрән хисме? Был сағыу музыкаль әҫәр мәңгелек ҡиммәттәр хаҡында уй-ланырға мәжбүр итә. Был тәңгәлдә спектаклдең иң ҙур ижади векторы уның өсөн махсус яҙылған көйө, йыры, музыкаль биҙәлеше булды. Башҡорто-стандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Урал Иҙелбаевтың композиторлыҡ юлы мюзиклдар ижад итергә ынтылы-штарҙан тора һымаҡ. Был спектаклдә лә ул миллион уҡыусыға һәм тамаша-сыға бөйән ителгән, миллион йөрәктәр тарафынан тулыландырылған мөхәб-бәт хистәрен, ниһайәт, үҙенсә музыка теленә күсерә.

Был әҫәр һәм уның геройҙары тура-һында әллә күпме һөйләргә була. Төрөк кино артистарының һоҡланғыс матур уйыны бөтә илдәрҙә уларға ғашиҡ итте. Киносериалды Башҡортостан юлдаш телевидениеһы 2006 йылдың көҙөндә башҡорт теленде тәүбашлап эфирға сығарҙы, шулай тәржемәүи фильмдар исемлеген башланы. Ул ауҙармаһы ми-нә эшләргә тура килгәйне. Тамашасы яратып өлгөргән геройҙарҙың башҡ-ортса "һөйләшеүе" ифрат күңелле бул-ды. Фильмда төп мотив - кешене төп ҡотҡарыусы кешелеклек.

Ә Милли йәштәр театры спектаклен-дә беҙ классик образдарҙың галерея-һын - теҙмәһен күрҙек - улар йырлы, бейеүле, уйынлы һәм иҫтә ҡалырлыҡ сағыу мизансценаларҙа башҡарылды.

Мәҫәлән, Фәриҙәне һыйындырған хәр-би врач Хәйрулла бей (Рәмзил Сәлмә-нов, Ш.Бабич исемендәге йәштәр пре-мияһы лауреаты) бик хәтерҙә ҡалды. Уның олпатлығы, изге күңеле, атайҙ-арса йылылығы һәр хәрәкәтендә сағы-ла. Әлбиттә, төп геройҙар - Фәриҙә ме-нән Кәмран (Лилиә Искужина менән Илнур Лоҡманов), уларҙың һәр тын алышы тамашасыға килеп етте, уйҙа-рына бәрелде, үлсәнде, баһаланды. Фә-риҙә өсөн Өфө сәхнәһендә яңынан "ты-уыу" бигүк еңелдән булмағандыр, сөн-ки йәш актриса үтә көсөргәнешле уй-наны, был уның геройының нескә хис-тәрен ҡаплап китте. Ә Кәмран роле иф-рат ышаныслы һәм тыныс уйнаған ак-терға насип булған, уның бер аҙ ҡыйы-уһыҙлығы, бошмаҫлығы, ирҙәрсә тота-наҡлығы - һәр хәрәкәте күҙ алдында торғандай оҫта уйналды. Дәрәжәле ир-егеттәр образын башҡарырҙай актерҙар театрҙың труппаһында етерлек. Рәжәп әфәндене (Мәғәфүр Усманов, БР-ҙың халыҡ артисы) бөтә биҙәк-һынланыш-тарын тулы итеп уйнауы сәхнәләге ау-ыр тарихтарға йәм бирҙе, Мөхтәрҙең (Шәһит Хамматов) ҡыҫҡа ғына образы актерҙың шәхси оҫталығы менән ба-йып, күркәм бер тамаша булып иҫтә ҡалды. Ихсан бей (Илгиз Таһиров, Ш.Бабич исемендәге йәштәр премия-һы лауреаты) роле лә тамашасыларҙың алҡыштарына күмелде, ә Азиз бей (Ил-сур Хәбиров, БР-ҙың атҡаҙанған арти-сы) менән Йософ әфәнде (Радмир Аб-дуллин, Ш.Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты) образдары актер-ҙарҙың шәхсән үҙенсәлекле уйыны ме-нән байып, классик әҫәрҙең бәсен юғалтмайынса, ентекле тасуирларға ярҙам итте. Спектаклдәге ҡатын-ҡыҙ образдары ла төрлө һынауҙарға юлыҡ-ҡан һәм юғалтыу-табыштарға тарөнгән яҙмыштарҙы сағылдыра алды, былдай төрлөлөктә бер төрлөлөк тә бар, айыр-малыҡтар ҙа күҙгә бәрелә - һәр хәлдә, бер актриса ла ҡоро массовкаһы уйна-май, ә күмәк сәхнәнең әсендәге харак-терҙарҙы ҡалҡытырға ынтыла.

"Уйҙарымдан ғына юғалма" музы-каль спектаклен тамашасы йылы ҡабул итте, бер-ике урында оҙонға һуҙылған-дай тойолһа ла, билдәле персонаждар-ҙың уйынын аҙағынаса ҡарап бөтөү теләге лә булды. Ләкин премьера көндә дөйөм атмосфераны ниндәйҙер ҡаба-ланыу, икеләнеп уйнау тойғоһо ла ял-мап алғайны. Ҡайһы бер геройҙарҙың сәбәләнеүе, әле бер, әле икенсе төҫкә инеп, ваҡиға асылын онотоп, буталып китеүе һиҙелде. Ҡыҫҡа ғына ролдәрҙән тукылған спектаклдә артистарҙың һәр береһе үҙ күренешен тос һәм төплө уй-нарға төрлөсә ынтылыуҙан да килләлер был "һикертмәкле уйындар".

Фәриҙә менән Кәмрандың мөхәббәт тарихы - ул мәңгелек һабаҡтан бөгөнгө йәштәргә бер дәрес. Ике йәш йөрәк араһында тыуған саф һөйөү хисен ҡә-ҙерләү, хөрмәт итеү, тоғро һаҡлау - оло бәхеткә алып килә торған сабырлыҡ юлы. Ошо илаһи сәғәәт юлын йәшә-ҡарты, ярлыһы-байы бергәләшеп ке-шеләрсә һаҡлағанда ғына донъяла әҙәмдәр бәхет ҡошон таба алыр. Бәхет ҡошо ана шул Салы ҡошо кеүек ғорур һәм нескә күңелле, ихлас һәм фиҙакәр йән.

Инсценировканы башҡорт теленә тәржемә итеүсе Рәзилә Ырыҫҡужина, йыр авторҙары Айгөл Үтәғәнова менән Гөлфиә Юнисова, ҡуйыусы рәссам Юлиә Ғиләжева, хореограф Александр Родионов, яҡтыртыусы рәссам Динис Черепанов - һәр кем үҙ көсөн һалып, легендар Салы ҡошон беҙҙең Йәштәр театры сәхнәһендә һайратты. Һайра-һын әйҙә Салы ҡошо, һағындырған бит уның моңо.

**Кинйә МӘЗИТ.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Март айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Архангел районы** Архангел ауылынан Венера Мостафина, **Әбйәлил районы** Яңы Балапан ауылынан Фәрих Бикйәнов, Байым ауылынан Зөйнәп Яҡупова, Әбйәлил ауылынан Нәзифә Әхтәмова, **Әлшәй районы** Изрис ауылынан Сәүҙиә Тали-пова, **Баймаҡ районы** Билал ауылынан Рафиҡ Әбйәлилов, **Бишбүләк районы** Ҡанығай ауылынан Мәүлиха Солтанова, **Белорет районы** Үткәл ауылынан Фәрзәнә Хәйбуллина, **Стәрлебаш районы** Табылды ауылынан Салауат Вәхи-тов, **Учалы районы** Уральск ауылынан Айгөл Шөғәйепова, **Хәйбулла районы** Яңы Ергән ауылынан Шәрифйән Шәрипов, **Өфө ҡалаһынан** Вәриә Фәхри-ева, Лилиә Нафиҡова, Гөлнара Әхмәтшина, Рина Мөслимова, Таңһылыу Хәсәнова, **Туймазы ҡалаһынан** Руфия Гәйзуллина, **Өфө районы** Шемәк ауы-лынан 90 йәшлек юбилейын билдәләүсе Рафаэль Кәҙерғәлинде һәм башҡа гәзит уҡыусыларыбыҙҙы күркәм ғүмер байрамдары менән ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Сәләмәтлек, рух ныҡлығы һәм бәхетле оҙон ғүмер теләйбеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ-ҙәренә әйәреп, донъяуи хә-ҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңыш-лы кеше булыр өсөн.**

# БАЛА-САҒА ТӘРБИӘҺЕ...

## утҡа-һыуға төшөрөр

Ерек утын яҡма - уның ҡыҙыуы юҡ; еңгә ҡатын алма - уның йылыуы юҡ.

Атаһы тороп, улы һөйләгәндән биҙ; әсәһе тороп, ҡыҙы һөйләгәндән биҙ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Урмандар ҡыҙырып, күп батырлыҡтар ҡылып йөрөгән бер аҡыл эйәһе. Быуна бер саҡ ағас төбөндә ял итеп ултырғанда һауанан осоп барған һа-йыҫҡан уның башына тиҙәген ауҙарып китә. Аҡыл эйәһе ҡыҙып китеп, осоп барған ҡош-ҡа асыулы ҡарашын һирпә. Һайыҫҡан шун-да уҡ туҙанға әйләнә. Үҙенең былдай ҡеүәте барлығын тойоу уның башын әйләндерә, үҙ һәләтлегенә маһайыу барлыҡҡа килә. Шу-нан ул үҙенең ошондай һәләтлеген тағы кемдәлер һанап ҡарау теләге менән ҡалаға йүнәлә. Бер дин әһеленең йортона инә. Йорт ишеге төбөнә еткәс, хужабикәнән ашарға сығарыуын һорай. "Көтөп тор, - ти хужабикә, - әле мин хужама ярҙам итәм". Аҡыл эйәһе уға асыулы ҡарашын һирпә, әммә хужабикә юҡҡа сығыу урынына көлөп ебәрә һәм: "Һин яңылыштың, аҡыл эйәһе. Мин бит һайыҫҡан түгел", - ти. Аҡыл эйәһе был һүҙҙәрҙе ишеткәс, ҡаушап ҡала: "Ул ҡайҙан белгән икән?"- тип уйлай. Ә хужа-бикә иренә өйҙәге эштәрен тамамларға ярҙ-ам итә лә, ашарға алып, аҡыл эйәһе янына сыға. "Һайыҫҡан менән булған хәлде һин ҡайҙан белдең? Әйтмәйәң, хәйерендә ал-майым", - ти аҡыл эйәһе. "Минең иремә то-ғролоҡтан башҡа ҡануным да, инаныуым да юҡ, - ти хужабикә. - Шуға ла минең тойоу һәләтем дә көслә. Һин базарға барып, унда-ғы ит һатыусы Дауыт менән һөйләшһәңсе һәм унан сабырлыҡҡа, етдилеккә өйрән-һәңсе..."**

**Аҡыллы ҡатындан ошондай кәңәш ишет-кәс, аҡыл эйәһе Дауытты эҙләп баҙарға ки-тә. Үҙенә сәләм биргән сит кешене күргәс, Дауыт: "Нимә, аҡыл эйәһе, һине минә ире-нә тоғро ҡатын ебәрҙеме?" - ти. Быны ишеткәс, аҡыл эйәһе аптырап китә һәм һо-рай: "Һиндә, ит һатыусыла, былдай тойом-лау ҡайҙан?" Быға ҡаршы ит һатыусы шу-лай тип яуап бирә: "Мин үҙемдең атайым һәм әсәйемде яратам һәм хөрмәт итәм. Улар минең берҙән-бер таяныстарым. Тәүҙә уларҙы йыуындырам, шунан үҙем йыуынам. Тәүҙә уларҙы ашатам, шунан үҙем ашайым. Тәүҙә уларҙы йоҡларға ятҡырам, шунан үҙем ятам. Быуна шуның өсөн дә күпте белем һәм тоям. Ит һатам, шуға көн күрәм. Сауҙа менән шөғөлләнеү - халыҡҡа хеҙмәт итеү, ә аҡсаға ҡыҙыуы түгел. Мин дә, баяғы иренә тоғро ҡатын да, үҙ белемебеҙ менән маһай-майбыҙ, маһайыу - белемдең дошманы. Шуның өсөн Хоҙай беҙҙе сикһеҙ белем менән бүләкләгән. Аҡыл эйәләре араһында лайыҡлы аҡыл эйәһе булғың килһә, аҡы-лың менән маһайма..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
27 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.



«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3700
Заказ - 266/03